ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20-26 апрель (алағарай) 2019

№ 16 (850)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:**

**Тел - тере шишмә...**

үлмәҫ, киләсәккә еткерербеҙ



2-3, 6

**Донъяла тиңе булмаған...**



сәнғәт өлгөләре тыуҙырған милләт вәкиле беҙ

8-9

**"Йөрәктәге яҙмалар" ни тураһында?**



11

**Яҙмышты кем билдәләй,**



йондоҙҙармы, әллә үҙебеҙме?

12-13

**ТВ-программа** 14

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Әлеге мәлдә республика ҡалалары һәм районддарының бөтә почта бүлексәләрендә лә 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 2019 йылдың икенсе яртыһына - 624 һумға, абонент йәшнигенә - 594 һум 06 тингә; Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I-II группа инвалидтары - 563 һум 40 тингә, абонент йәшнигенә - 539 һум 46 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур баҫмалар һәм Башҡортостан "Юлдаш" радиоһы фонды аудиокитабы менән бүләкләнер. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Киләһе йыл Рәсәйҙә Халыҡ ижады йылы тип иғлан ителде. Ошонан файҙаланып, республикала ниндәй эштәр аткарып ҡалырға кәрәк, тип уйлайһығыҙ?

***Нәфисә ТУЛЫБАЕВА, Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директор урынбаҫары:*** Халҡыбыҙҙың иҫ киткес бай матди булмаған мәҙәни мираҫы бар. Халыҡ ижады архивтарҙа, фондтарҙа һаҡлана, уларҙы ғалимдарыбыҙ, телселәребеҙ өйрәнә, баҫып сығара, йырсыларыбыҙ йырлай һ.б. Һәм ниндәйҙер ҙур мәҙәни сараларҙа беҙ ошо мираҫты күрһәтеп ҡалырға тырышабыҙ. Әммә ошо матди булмаған мәҙәни мираҫ бөгөнгө көнгә тиклем бер генә ҡанун, бер генә документ менән дә нығытылмаған, уны яҡлау яғы бөтөнләй ҡаралмаған. Шуға ла "Ҡаһым түрә"не, "Азамат"ты, "Уйыл"ды һ.б сәхнәнән башҡалар үҙ йыры тип иғлан итеп йырлай, бейеү көйҙәре, уйын ҡоралдары ла ошондай үҙләштереүҙәргә дусар.

Заманына күрә халыҡ ижадын ҡанунлаштырып ҡуйыуҙың кәрәге лә булмағандыр. Тик бөгөн бөтөн донъяла глобаллəштереү, милләттәр араһындағы сиктәрҙең юйылыу ҡурҡынысы бар. Шул ҡурҡыныс барҙа халҡыбыҙҙың матди булмаған мәҙәни мираҫын яҡлау яғын ҡайғыртырға тейешбеҙ. Тәбиғәт, архитектура ҡомартҡыларын һаҡлау буйынса хатта үҙәктәр эшләй. Ә иң эскерһеҙ, кешенең хис-тойғолары менән бәйле өлкә - ауыҙ-тел ижады өлгөләре иҫәпкә лә алынмаған, һаҡланмай ҙа, яҡланмай ҙа. Кешелектең матди булмаған мәҙәни мираҫы ҡомартҡылары исемлегенә Рәсәй Федерацияһынан бер нисә генә әйбер, әйтәйек, яҡуттарҙың олонхоһы һ.б ингән. 2006 йылда "Рәсәйҙә традицион халыҡ мәҙәниәтенә дәүләт ярҙамы тураһында"ғы Дәүләт советы ултырышында В. Путин Рәсәй халыҡтарының матди булмаған мәҙәни мираҫы исемлеген үҙ илебеҙ кимәлендә төҙөү мөмкинлеге хаҡында белдерҙе. 2009 йылдан алып Башҡортостан һәм Рәсәй Мәҙәниәт министрлыҡтары, Дәүләт Рәсәй Халыҡ ижады йорто менән берлектә Республика халыҡ ижады үҙәге халҡыбыҙҙың ошо исемлеккә инәсәк матди булмаған мәҙәни мираҫын теүәлләү менән шөғөлләнә. Ул ҡапыл ғына эшләнә торған эш түгел, ентекле өйрәнеү талап итә.

Бынан бер нисә йыл элек Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа ошо матди булмаған мәҙәни мираҫты һаҡлау буйынса республика ҡануны кәрәклеге тураһында һүҙ ҡуҙғатҡайным. Бындай закон Рәсәйҙә булмағанға күрә, уны эшләй алмайбыҙ, тинеләр. Шул уҡ ваҡытта бындай төбәк законы Алтай Республикаһында бар. Беҙҙән һуңыраҡ тотонған Татарстан да 2017 йылда уны эшләне. Миҫал өсөн әйтәм: Ҡурған өлкәһе башҡорттарының халыҡ ижады тураһында китап сыҡһа, унда беҙҙең милли кейемдәребеҙ, йырҙарыбыҙ туплаһыр, һаҡланыр ине. Ә былай ул хазиналарыбыҙ, Ҡурған өлкәһендә йәшәгән татарҙарҙыҡы, тип нығынып китергә бик мөмкин. Ә халыҡ ижадын бөгөн ауылдарға сығып, йыйып ала алмаясаҡбыҙ, сөнки беҙ китеп барған быуындан алып ҡалған тапшырыусы быуын ғына. Халыҡ ижадын белгән быуын вәкилдәре юҡ тиерлек. Шуның өсөн беҙгә был закон бик кәрәк.

Халыҡ ижадын сәхнәлә йырлау, бейеү, ҡурай тип кенә аңлайҙар. Ул бөтөнләй икенсе сәнғәт, ул сәхнәләге заманса сәнғәт, халыҡ ижадының өлгө варианты ғына. Халыҡ ижадының өйрәнә торған яғы бар. Киләһе йылда закон ҡабул итеп, үҙебеҙҙең матди булмаған мәҙәни мираҫ исемлеге булдырып, халыҡ ижадын, йәки матди булмаған мәҙәни мираҫты һаҡлай торған үҙәк төҙөргә тейешбеҙ. Уның эсенә сәсәндәр үҙәге лә, һөнәрселәр үҙәктәре лә инергә тейеш. Бөгөн беҙ кем кейеҙҙе иртәрәк баҫҡан, кем балаҫты иртәрәк һуҡҡан, кем шәлде иртәрәк бәйләй башлаған, тип талашабыҙ. Кем беренсе - быныһы мөһим түгел, уларҙың булыуы һәм һаҡланып ҡалыуы шарт.

**(Дауамы 3-сө биттә).**



12+

БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ

# ТЕЛ - ТЕРЕ ШИШМӘ...

## үлмәç, киләсәккә еткерербеҙ












**Ошо көндәрҙә баш ҡалала үткән әһәмиәтле ваҡиғаларҙың береһендә - Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезында яңғыраған "Ҡурҡмағыҙ, беҙ бергә!" тигән бер һөйләм республикабыҙҙа милли мәғариф мәсьәләләрендә арҡа терәрлек яҡлау, ярҙам ҡулы һуҙырлыҡ һәм борсоған һорауҙарға яуап бирерлек таяныс барлығына өмөт уятты. Күптән тулышҡан проблемаларҙың хәл ителешен көткәндәрҙә ышаныс уятҡан йыйын һөҙөмтәләре ысынлап та һөйөндөрҙө. Уның барышында ҙур системаның бер юçыҡта, бер йүнәлештә, дәррәү эшләү барышына шаһит булдыҡ.**

### Хәл ителер

Республика тарихында беренсе тапҡыр башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының оло йыйыны ҡәҙимге, әммә һуңғы йылдар шауҡымында ғәжәйеп ваҡиғаға тиңләрлек хәл-осраҡтарға бай булды. Әйтәйек, сараның алып барыусылары ла, сәхнәгә күтәрелгән съезд ҡатнашыусылары ла матур итеп саф башҡортса телмәр тотто. Йәмғиәттә һирәк була торған күренештәр халыҡты ҡужғытып ебәрә икәнен беләбеҙ, хатта бына ошондай һәр кемдең туған теленә ҡарата ябай ғына иғтибарын тойоу ҙа ҡатнашыусыларҙың күңелен арбаны ла ҡуйҙы. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының хеҙмәтен баһалап, төрлө кимәлдәге наградалар тапшырылғас, делегаттар бөтөнләй дәртләнеп китте. Шундай күтәренке кәйефтә улар Өфө ҡалаһының М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы, М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы, Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһына һәм Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына юлланды. Һуңғыһында башҡорт телен туған тел булараҡ уҡытҡан педагогтар йыйылды һәм белем усағы менән танышып сыҡҡандан һуң, тәжрибәле коллегаларының оçталыҡ дәресен ҡарап, форсайт-сессия эшендә ҡатнашты. Билдәле булыуынса, уларҙы борсоған һорауҙар - башҡорт теле дәрестәренең сәғәттәре кәметелеү, ата-әсәләрҙән балаһын туған телдә уҡытырға ризалыҡ биреү тураһында ғариза яҙҙырыу, йәш быуындың туған телен насар белеүе, уҡытыу әсбаптары һәм методик ярҙам күрһәтеүгә ҡағылышлы мәсьәләләр булды. "Форсайт-сессия барышында коллегалар менән трендтарҙы билдәләгәндә бөтәбеҙҙе лә бер үк мәсьәләләр борсоуын төшөндөк. Башҡорт теленең абруйын күтәреү, уҡыусылар уны өйрәнергә теләһен өсөн беҙҙең генә тырышлыҡ етмәй ине һәм бына хөкүмәт тарафынан иғтибар артыуын тойҙоҡ, ниһайәт. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиада, төрлө конкурс-ярыштарҙа ҡатнашып еңеү яулаған уҡыусыларҙың: "Әҙерәк кенә файҙаһы булырмы икән, апай?" - тигән һорауына киләсәктә ышаныс менән ыңғай яуап ҡайтара алһам, фекер алышыуҙар бушҡа булмаған", - ти Әбйәлил районы Байым урта мәктәбе уҡытыусыһы Әлфиә Абдрафиҡова. Күп кенә уҡытыусылар был съезд тәү сиратта ата-әсәләргә баланы туған телен белеүҙән мәхрүм итмәүҙе төшөндөрөргә ярҙам булыр, тигән фекер белдерҙе. "Башҡорт булһалар ҙа балаларын рус класына уҡырға биреп, рус телен туған теле итеп һайлаған ата-әсәләрҙең күңеленә нисек барып етергә? Тәү сиратта бына ошо мәсьәлә буйынса фекер алышырбыҙ, аныҡ маҡсаттар билдәләрбеҙ тип көтәм", - тип һөйләне Ейәнсура районы Иçәнғол ауылының Ф. Солтанов исемендәге 3-сө мәктәбе уҡытыусыһы Наил Юлдашбаев.

Айырым фекер алышһалар ҙа, мәсьәләләр башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытҡан педагогтар өсөн дә бер үк. Өфө ҡалаһы 111-се мәктәп уҡытыусыһы Наилә Насирова башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡыта. "Беҙ быға тиклем дә биш көн уҡыу режимында эшләй инек. Башҡа предметтарға сәғәттәр һаны аныҡ бүленгәс, башҡорт теле аҙнаһына бер сәғәткә тороп ҡалды. Икенсе сит телен алып ташлағанда ғына башҡорт теле предметына урын табырға була, - ти Наилә Яхъя ҡыҙы. - Беҙгә квалификацияны күтәреү эшенең сифатын арттырырға кәрәк, йәш белгестәр эшкә урынлашҡанда башҡортса әңгәмәләшһәләр, БДИ үткәрелһә лә файҙалы булыр ине". Әйткәндәй, ҡатнашыусыларҙың күбеһе башҡорт теле буйынса Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыуҙы ойоштороу фекерен яҡланы. Ә бит бынан ун йыл самаһы элек ошо һынауҙар яңы үткәрелә башлағанда ул имтихан бар ине, әммә республиканың милли кадрҙар әҙерләгән факультеттары уның һөҙөмтәләрен ҡабул итмәүе сәбәпле, әһәмиәте юғалды...

Башҡортостандың һәм күрше төбәктәрҙә башҡорт теле туған тел булараҡ уҡытылған белем усаҡтары директорҙары, башҡорт балалар баҡсалары мөдирҙәре М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында уңайлы шарттар, башҡорт мөхите тыуҙырған коллегаларының эш тәжрибәһе менән танышып сыҡҡандан һуң, "Башҡортостан Республикаһында милли мәғарифты үçтереү концепцияһы" һәм "Рәсәй Федерацияһында туған телдәрҙе уҡытыу концепцияһы"на индереү өсөн тәҡдимдәр әҙерләү буйынса форсайт-сессия эшендә ҡатнашты. Ғәмәлдә, һәр ҡатнашыусының башҡорт теленә ҡағылышлы ниндәй актуаль күренештәргә иғтибар ите-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Рәсәй Президенты Владимир Путин үҙенең указы менән Земфира Латипованы Башҡортостандың Юғары суды рәйесе итеп тәғәйенләне. Земфира Латипова суд системаһында 1982 йылдан алып эшләй. 2018 йылдың сентябренән, Башҡортостан Юғары судының элекке рәйесе Михаил Тарасенконың икенсе эшкә күсеүе сәбәпле, ваҡытлыса уның вазифаһын башҡара.

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Салауат Юлаев" хоккей клубы командаһы менән осрашты һәм миҙгел өсөн рәхмәт белдерҙе. Республика клубы, Көнсығыш конференцияһы финалында Омскиҙың "Авангард"ынан еңелеп, Континенталь хоккей лигаһының бронза миҙалын яуланы. "Юлаевсылар"ҙың баш тренеры Николай Цулыгин төбәк етәксеһенең айырым рәхмәт һүҙҙәренә лайыҡ булды. "Салауат Юлаев" ҡапҡасыһы Юха Метсолаға - Салауат Юлаев ордены, ә һөжүмсе Теему Хартикайненға "Башҡортостан Республикаһы алдындағы хеҙмәттәре өсөн" ордены тапшырылды.

✓ Башҡортостанда Межгорье ҡалаһы башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп Илья Терехов, Нефтекама ҡалаһы хакимиәте башлығы вазифаһына Ратмир Мәүлиев тәғәйенләнде. Радий Хәбиров республика Хөкүмәте Аппараты етәксеһе урынбаçары вазифаһына Александр Шельдяевты тәғәйенләне. Быға тиклем ул Башҡортостан Хөкүмәте Аппаратының иҡтисади үçеш департаменты директоры булып эшләне.

✓ Башҡорт дәүләт университетының Хоҡуҡ институты директоры Илона Макаренко Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе итеп һайланды. Илона Макаренко 1968 йылдың 8 февралендә Өфөлә тыуған. Юридик фәндәр докторы, профессор. 2009 йылдан Башҡорт дәүләт университетының Хоҡуҡ институты директоры булып эшләне.

✓ Башҡортостанда яҙғы баçыу эштәре дауам итә. Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 36 район хужалыҡтары дым ҡаплата, 28 районда ужым ашлыҡтары туҡландырыла, 38-ендә күп йыллыҡ үләндәр тырматыла. Һалҡын һауа массаһы сигенгәс тә, хужалыҡтарҙың күпселеге яҙғы культуралар сәсеүгә төшөргә йыйына. Ғәҙәттәгесә, төбәктә яҡынса 3 миллион гектар сәселәсәк.

**✓ Бөгөн беҙгә бер нисә һорауға яуап табырға кәрәк: беренсенән, нисек итеп ололарҙы, балаларҙы башҡорт теленә һөҙөмтәле итеп өйрәтергә? Икенсенән, башҡорт телен өйрәтеүҙең методикаһын нисек итеп ябайлаштырырға?**



үен, уларҙың үсеш йүнәлешен, яҡын киләсәктә әҙемтәһе ниндәй булыуын билдәләү өсөн ойошторолған түңәрәк өҫтәл икән "форсайт-сессия" тигән нәмә. Шуны төшөнөп алғансы ғына делегаттарға байтаҡ ваҡыт талап ителде, артабан ҡыҙыу фекер алышыуҙар барышында хәлде үҙгәртеү өсөн тәҡдимдәр әйтелде. "Коллегалар электән килгән бер үк фекерҙәр әйтте, башҡорт телен артабан үҫтерергә телəһәк, икенсе төрлө эш юлдарын эҙләү кәрәк, - тип белдерҙе Салауат районы Лағыр ауылы мәктәбе директоры Ринат Ситдыҡов. - Мәҫәлән, уҡытыусы 18 сәғәтлек эше өсөн урта са тип иҫәпләнгән 28 меңлек эш хаҡын алырға тейеш. Юғиһә, былдай эш хаҡы өсөн улар ике тапҡырға күберәк ваҡыт сарыф итергә мәжбүр. Бынан тыш, башҡорт теле йәмғиәтебеҙҙең бөтә тармаҡтарында ла булырға тейеш, комплекслы эш талап ителә. Сөнки мәктәптә генә балаға туған телен өйрәтеп булмай, уға ғаилә, телевизор, уйындар, телефон ҡушымталары, урам - тотош мөхит тәьҫир итергә тейеш. Юғары уҡыу йортонда ла туған телен онотмаҫлыҡ булһын. Ә инде педагогтарҙың квалификацияһын күтәреүгә килгәндә, һынау алыуҙы ҡатмарлаштырып ҡына эш сыҡмаҫ". Әйткәндәй, бөгөн ошо мәсьәләләр хәл ителмәһә, 2030 йылда әҙемтәләре ниндәй булыуын яҡынса күҙаллап та аңларға була. "Башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу артһын өсөн, бәлки, Советтар Союзындағы кеүек бюджеттан тейешле финанс бүлеп, милли мәҙәниәтте һәм телде яңыртыу программаһын бойомға ашырырға кәрәктер. Хәҙер беҙҙең уҡытыуға сәғәттәр ҙә етмәй, ата-әсәләр ғаиләлә русса һөйләшә, йәш кадрҙарға һәм әсбаптарға ла ҡытлыҡ килде. Элек килешеү буйынса Башҡортостандан дәреслек, яҙыу өлгөһө, дәфтәрҙәр ала торғайныҡ, хәҙер юҡ. Ошолар тураһында коллегалар менән фекер алышыуҙың, беҙҙең арала ғына ҡалмаһын ине был һөйләшеү", - тип телəй Силәбе өлкәһе Арғаяш районының Көҙәш ауылы урта мәктәбе директоры Мөдәрис Сиражетдинов. Форсайт-сессияның ойоштороусылары һәр майҙансыҡта билдәләнгән мәсьәләләр, уларҙы хәл итеү юлдары, тәҡдимдәр һәм фекерҙәр ентекләп тикшереләсәк һәм мотлаҡ рәүештә БР Мәғариф министрлығы белгестәренә еткереү ҡаралған, тип ышандырҙы былай. Күренеүенсә, быға тиклем дә тел осонда булған проблемалар күтәрелде, улар тураһында тағы бер тапҡыр съезд барышында әйтелгәс, улар хәл ителер, тигән өмөт бар.

### Күңелгә май булып яғылған һүҙҙәр

Съездың икенсе көнөндә лә эшләкле һөйләшеүҙәр дауам итте. Уҡытыусыларҙы Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров тәбрикләне һәм бер төркөм мөғәллимдәргә юғары исемдәр тапшырҙы. Үҙенең телмәрен ул башҡортса һөйләне: "Дөрөҫөн әйткәндә, әҙерәк ҡурҡам. Хөрмәтле уҡытыусылар, бөгөн минең башҡорт телем өсөн икеле ҡуймағыҙ. Беләһегеҙҙер, мин 5 йәшемә тиклем Ишембай районының Һайран ауылында йәшәнем. Һуңынан атай-әсәйемдәр ҡалаға күсте, мәктәптә уҡытыу тик русса булды, тик русса ғына һөйләштем. Хәҙер миңә 55 йәш, шуға тиклем 10 йыл Мәскәүҙә эшләнем, унда аралашыу русса булды. Шуға йәйләп-яйлап башҡорт телен юғалта башланым. Нимә әйтергә уйлайым: минең кеүектәр менәрләгән. Беҙ тыуған илгә, туған телгә ҡайттыҡ. Әлбиттә, беҙ әлегә таҙа итеп башҡорт телендә һөйләшә алмайбыҙ. Шуға, телмәремә икеле ҡуймағыҙ, тием.

Бөгөн беҙгә бер нисә һорауға яуап табырға кәрәк: беренсенән, нисек итеп ололарҙы, балаларҙы башҡорт теленә һөҙөмтәле итеп өйрәтергә? Икенсенән, башҡорт телен өйрәтеүҙең методикаһын нисек итеп ябайлаштырырға, һөҙөмтәлерәк итергә? Өсөнсөнән, башҡорт телендә һөйләшеүҙе, башҡорт теленә өйрәтеүҙе нисек модаға индерергә, заманса итергә?

Тағы бер фекерем бар: башҡортса бер генә һүҙ белгәндәрҙе лә үҙ итәйек, ситләштермәйек. Иң һуңынан нимә әйтергә уйлайым: һеҙ ҡурҡмағыҙ, беҙ бергә! Был ҙур бурыстарҙы беҙгә бергә атҡарырға кәрәк".

Радий Фәрит улының был сығышынан һуң БР мәғариф министры вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Айбулат Хажинға һүҙ бирелде. Уның сығышы йыйылыусылар ишетергә теләгән күп фекерҙәрҙе үҙ эсенә алғанлыҡтан, гәзит биттәрендә тулыһынса бирергә булдыҡ.

- Кисәге съезд делегаттары Өфө ҡалаһының төрлө уҡыу йорттарында булды, форсайт-сессияла ҡатнашты. Башҡорт телен уҡытыу буйынса тәҡдимдәр әҙерләнә. Шул уҡ ваҡытта беҙҙе борсоған һорауҙар ҙа аҙ түгел: глобализация шарттарында туған телдәрҙе нисек һаҡларға, дәүләт теле булараҡ башҡорт телен нисек үҫтерергә, телдәрҙе өйрәнеүҙе нисек актуаль итергә? Бөгөн, әйҙәгеҙ, ошо турала бергәләп уйлайыҡ, фекер алышайыҡ, - тине Айбулат Вәкил улы. - Съезға әҙерләнгән ваҡытта беҙҙең эш төркөмө күп тәҡдимдәр әҙерләне, уларҙы беҙҙең республика етәксеһе Радий Хәбиров та хупланы, өҫтәп үҙенең тәҡдимдәрен индерҙе һәм уларҙы съезда тикшерергә ҡушты. Хөрмәтле коллегалар, бөгөн һеҙҙең фекерегеҙҙе лә ишетергә теләйбеҙ.

(Дауамы 6-сы биттә).

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Киләһе йыл Рәсәйҙә Халыҡ ижады йылы тип иғлан ителде. Ошонан файҙаланып, республикала ниндәй эштәр атҡарып ҡалырға кәрәк, тип уйлайһығыҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Фәнүзә НӘЗЕРШИНА, филология фәндәре докторы:*** Етәкселәрҙең ни өсөн ошондай фекергә килеүен яҡшы аңлайым. Әгәр кеше ерен һәм илен һөйөүҙең нимә икәнен белмәй, байлыҡ артынан ҡыуып, бөгөнгө көн менән генә йәшәй башлаһа, донъя бик насар яҡҡа үҙгәреп китеүе ихтимал. Ғөмүмән, башҡорт халҡының менталитеты илһөйәрлеккә нигеҙләнгән, шул уҡ "Урал батыр" эпосында әйтелгән "ер-һыу" тигән төшөнсә беҙҙең халыҡтың аңында "Тыуған ил" тигәнде аңлата. "Ил" тигәне дөйөмләштерелгән ҙур төшөнсә. Беҙҙең халыҡ ил төшөнсәһен шул ҙур мәғәнәһендә әллә ҡасан уҡ үҙ ижадына индергән. Ни өсөн тигәндә, башҡорттоң ил тип әйтерлек, ил тип һөйләрлек ҙур территорияһы булған, ере күп булған, халҡы ла күп булған. Бөгөн ошо ил төшөнсәһен яңынан иҫкә төшөрөп, уны һөйөү, уның өсөн барлыҡ көсөндө биреп эшләү һәм йәшәү идеологияһын үткәрмәһәк, халыҡтың рухи донъяһы ярлыланып, дәүләттең ихтимағи, сәйәси үсешендә ҡыйынлыҡтар тыуыуы ихтимал. Шуға ла Халыҡ ижады йылы иғлан итеү Башҡортостан кимәлендә лә, Рәсәй кимәлендә лә мөһим мәсьәлә ул.

Ғалим булараҡ, был йылда беҙ китаптар, мәҡәләләр сығарыу эшмәкәрлеге менән булышырбыҙ инде. Йоланы бөгөн былай ҙа күп һөйләйҙәр, оҙон көйлө халыҡ йырҙарына иғтибар булһын ине, уларҙы башҡарыусылар һирәгәйҙе. Халыҡ ижады теленә килгәндә, иҫ китмәле матур өлгөләр бар, уларҙы пропагандаларға кәрәк. Фольклор буйынса киң ҡарашлы белгестәр әҙерләү ҙә мөһим. Фольклорға еңелсә ҡарау күренеше бар йәмғиәттә. Әммә халыҡ ижадын өйрәнеүселәр башҡа бегестәргә ҡарағанда күберәк йүнәлештәрҙә эшләргә бурыслы, ул этнографияны ла, тарихты ла, психологияны ла, философияны ла белергә тейеш. Улай ғына ла түгел, халыҡ ижадын, телен, моңон төптәнерәк өйрәнеп, уны еренә еткереп үҫтерә белһәләр, беҙҙең профессиональ әҙәбиәт, биҙәүҡулланма сәнғәт, музыка сәнғәттәренең кимәле лә, дөйөм рухиәт донъябыҙ ҙа байыраҡ булыр ине. Вуҙҙарҙа электән фольклорға сәғәттәр тейешле бүленмәне. Фән менән шөғөлләнеүсе ҡыҙҙарыбыҙ бар, шөкөр, тик бар нәмәлә баланс булырға тейеш, егеттәр ҙә килһен ине фәнгә.

Шуныһы ла бар. Хәҙер беҙ халыҡ араһына сығып, әллә ниндәй бай фольклор йыя алмаясаҡбыҙ. Ул быуын аҙ ҡалып бара. Хәтерләйем, үткән быуаттың 60-сы йылдары эпостарҙың гөрләп йәшәп ятҡан сағы ине. Ҡайҙа барһаҡ та, һөйләүселәр бар ине. 70-се йылдарҙа Салауат районына экспедиция менән сыҡтыҡ, унда эпос яҙып алып булманы. Хәҙерге көндә башлыса хөрәфәти хикәйәттәр менән тыйыуҙар ғына яҙып алып ҡайтаҡыҙҙар. Шуға ла булған байлыҡты һаҡлау яйын күрергә кәрәк.

***Урал МӨХӘМӘТШИН, Мәләүез районы Иштуған ауыл мәҙәниәт клубы әйҙәүсе белгесе:*** Башҡортостанда Бөтөн донъя фольклориадаһы үткән йылды, ысынлап та, бөтөн Рәсәйҙә Халыҡ ижады йылы тип иғлан итеү бик дөрөҫ булыр ине. Халыҡ ижадын һаҡлау, тергеҙеү мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре ҡулында. Шөкөр, һуңғы йылдарҙа хөкүмәт тарафынан мәҙәниәткә иғтибар арта, районда клубтар ремонтланды. Республика领ың бөтөн төбәктәрендә лә онотолоп бөткән кәсептәр - кейеҙ баҫыу, балаҫ һуғыу тергеҙелә, ҡатын-ҡыҙҙар биҙәүестәр яһау эшенә дәррәү тотондо. Һәм быларҙың барыһы ла уларҙың үҙҙәренең ҙур теләге менән тормошҡа ашырыла. Ошо йыл иғлан ителеп, хөкүмәт тарафынан да махсус программалар, матди ярҙам да булһа, эштәр тағы ла алға китер ине.

Фольклор ансамблдәре күп хәҙер, уларҙың репертуарын байытыу эше лә тора алдыбыҙҙа. Йыр-бейеү, таҡмаҡтан тыш, йолаларҙы тергеҙеү кәрәк хәҙер. Был йәһәттән "Туғанаш" исемле фольклор ансамбле менән район кимәлендә Гранпри яулағаныбыҙ ҙа бар. Былтыр "Кәкүк сәйе"н өйрәндек. Өйрәндек, тием, сөнки китаптан ҡарарға ла тура килде. Шулай ҙа тәбиғәт, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү менән бәйле был йоланы иҫләүсе инәйҙәр ҙә табылды. Туй йолалары, мәҫәлән, бөгөнгәсә һаҡланған, сөнки улар һаман да ҡулланыла килә. Ә "Кәкүк сәйе" кеүектәре онотолған, бөгөн халыҡтың уға мохтажлығы ла юҡ кеүек. Әммә уның да үҙенең мәғәнәһе бар, әйтәйек, ҡыш буйына өйҙә генә ултырған ҡатын-ҡыҙҙар, бала-саға ҡырға сығып ял итә, тәбиғәткә яҡыная, үҙ-ара аралаша. Интернет андарҙы томалап алған мәлдә быныһы ла мөһим. Унан һуң, әле арабыҙҙа был йолаларҙы иҫәләүселәр бар саҡта, йәштәргә уларҙы күрһәтеп ҡалырға кәрәктер. Шуның өсөн балаларҙы ла йәлеп итәбеҙ эшебеҙгә, күреп, белеп йөрөһөндәр, тибеҙ.

**Дилбәр ХӘКИМОВА**
**яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ 2019 йылдың 15 апреленән Башҡортостан биләмәһендә янғын йәһәтенән хәүефле миҙгел башланыуы тураһында иғлан ителде. "Янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙған өсөн 250 мең һумға тиклем штраф һалыу ҡаралған", - тип белдерҙеләр республика Урман хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтендә.

✓ Күмертау ҡала дауаханаһы поликлиникаһында 1 апрелдән Онкология амбулатор ярҙам үҙәге эшләй башланы. Онкология үҙәктәре селтәрен булдырыу - "Һаулыҡ һаҡлау" милли проекты сараларының береһе. Ағымдағы йылда Нефтекамала һәм Октябрьскийҙа ла онкология үҙәктәре асыла, тип иҫкә төшөрҙөләр Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында.

✓ Башҡортостандың Юл хужалығы идаралығы 16 майҙа аукционда республиканың Әбйәлил районында Дәүләт - Әлмөхәмәт юлын Магнитогорскиҙың урау юлы менән тоташтырған юл һалыу өсөн подрядсы һайлай. Эштәр республика ҡаҙнаһынан финанслана.

✓ Баймаҡ, Благовар, Бүздәк, Кушнаренко һәм Шишмә райондары аграрийҙары иген һәм ҡуҙаҡлылар сәсеүгә төшкән. Республикала иген һәм ҡуҙаҡлы культураларҙы 2 миллион гектарҙа сәсеү күҙаллана. Төбәктә яҙғы баҫыу эштәренә 11,2 миллиард һум кәрәк. Ауыл хужалығы техникаһын ремонтлау өсөн запас частарға, яғыулыҡ-майлау материалдарына, минераль ашламаларға хаҡтарҙың күтәрелеүе сығымдарҙың артыуына килтергән.

✓ "Йәшел Башҡортостан" акцияһында - 27 апрелдә әүҙемселәр 60 урман участкаһында 1 миллион сәсмәлек ултырта. Инвентарь, ағас үсентеһе һәм сәсмәлектәрҙе урман хужалығы хеҙмәткәрҙәре урында үҙҙәре бирә, иректәндәрҙе ағасты нисек дөрөҫ ултыртырға өйрәтә. Урманды тергеҙеү айлығы 20 апрелдән 20 майға тиклем дауам итә.

✓ Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, 2019 йылдың февралендә республикала инфляция - 0,5 процент, ә йыл башынан 1,4 процент тәшкил иткән. Белгестәр билдәләүенсә, уҙған йылдың ошо уҡ осоронда ҡулланыу хаҡтары индексы түбәнерәк булған. Атап әйткәндә, аҙыҡ-түлек тауарҙары - 1,8 процентка, ризыҡ булмаған тауарҙар 1,3 процентка артҡан, хеҙмәттәр 0,9 процентка ҡиммәтләнгән.

АФАРИН!

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Йортонда тағы ла бер тарихи китаптың исем туйы үтте. Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуға - 100, Башҡортостан Республикаһы Конституцияһына 25 йыл тулыу уңайынан БР Конституция Суды "Башҡортостандың конституцион-хоҡуҡи акттар йыйынтығы" һәм "Башҡортостан Республикаһы Конституцияһына тарихи-хоҡуҡи комментарий" баҫмаларын әҙерләп сығарҙы.**

# АҢЛАТМАЛАР - БЕР КИТАПТА

Республиканың тарихи-хоҡуҡи үҫешен сағылдырған был йыйынтыҡтар конституционализм тарихында тәүгә донъя күреүе менән уникаль. Федерация составында барлығы 22 республика булһа, бөгөнгә шуларҙың ни бары 4-5-ендә генә бындай Комментарийҙар бар.

Был ике баҫманың әһәмиәте шунда: конституцион-хоҡуҡи акттар йыйынтығында халҡыбыҙ тарихында, уның яҙмышында хәл иткес роль уйнаған документтар тупланһа, Комментарийҙа иһә Башҡортостан дәүләтселегенең төрлө этаптарҙағы үҫеше юридик йәһәттән анализлана һәм аңлатыла.

Тарих биттәренә күҙ һалһаҡ, республиканың бөгөнгө Төп Законы - бишенсеһе. 1993 йылда яңы Башҡортостан Конституцияһы ҡабул ителгәндән һуң уға комментарийҙар әҙерләү тураһында дәүләт Президентының ике Указы донъя күрә, әммә объектив һәм субъектив сәбәптәр арҡаһында эш тотҡарлана. Ошо йылдар эсендә был төп документҡа һигеҙ тапҡыр үҙгәрештәр индерелә.

Мөһим баҫмалар БР Конституция Суды Рәйесе, юридик фәндәр докторы, профессор, БР Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы Зөфәр Йәнекәйев етәкселегендә абруйлы авторҙар тарафынан өс йылдан ашыу ентекле әҙерләнә. Комментарийҙар ғәмәлдәге ҡануниәтте иҫәпкә алып эшләнһә лә, унда төбәк, Рәсәй һәм донъя кимәлендәге аныҡ тарихи ваҡиғалар күҙлегенән сығып республиканың конституцион-хоҡуҡи үҫешен сағылдырған тарихи-хоҡуҡи материалдарҙың ҡулланылыуы ла мөһим һәм ҙур үҙенсәлеккә эйә, сөнки Конституцияның һәр статьяһы үҙенә тап килгән тарихи-хоҡуҡи документтар нигеҙендә нығытылып бара. Әйтергә кәрәк, был тарихи документтар үҫәргән башҡорттарының шәжәрәһенән башлана һәм 1235-1236 йылдарҙа башҡорттар иленә килгән венгр монахы Юлиандың башҡорттарҙың татар-монголдар менән үҙ-ара мөнәсәбәттәрен килешеү нигеҙендә төҙөүе, йәғни Сыңғыҙхан империяһына килешеү нигеҙендә инеүе тураһындағы мәғлүмәттәрен раҫлаусы сығанаҡ булып тора. Йәғни ул башҡорттарҙың элек-электән дәүләтселеге булыуына һәм уның тышҡы мөнәсәбәттәре килешеү нигеҙендә алып барылыуына бер дәлил.

Хоҡуҡи баҫма булһа ла, Комментарийҙарҙың киң йәмәғәтселектә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырырына ышаныс бар, сөнки һәр статьяға ҡағылышлы барлыҡ тарихи һәм хоҡуҡи документтарҙы айырым сығанаҡтарҙан эҙләргә кәрәкмәй, улар бер урында тупланған. Был мөһим һәм кәрәкле баҫманың, хәҙерге юғары технологиялар заманында, электрон варианты булыуы ла ҡамасауламаҫ ине.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӘЙ БЫЛ СОҠОРҘАР!

**Башҡортостанда соҡорҙарҙы ямау буйынса төп эштәрҙе 15 июнгә тиклем тамамлау күҙаллана, шул иҫәптән ихаталарҙа. Төбәктең барлыҡ предприятиелары эштең сәнәғәт күләмендә сыҡты. Республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Тимур Мөхәмәтйәнов һүҙҙәренсә, йыл башынан төбәктә 90 меңгә яҡын, шул иҫәптән апрелдә 73 626 соҡор юҡҡа сығарылған.**

Республиканың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Михаил Киреев йорт ихаталарында соҡорҙарҙы ямау тураһында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, ихаталар буйлап йөрөгән ваҡытта 14 мең 185 соҡор асыҡланған, шуларҙан 276 соҡор бөтөрөлгән. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, һәр муниципалитеттың үҙенең өлгәшергә тейешле күрһәткесен аңлауы мөһим. "Хөрмәтле коллегалар, муниципалитет башлыҡтары, Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетынан ебәрелгән графикты үтәргә кәрәк. Әгәр һеҙгә бының өсөн нимәләр етмәй икән, әйтегеҙ, ярҙам итербеҙ. Һеҙ минең нимә тураһында һөйләгәнемде тулыһынса аңлап етмәйһегеҙ тигән тойғо тыуа. Тимур Мөхәмәтйәновтан килгән соҡорҙарҙы ремонтлау буйынса һандар үтәлергә тейеш. Мине лә ишетеүегеҙҙе һорайым, киләһе дүшәмбелә мин һеҙҙең эштәрҙе башҡарыуығыҙҙы күрергә тейешмен. Мин һеҙҙән бейеп күрһәтергә түгел, ә соҡорҙарҙы ямауығыҙҙы һорайым. Башҡаса ошо мәсьәләгә кире ҡайтмаҫлыҡ булһын", - тине Башҡортостан етәксеһе. Михаил Киреевҡа шулай уҡ ихаталарҙа соҡорҙарҙы ремонтлау буйынса графикты муниципалитет башлыҡтарына еткереү бурысы йөкмәтелде. Улар аҙна һайын башҡарылған эш тураһында отчет бирергә тейеш.

# ДИКТАНТ ЯҘАБЫҘ...

**Быйыл башҡорт теленән диктант беренсе тапҡыр халыҡ-ара кимәлдә уҙғарыла. Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды шундай тәҡдим менән сыҡты. 4 апрелдә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы.**



Акцияны үткәреү 18 майға билдәләнгән. Сараны әҙерләүҙә, гәҙиттәгесә, Башҡорт дәүләт университеты ҡатнаша, уның биләмәһендә төп һәм телде яңы ғына өйрәнә башлағандар өсөн ике диктант майҙансығы ойоштоорола. Текстарҙы һәм уны уҡыусыларҙың кандидатураларын һайлау бара. Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү, башҡорт халҡының рухи мәҙәниәтен пропагандалау, халыҡтың тел мәҙәниәте кимәлен күтәреү өсөн уҙғарыла. Әлеге ваҡытта мәғариф министры Айбулат Хажин рәйеслегендә Башҡорт теленән халыҡ-ара диктантты әҙерләү һәм үткәреү буйынса ойоштороу комитеты булдырылған. Ойоштороу комитеты составында - Башҡортостан Башлығының Иҗтимағи-сәйәси үҫеш идаралығы етәксеһе Урал Килсенбаев, мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе Борис Мелкоедов, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды директоры Гөлназ Йосопова һәм башҡа рәсми кешеләр.

# НИМӘ УЛ МИЛЛИ КОРПУС?

**Интернетта Башҡорт теленең милли корпусы эшләй башланы. Был - компьютер лингвистикаһы белгестәренең һәм "Башҡорт проекттары" берләшмәһе әүҙемселәренең хеҙмәттәшлек һөҙөмтәһе. Корпус башҡорт һүҙ формаһына морфологик анализ яһарға һәләтле махсус компьютер программаһы ярҙамында барлыҡҡа килде. Программаны яҡташыбыҙ, "Юғары иҡтисад мәктәбе" милли тикшеренеү университетының Лингвистика мәктәбе доценты Борис Орехов төҙөгән.**

"Башҡорт теле күптән үҙ корпусына мохтаж ине. Милли корпус туған телдең заманса һанлы тормошоноң мөһим өлөшө булып тора, уны һаҡлауға һәм үҫтереүгә булышлыҡ итә, стилистик һәм грамматик белешмә булараҡ, уҡытыуҙа һәм ғилми тикшеренеүҙәрҙә ярҙамға килә, шулай уҡ ялма интеллекттың башҡорт телен аңлаған ҡатмарлы системаларын әҙерләү өсөн нигеҙ булыуы мөмкин. Әлеге ваҡытта башҡорт теле корпусында 20 миллиондан ашыу һүҙ ҡулланылышы бар, был 180-гә яҡын ҡағыҙ китап томына тиң. Корпусҡа художестволы әҫәрҙәр, закондар, гәзит-журнал мәҡәләләре, Википедияның башҡортса бүлегендәге ҡайһы бер мәҡәләләр индерелгән. Сайттың интерфейсы һәр кешегә үҙенең тел интуицияһын, теге йәки был башҡорт һүҙен дөрөҫ ҡулланамы, юҡмы икәнен тикшереп ҡарарға мөмкинлек бирә. Башҡорт телен үҫтереү менән ҡыҙыҡһынған кешеләр һәм ойошмалар беҙгә корпусты яҡшыртырға ярҙам итер, тип өмөтләнәбеҙ", - тип һөйләне "Башинформ" агентлығына Башҡорт теленең милли корпусын әҙерләүсе Борис Орехов.

# АҒЫУ ЭСӘҺЕҢ БИТ!

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса Сибайҙа "Һынау үҙәге" бүлексәһе асылды. Ул Урал аръяғында законһыҙ әйләнештән алынған алкоголле һәм спиртлы продукцияға лаборатор тикшереүҙәр үткәреү менән бәйле мәсьәләләрҙе оператив хәл итеү өсөн булдырылған.**

Проект Башҡортостан буйынса Рәсәй Эске эштәр министрлығы, Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитеты араһында үҙ-ара хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеү сиктәрендә ғәмәлгә ашырылған. Белгестәр алкоголле продукцияның сифатын тикшерә һәм тейешле баһалар бирә. "Һынау үҙәге" директоры Азат Аҫҡаров әйтеүенсә, алкоголдә һайлап алыу, беренсел тикшереүҙәр Сибай бүлексәһендә үткәрелә, һығымталар иһә Өфөлә бирелә. "Киләсәктә бүлексәнә ҡорамалдар менән йыһазландырыу күҙаллана, ул саҡта лаборатория спиртлы эсемлектәрҙе тикшереү буйынса үҙаллы эшләй башлар, - тип өҫтәне Азат Аҫҡаров. - Законһыҙ әйләнештән алынған спиртлы продукцияны һайлап алыу махсус төҙөлгән графикка ярашлы үткәрелергә һәм Урал аръяғы биләмәһен үҙ эсенә алырға тейеш. Тикшереүгә тәүге өлгөләр килә башланы ла инде".

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ 27-28 апрелдә Өфөлә Ҡөрьән уҡыусыларҙың төбәк-ара конкурсы уҙа. Конкурста ҡатнашыуға гүзәл зат вәкилдәре, балалар ҙа, өлкәндәр ҙа саҡырыла. Ҡатнашыусыларҙы һайлап алыу туры 27 апрелдә "Азимут" отелендә ойоштороло. Финал һәм бүләкләү тантанаһы 28 апрелдә Өфө сәнғәт училищеһының концерт залында була.

✓ Федераль юл агентлығының 2019 йылдың 8 апрелендәге бойороғо менән Азамат Илембәтов "Урал буйы" федераль автомобиль юлдары идаралығы етәксеһе вазифаһын башҡарыусы вазифаһына тәғәйенләнде. Был хаҡта федераль ҡаҙна учреждениеһы хәбәр итте. "Урал буйы" юл идаралығының яңы етәксеһе республика хөкүмәтенең етенсе премьер-министры булып тора - 2011-2012 йылдарҙа ул ошо вазифала эшләгәйне.

✓ Башҡортостанда предприятиеларҙы һауаның бысраныуын контролдә тотҡан датчиктар менән йыһазландырыу һәм автоматлаштырылған контроль станцияларын ҡуйыу эше дауам итә. Әле Салауат һәм Сибай ҡалаларында һауаның бысраныуын контролдә тотоу өсөн автоматлаштырылған станциялар булдырыу эше алып барыла.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте субсидиялар һәм компенсациялар иҫәпләү өсөн нигеҙ булып торған торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәре хаҡының яңы стандарттарын раҫланы. Льготалар менән файҙаланыусылар өсөн яңынан иҫәпләү апрелдә башҡарыла, бының өсөн бер ҡайҙа ла мөрәжәғәт итергә кәрәкмәй.

✓ "Медиалогия" компанияһы әҙерләгән республика медиаресурстары рейтингында "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы беренсе урынды биләй. Өҙөмтә килтереү индексы - 671,26. Икенсе урында - "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы (524,72) Төбәктең иң яҡшы киң мәғлүмәт сараһы исемлегендә өсөнсө урында - "Коммерсант-Башҡортостан" гәзите (259,49). "Медиалогия" мәғлүмәттәренә ярашлы, иң яҡшы унау иҫәбенә шулай уҡ Proufu.ru, "Вся Уфа" телерадиокомпанияһы, Gorobzor.ru, Mkset.ru, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы, Ufacitynews.ru һәм Ufa1.ru инде.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН



# ТАШЛАНДЫҠ ХӘЛДӘ

**Өфөлә парктар һәм скверҙар күп, ләкин улар ташландыҡ хәлдә, уларға тәртип етешмәй. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров республиканың баш ҡалаһы буйлап йәмәғәт биләмәләрен төҙөкләндереү барышы менән танышыу маҡсатында ойошторолған эш сәфәре йомғаҡтары буйынса шундай һығымтаға килде.**

Ул 120 мең кеше йәшәгән Сипайлово биҫтәһендәге "Кашҡаҙан" паркында булды. Парк икенсе йыл төҙөкләндерелә. Июлдә бында Йәйге Халыҡ-ара балалар уйындары барышында баскетбол һәм пляж волейболы буйынса ярыштар уҙғарыла. 1 июнгә - баскетбол һәм волейбол майҙансыҡтарын яңыртыуҙы, ә июнь аҙағынаса тирә-яҡтағы биләмәне төҙөкләндереүҙе тамамлау күҙаллана. "Көньяҡ" биҫтәһендә Радий Хәбиров буласаҡ "Ташлы йылға" паркы биләмәһен ҡараны. Төҙөләш башланғанға тиклем бында тәрән ташлы йырындар булған. Скверҙа спорт майҙансыҡтары, йүгереү һәм йәйәүлеләр юлдары, ял урындары булдырыу күҙ уңында тотола. Өфө хакимиәте хәбәр итеүенсә, быйыл "Беренсе Май" паркын, "Тулҡын" һәм "Торналар" скверҙарын төҙөкләндереү күҙаллана. "Кашҡаҙан"ды һәм "Тулҡын"ды "Заманса ҡала мөхитен булдырыу" программаһы буйынса федераль ҡаҙна иҫәбенә реконструкциялау ҡаралған. "Парктар һәм скверҙар ҡала тормошонда мөһим роль уйнай, - тип йомғаҡ яһаны республика етәксеһе. - Тормош үҙгәрә, кешеләрҙең ихтыяжы арта. Ҡала халҡы заманса парктар, балалар майҙансыҡтары, төҙөк скверҙар һорай. Ҡала төҙөләшө сәйәсәтендә был өлкәгә оҙаҡ ваҡыт иғтибар бирелмәне. Өфө парктарына ни етмәй? Ябай тәртип. Парктар сүп-сарлы, ташландыҡ хәлдә, бөтә ерҙә ҡыуаҡлыҡ, емерелгән юлдар һәм башҡалар. Шуға күрә тәү сиратта тәртип урынлаштырырбыҙ, ә һуңынан яйлап ҡына проектлау менән шөғөлләнербеҙ. Парктар ҙа - фән, һәм уның заманса ҡаҙаныштары күптән алға киткән. Мин кешеләр матур, төҙөк, заманса парктарҙа йөрөү мөмкинлеге алһын өсөн бында ниндәйҙер яңылыҡ индергем килә. Тимәк, беҙ оло юлдың башында".

# "ҒҮМЕР ҠУЛСАҺЫ"

**Ошондай атама менән үткәрелгән Дөйөм Рәсәй экологик хәрәкәт сиктәрендә макулатураны, пластикты ағас һәм ҡыуаҡ үсентеләренә алмаштырырға була.**

Сараның маҡсаты - граждандарға экологик тәрбиә биреү, ҡала территорияһын бергәләп таҙартыу һәм йәшелләндереү. Бының өсөн 10 килограмдан ашыу ҡағыҙ йыйырға һәм уны эшкәртеүгә тапшырырға кәрәк. Хәрәкәт координаторҙары ғаризаларҙы ҡарап, питомниктарҙан ағас килтереп, уларҙы махсус урындарҙа таратасаҡ. Был акция беренсе тапҡыр 2017 йылда Санкт-Петербургта башлана. Ул ваҡытта 74 тонна макулатура һәм пластик тапшырыла. Шунан алып ҡатнашыусы 10 ҡалала барлығы 950 тонна макулатура һәм пластик йыйыла, барлығы 17800 төп ағас һәм ҡыуаҡ ултыртыла.

Әйткәндәй, 13 апрелдә Өфөлә үткән экологик акция ла беренсе өмә кеүек үк киң масштаблы булды. Унда 102 мең граждан ҡатнашты. Сара барышында 3200 кубометр сүп-сар һәм ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары сығарылды. Барлығы 974 берәмек техника эшләне. 2353 метр ҡойма ремонтланды. 253 төп ағас ултыртылды. Шулай уҡ акция барышында ҡаланы рөхсәтһеҙ йәбештерелгән реклама игландарынан таҙартыу эше лә алып барылды. Киләһе өмә 27 апрелдә үтәсәк.

# ҮҘЕБЕҘҘЕ КҮРҺӘТТЕК



**Өфө ҡала округы хакимиәтенең Мәғариф идаралығы Мәскәүҙә ВДНХ-ла үткән Халыҡ-ара мәғариф салонынан миҙал алып ҡайтты.**

Илдең төрлө төбәктәренән һәм сит илдәрҙән килгән фән һәм мәғариф өлкәһе вәкилдәре өс көн дауамында өфөләрҙең майҙансығы менән таныша. "Һөнәр һайлауҙы ойоштороу һәм уҡыусыларҙың һәләтен үҫтереү моделе булараҡ асыҡ мәғариф системалары" кластерында - 71-се мәктәп, 39-сы гимназия һәм 6-сы, 93-сө лицейҙар, "Перспективалар мәктәбе - аныҡ мөмкинлектәр мәктәбе" кластерында - 103-сө мәктәп һәм 107-се лицей сығыш яһай. Улар баш ҡаланың алдынғы предприятиелары, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең юғары уҡыу йорттары менән хеҙмәттәшлеге тураһында һөйләй. "Белем биреү учреждениеларында туған телдәрҙе һаҡлау һәм үҫтереү" кластерында 166-сы Башҡорт балалар баҡсаһы, 102-се Башҡорт гимназияһы, Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы һәм "Әрмән йәкшәмбе мәктәбе", "Айгөл иле" изостудияһы, "Матур ғаилә - ил күрке" ғаиләләр фестивале, "Прометей" ирекмәнлек үҙәге, "Мостай иле" йәйге ял программаһы, "Мостай уҡыуҙары", "Таҙа фән" уҡыуҙары, "Юлбарыҫ" тарихи клубы проекттары ярҙамында балаларҙы халыҡ әкиәттәре өлгөһөндә тәрбиәләү, милли мәғарифты үҫтереүҙә электрон саралар ҡулланыу тураһында һөйләй.

- Был сарала тәүге тапҡыр ҡатнаштыҡ. Файҙалы танышлыҡтар булдырҙыҡ, үҙебеҙҙең балалар баҡсаһының "Балаларҙы әкиәт аша тәрбиәләү" тигән эш тәжрибәһен башҡаларға күрһәттек, коллегаларҙың тәжрибәһен өйрәндек, - тип тәьҫораттары менән бүлешә 166-сы Башҡорт балалар баҡсаһы мөдире Гөлсара Килдеғолова. - "Айыу һәм бал ҡорттары" әкиәте миҫалында рәсем, математика һәм башҡа кәрәкле йүнәлештәрҙә эшләүебеҙҙе сағылдырған осталыҡ дәресебеҙ бөтәһенә лә оҡшаны. Коллегаларыма былай ҙур кимәлдәге күргәҙмә, ярыш сараларынан ҡурҡырға кәрәкмәй, тип әйтер инем. Үҙ урыныңда шым ғына эшләп йөрөргә була, әммә ҡайҙалыр барып, шул эш һөҙөмтәләрендә, ҡаҙаныштарыңды башҡаларға күрһәтеүҙә әһәмиәтле. Беҙ киләсәктә лә шундай күргәҙмәләр, саралар булһа, мотлаҡ ҡатнашабыҙ тип дөртләндек. Сөнки балаларҙа башҡорт теленә һөйөү һәм ҡыҙыҡһыныу уятыуҙың төрлө сараларын өйрәнеү буйынса баш ватабыҙ, ошо юҫыҡта башҡалар тәжрибәһенә күҙ һалыу файҙалы. Мәҫәлән, Бүрәт республикаһы вәкилдәренең ошо сараларғы "Балаларға милли кейем аша тәрбиә биреү" тигән күргәҙмәһе бик тә фәһемле булды. Был эш беҙҙә лә, бигерәк тә Урал арьяғы райондарында алып барыла ул, уны ныҡлап тәжрибәбеҙгә индереү кәрәк буласаҡ.

ҠЫҪҠАСА

# ИМЕНЛЕК ҺАҠЛАНҺЫН!

✓ **Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһының Терроризмға ҡаршы комиссияһы һәм оператив штабының берлектәге ултырышы үтте.** Унда БР Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров май башындағы оҙайлы байрамдарҙа үткән төрлө сараларҙа ҡатнашыусыларҙың именлеген һәм хоҡуҡ һаҡлауҙы тәьмин итеү бурысын ҡуйҙы. Яҡынса күҙаллауҙар буйынса дөйөм алғанда 300 мең кешенең ҡатнашыуы көтөлә. Шулай уҡ ултырышта быйыл 9-14 июлдә баш ҡалала үтәсәк Халыҡ-ара Йәйге Балалар уйындарында именлек тәьмин итеү тураһында ла һүҙ булды. Сараға донъяның 30 иленән 2 мең йәш спортсы киләсәк.

✓ **11 апрелдә хакимиәт ҡарамағындағы "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссияның Терминология төркөмө ағзалары 8-се һәм 21-се ҡала клиник дауаханаларында законды үтәлешен тикшерҙе.** Сара методик һәм консультатив ярҙам күрһәтеү маҡсатында ойошторолдо. Медицина учреждениелары етәкселеге асыҡланған етешһеҙлектәрҙе ҡыҫҡа ваҡытта төҙәтергә вәғәҙә бирҙе. Былдай күсмә тикшереүҙәр аҙна һайын кесе йома көндө уҙғарыласаҡ.

✓ **18, 23, 25, 30 апрелдә, шулай уҡ 5 һәм 7 майҙа Өфөлә Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 74 йыллығына арналған хәрби парадтың репетициялары үтәсәк.** Апрелдә ул "Өфө-Арена" алдындағы майҙанда уҙһа, майҙа Октябрь проспектында буласаҡ. Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген һәм ҡатнашыусыларҙың именлеген тәмьин итеү маҡсатында 5 һәм 7 майҙа киске туғыҙынсы яртынан төнгө сәғәт 11-гә тиклем Төньяҡ үткәүелдән Көньяҡ урамына тиклем транспорт хәрәкәте өлөшләтә ябыласаҡ, йәмәғәт транспорты хәрәкәте маршрутлы ла үҙгәрәсәк.

✓ **Өфөлә, "Торатау" конгресс-холы ҡаршыһында, Әхмәтзәки Вәлиди урамы, 1-се йорт адресы буйынса Халыҡ-ара йәйге балалар уйындары Дирекцияһының офисы асылды.** Унда ойоштороу эштәре алып барыласаҡ. Майҙансыҡ көнәшмәләр үткәреү һәм ҡунаҡтарҙы ҡабул итеү өсөн кәрәкле барлыҡ ҡорамалдар менән йыһазландырылған. Әлеге ваҡытта Өфө - Халыҡ-ара Балалар уйындары үткән гөнө түгел, ә Ҡышҡы һәм йәйге уйындарҙы ҡабул иткән берҙән-бер Рәсәй ҡалаһы булып тора.

✓ **Өфөлә "Бер, ике, өс! Урыныңдан күс!" тип аталған акция сиктәрендә газондарҙа, тротуарҙарҙа, йәйәүлеләр йөрөгән юлдарҙа, балалар һәм спорт майҙансыҡтарында парковкаланған автомобилдәрҙе асыҡлау буйынса рейд үтте.** Былдай парковкалар ҡала территорияһын бысратып ҡына ҡалмай, ә кешеләргә лә ҡамасаулай. Акция шарттары буйынса, социаль селтәрҙәрҙә рөхсәтһеҙ парковкаланған автомобилдәрҙең фотоһын һалырға кәрәк. Әгәр уның хужаһы 20-30 минуттан транспорт сараһын алмай икән, машина штраф туҡталышына алып кителә.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған көнәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡан баҫымын төшөрөү

❖ 1-әр ҡалаҡ бал, сөгөлдөр, кишер һутын, 1 стакан керән һыуын һәм 1 лимон һутын бергә ҡушырға ла, көнөнә 2 мәртәбә ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Быны ай ярым эшләргә кәрәк. Керән һыуын эшләүе гөнә мәшәҡәтләрәк - ыуылған керәнде баштa һыуҙа 36 сәғәт төнәтергә, шунан ғына ҡушырға.

## Тынысланыу өсөн

❖ 1:1 күләмендә гөлйемеш менән бәпембә тамырҙары алырға һәм 1 ҡалаҡ ҡатнашмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөләккә термоста төнәтергә. Иртәнсәк һөҙөргә һәм көнөнә 3 мәртәбә ашар алдынан 1/3 стакан эсергә. Ярһыу бөткәнсе 2-3 ай дауамында дауаланырға.

❖ Бәпембә һәм әрекмәндең (лопух) кипкән тамырҙарын төйөп, он итергә лә һәм 2 ҡалаҡ шул онға 3 стакан һыу ҡойоп, төнгөләккә ҡалдырырға. Көнөнә 5 тапҡыр: ашар алдынан һәм йоҡларға ятҡанда яртышар стакан эсергә. Ярһыу бөтәсәк.

❖ 20 г ҡыр наратбашына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3 мәртәбә ашағандан һуң яртышар стакан эсергә.

## Ашҡаҙан аҫты биҙе

❖ 100-әр г эт дегәнәге (череда), аҡ сәскә, бәпембә тамыры, 75-әр г алтынбаш (золототысячник) һәм кукуруз сәсе (кукурузные рыльца) алып, 2 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға кистән 2 стакан яңы ғына ҡайнап сыҡҡан һыу өҫтәп, термоста төнәтергә. Иртәнсәк һөҙөргә, көнөнә 4 мәртәбә ашарҙан 1 сәғәт алда 100-әр г эсергә.

## Ала тире

❖ 1 өлөш йәшел сәтләүеккә 12 өлөш бал, 1 өлөш шәкәр ҡомо, 50 өлөш һыу ҡойоп, һүрән утта 30 минут торорға. Ашар алдынан көнөнә 3 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

❖ 1-әр ҡалаҡ һары мәтрүшкә һәм көнбағыш майы, 3 ҡалаҡ зәйтүн майын ҡушып, 1 ай төнәтергә, һөҙөргә, зыян килгән урындарға һөртөргә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *"Туған телдәрҙе өйрәнеүҙе модалы, абруйлы итергә кәрәк. Балаларға ябай ғына әйберҙе: башҡорт телен өйрәнеп, төрки халыҡтар донъяһына, мәҙәниәтенә ишектәр асылыуын аңлатырға кәрәк", - тип өҫтәне Радий Фәрит улы.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

**Күпләп һарыҡ көтөүселәрҙең көнкүрешендә кейеҙ баҫыу менән бергә балаҫ һуғыу ҙа төп кәсептәрҙең береһе булған. Балаҫ (палаҫ, келәм/келем) һуҡҡанда ҡулланылған төрлө-төрлө техник алымдар тап ошоно дәлилләй ҙә инде.**

Ике-өс быуат элек балаҫ һуғыу киң таралған күренеш булған, сөнки был мәлдә һарыҡтарҙы күпләп көткәнлектән, хужалыҡтарҙа йөн күп булған. XIX быуаттың икенсе яртыһында һәм XX быуатта малсылыҡ менән көн күргән көньяҡ башҡорттарында айырыуса сәскә атҡан. XX быуат башына ошо өйрәнелгән төбәктә балаҫ һуғыусы ике ҙур үҙәк иҫәпләнә: көньяҡ-көнсығыш (тау һәм тау аръяғы) менән көньяҡ-көнбайыш (Дим йылғаһы бассейны һәм урта Ағиҙел буйы). Был ике төбәктең балаҫтары художестволы үҙенсәлектәре, шулай уҡ һуғыу ысулдары менән айырылып торған. Элекке Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙе территорияһында йәшәгән көнсығыш башҡорттары ла (Силәбе менән Ҡурған өлкәләре) балаҫ һуҡҡан, әммә уларҙы айырып тороусы үҙенсәлектәр юҡ тиерлек.

Көньяҡ-көнсығыш балаҫы XX быуат буйына үҙенсәлеген һаҡлаған. Был төбәктә балаҫтарҙы тар ғына станокта (уны урын тип йөрөтәләр) һуҡҡандар.



*Көньяҡ-көнсығыш балаҫын һуғыу. Тирәсһеҙ туҡыу станогында - Йәмилә Исламғолова. Баймаҡ районы Күсей ауылы. 1958 й.*

Был станоктың тирәсе юҡ, көрөҫө йылҡы малы ялынан, ике табалдырыҡлы. Туҡыу станогының тарағы ҡылыҫҡа оҡшаш таҡта киҫәгенән ағала һәм ҡылыс тип атала. Ишелгән һәм ҡаҙыҡҡа беркетелгән нигеҙ яйлап тағатыла бара. Балаҫ өсөн әҙерләмәләр оҙон һәм тар (18-24 см) буй итеп һуғыла, эш тамамланғанда әҙер материал туҡыусының аяғы аҫтында тотош рулон булып йыйылып ята. Уны балаҫтың оҙонлоғона (2,0-нән 3,5 м-ға тиклем) таманлап киҫәктәргә ҡырҡҡандар. Балаҫта 5-7 буй була. Балаҫтың уң яғында уларҙы тоташтырып тегелгән еп күренмәй ҙә. Балаҫтың сите төҫлө буҫтау, ҡомат, бурлат йә башҡа бер төҫтәге туҡыма менән тегелә.

Әҙер балаҫты, ғәҙәттә, кейеҙгә теккәндәр. Урындыҡҡа түшәлгән балаҫтар өйҙө матурлаған. Борон тирмәнең ҡунаҡ өлөшөнә ергә лә түшәлгән. Көндәлек урын аяғы йәки һандыҡҡа өйөп ҡуйылған түшәк араһында ла балаҫ булған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ*



# ТЕЛ - ТЕРЕ ШИШМӘ...

## үлмәҫ, киләсәккә еткерербеҙ

**(Башы 2-3-сө биттәрҙә).**

Бөгөн һәр кем туған телендә уҡый ала, ләкин туған телдәрен өйрәнгән балалар һаны йылдан-йыл кәмей. Беҙгә башҡорт, рус, инглиз телдәрен ныҡлап өйрәтеүсе мәктәп кәрәк, уларҙа көнсығыш телдәрен дә өйрәтергә була. 2024 йылға тиклем республика етәксеһе 12 лингвистик гимназия асырға тәҡдим итте. Уларҙы Өфө, Стәрлетамаҡ, Сибай, Туймазы, Күмертау, Ишембай, Дүртөйлө ҡалаларында, Дыуан, Белорет һәм Әбйәлил районларында төҙөйәсәкбеҙ. Уларға, мәҫәлән, "Йондоҙ", "Салауат" тип башҡортса исемдәр бирергә була. Әйҙәгеҙ, бергә булайыҡ!

Балалар телдәрҙе өйрәнһен, тиһәк, уларҙың мотивацияһын арттырыр яңы саралар кәрәк. Уның өсөн телдәрҙе уҡытыу методикаһын камиллаштырыу мөһим. Мәҫәлән, уҡытыуҙы ҡыҙыҡлы һәм һөҙөмтәле итергә, электрон дәреслектәр, интерактив һәм интернет-технологиялар ҡулланырға. Яңы технологиялар ҡулланып, асыҡ дәрестәр, оҫталыҡ дәрестәре үткәрергә, виртуаль олимпиадалар, конкурстар һәм экскурсиялар ойошторорға. "Юғары ос!" ("Взлетай!") проектында интерактив башҡорт теле модуле эшләйәсәк, был мәктәп уҡыусыларына һәм башҡорт телен өйрәнеүселәр өсөн яңы форматтағы проект. Тағы бер юл: башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада еңеүселәре һәм призерҙарына вузға уҡырға ингәндә өҫтәмә балдар биреү. Бының өсөн беҙҙең олимпиада Бөтә Рәсәй олимпиадалары исемлегенә инергә тейеш, Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы менән бергә был тәҡдим буйынса эшләй башланыҡ. Туған телдәр буйынса Рәсәй кимәлендәге, төбәк-ара конкурста еңгән балалар өсөн Радий Фәрит улы Республика Башлығы премияһын булдырыуҙы тәҡдим итә. Мәҫәлән, йыл һайын егерме уҡыусыға 50 мең һум күләмендә премия тапшырырға. Тағы бер тәҡдим: каникул ваҡытында, бигерәк тә йәйге, профилле сменалар ойошторорға. Беҙ "Йәйләү" тигән смена үткәрәбеҙ, ләкин унда урын аҙ, "Йәйләү"ҙе республиканың төрлө төбәктәрендә ойошторорға була, әлбиттә, күрше өлкәләрҙән дә башҡорт балаларын саҡырырға кәрәк. Телдәрҙе өйрәнеүҙә ғаиләнең роле бик ҙур. Мәктәп белеменең беренсе форумында биш көнлөк уҡыуға күсеү тәҡдим ителде. Дәрестәрҙән бушаған шәмбе көндәрендә ата-әсәләр менән төрлө проекттарҙа ҡатнашырға була, ата-әсәләр балалары менән ваҡытын күберәк үткәрһен ине. Мәҫәлән, ял көндәрендә этнотурҙарға сыҡһындар, бергәләп викторина-конкурстарҙа ҡатнашһындар һ.б. Ә һеҙҙең "Этношәмбе" проектына ниндәй тәҡдимдәр булыр?

Бөгөн туған тел уҡытыусыһының профессиональ кимәленә талаптар көслө: белгестәрҙе әҙерләүҙе көсәйтеү, уларҙың квалификацияһын күтәреү, методик ярҙам күрһәтеү. Беҙгә уҡытыусылар, ғалимдар, белгестәр ҙә кәрәк. Киләһе йылда "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсы 25 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Конкурста еңеүсе уҡытыусыға Радий Фәрит улы Республика Башлығы премияһын 100 меңгә тиклем, финалистарға 50 меңгә тиклем билдәләргә тәҡдим итте. Шулай уҡ йыл да 25 иң яҡшы башҡорт һәм 25 рус теле уҡытыусыларына бирелгән премияны ла республика етәксеһе 100-әр меңгә тиклем арттырыу кәрәк, тип иҫәпләй.

### Йомғаҡлау һүҙе

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезы эшлекле һөйләшеүҙәр, аныҡ тәҡдимдәр, етди ҡарарҙар ҡабул ителгән сара булды. Быға үткәрелгән ете секция эшен күҙәтеп, һәр урында ҡуйылған мәсьәләләр буйынса фекерле белгестәр ултырыуын күреп тә инандыҡ. Иң мөһиме, съездың йомғаҡлау өлөшөндә "Рәсәйҙең күп милләтле палитраһында туған телдәр: бөгөнгөһө һәм киләсәге", "Башҡорт теле Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булараҡ: тәжрибә һәм яңылыҡтар", "Этномәҙәни мәғариф мөхите: телде белгән шәхес тәрбиәләүҙә көсәгилешлекте һаҡлау", "Башҡорт теле һөнәри һәм юғары белем биреү системаһында: үҫтереүҙең актуаль мәсьәләләре", "Туған телде һәм милли йолаларҙы һаҡлау һәм үҫтереүҙә ғаиләнең әһәмиәте", "Башҡорт телен өйрәнеүҙә цифрлы белем биреү мөхитен булдырыу", "Мәғариф өлкәһендәге дәүләт сәйәсәте: туған телдәрҙе өйрәнеүҙең актуаль мәсьәләләре" тигән темалар буйынса сығарылған һәр ҡарар республика етәкселегенә еткерелде. Уларҙы тыңлағандан һуң Радий Хәбиров тормошта барған бөгөнгө бөтә үҙгәрештәрҙе аныҡ аҡыл менән баһалап ҡына тейешле закондар, эш йүнәлештәрен булдырырға тейешбеҙ, тип көнәш итте. "Беҙ бер нисә принциптан сығып эш итергә тейешбеҙ. Беренсенән, башҡорт теле кәрәкле, мөһим булыуын, талап ителеүен тойоу. Сөнки ул беҙҙең дәүләт телебеҙ. Бына күптән түгел дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ултырышында бик ҡыҙыҡлы күренешкә юлыҡтыҡ: төүге тапҡыр башҡорт телендә сығыш яһанылар. Аңлайһығыҙмы, республика күптән бар, әммә был беренсе тәжрибә. Һәм мин бындай эш тәжрибәһе даими булыр тип өмөт итәм. Әлбиттә, бының өсөн уңайлы шарттар булдырыу мөһим", - тине Радий Фәрит улы. Шулай уҡ был съезд йыл да үткәрелергә һәм уның ҡарарҙары дәүләт тарафынан бойомға ашырылырға тейеш булыуын да һыҙыҡ өҫтөнә алды республика етәксеһе. Делегаттарҙың чиновниктарҙан башҡорт телен белеүҙе талап итеү, милли кадрҙар әҙерләүҙе яйға һалыу тураһындағы тәҡдимен дә хупланы Радий Хәбиров һәм киләсәктә ҡайһы бер дәүләт структуралары етәкселәрен башҡорт телен белеү кимәленә ҡарап баһалаясағын белдерҙе. Балаларҙы башҡорт телен өйрәнеүгә ылыҡтырыу маҡсатында цифрлы технологиялар, интернет селтәре мөмкинлектәрен ҡулланып эшләгән ирекмәндәргә ярҙам итеүгә лә ыңғай ҡараш етәксе. "Туған телдәрҙе өйрәнеүҙе модалы, абруйлы итергә кәрәк. Балаларға ябай ғына әйберҙе: башҡорт телен өйрәнеп, төрки халыҡтар донъяһына, мәҙәниәтенә ишектәр асылыуын аңлатырға кәрәк. Был конкуренцияла ҙур өҫтөнлөк", - тип өҫтәне Радий Фәрит улы.

"Мәғариф өлкәһендәге дәүләт сәйәсәте: туған телдәрҙе өйрәнеүҙең актуаль мәсьәләләре" тип аталған секция эше һөҙөмтәһендә "милли мәктәп" терминының федераль ҡануниәтҡә индереү, федераль исемлектә булған төрлө предмет әсбаптарын башҡорт теленә тәржемә итеп баҫтырыу өсөн яңынан тик лингвистик тикшереү генә үткәреүҙе тәҡдим итергә, республика кимәлендә Башҡортостандың дәүләт телдәрен ҡараған һәм уларҙы регламентлаған закон ҡабул итергә, Рәсәй кимәлендә бөгөн эшләп килгән рус теленә ҡағылған федераль маҡсатлы программа кеүек Рәсәй халыҡтары телдәрен ҡурсалаған һәм ярҙам итҡән программа ҡабул итеү тураһындағы тәҡдимдәр ҙә ыңғай баһаланды. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров файҙалы закондар ҡабул итергә әҙер булыуын билдәләне һәм Өфө ҡалаһы мэры Өлфәт Мостафинға башҡорт телен бушлай өйрәтеү курстарын ойоштороп ҡарарға тәҡдим итте. "18 май башҡорт теле буйынса тоталь диктантта күрешербеҙ", - тип өҫтәне етәксе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезына Татарстан, Бүрәт республикалары вәкилдәре лә килде һәм илдең 22 милли субъектында ошо уҡ проблемалар актуаль булыуы тураһында һөйләнә. Ошолай бергә йыйылып хәл итеү юлдарын барлау һәм киләсәктә Рәсәй кимәленә тәҡдимдәр менән сығыуҙы хуплап, ярҙам итәсәктәре тураһында ла белдерҙе улар. Тимәк, дәүләт кимәлендә был эштәрҙе атҡарыуға бурыслы тип табылған структуралар оҙаҡҡа һуҙмай ғына форсат менән файҙаланып ҡалһа, ҡумәкләп яу ҙа ҡайтарырбыҙ әле, тигән ышаныс бар. Иң мөһиме, ниһайәт, республикала милли мәғариф өлкәһенә етәкселек яҡты йөҙө менән боролдо. Был инде дәртләнеп эшләргә, яңы проекттарҙы тормошҡа ашырырға, туған телебеҙҙе ҡулланыу даирәһен киңәйтергә һәм уны кәрәкле итергә яңы мөмкинлектәр асты.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

# ДОНЪЯ ҒАЛИМДАРЫ ЛА...

## Өфө-II ҡаласығының йәшен таный

**Беҙҙең гәзит биттәрендә Өфө-II ҡаласығы тарихы тураһында күп яҙылды. Әммә ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тиҙәр. Шул ҡараштан сығып, түбәндә Өфө-II ҡаласығы тураһында тарихсы Салауат ХӘМИҘУЛЛИНдың ошо тема буйынса аныҡ мәғлүмәттәр менән дөйөмләштерелгән мәҡәләһен тәҡдим итәбеҙ.**

### Кем тәүге тикшереүсе?

2006 йылда Өфөнөң боронғо өлөшөндә тәү ҡарашҡа гәҙәти булмаған ҡаҙыныу эштәре башланды. Әхмәтзәки Вәлиди һәм Пушкин урамдары араһындағы кварталды реконструкциялау алдынан, законға ярашлы, уны археологтар тикшерҙе. Ябай тикшеренеү сенсацияға килтерҙе: Өфөнөң йәше быға тиклем иҫәпләнеп йөрөлгәндән өс тапҡырға олораҡ икән: уға 1500 йыл!

Өфө-II ҡаласығын тәү тапҡыр 1956 йылда ошо территорияға беренсе шурфтар һалыусы Петр Ищериков асҡан, тип иҫәпләнә. Пробалы ҡаҙыныу эштәрендә ул ваҡытта әле генә Пермь университетын тамамлап ҡайтҡан йәш ғалим Нияз Мәжитов та ҡатнаша. Ул үҙенең йондоҙло сәғәтен 50 йыл көтә һәм көтөп ала - тап ярты быуаттан һуң ғына Зәки Вәлиди һәм Пушкин урамындағы кварталдарҙы реконструкциялау башлана. Тап Н. Мәжитов, Башҡорт дәүләт университетының профессоры һәм академик, тәүгеләрҙән булып иртә мәҙәни ҡатламдар V быуат менән билдәләнә, тип белдерә, йәғни Өфө ярымутрауы территорияһындағы билдәмә 1500 йыл самаһы элек барлыҡҡа килгәнлеген бихисап сығанаҡтар һәм документтар, археологик табыштар менән раҫлай. Бигерәк тә Мәскәү белгестәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының Евразия яландарының урта быуат археологияһы төркөмө мөдире Игорь Кызласовтың эксперт билдәләмәһе баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә булды: "Монументаллеге һәм туктауһыҙ йәшәү ваҡыты буйынса ҡаласыҡтың бөтөн Көнсығыш Европала тиңе юҡ", - тине ул. Шунда уҡ уҫал теллеләр, Өфөнө 1000 йыллығын билдәләгән Ҡаҙандан күреп "картайттылар", тип раҫлай башланы. Был, ысынлап та, шулаймы икәнен асыҡлап ҡарайыҡ.

### Боронғо Өфө тураһында батшалар ҙа, ғалимдар ҙа һөйләгән

1669 йылда батша Алексей Михайлович Өфөгә рус кешеләре килеп, боронғо ҡәберлектәрҙән "алтын һәм көмөш әйберҙәр һәм һауыт-һаба ҡаҙып алыуға" борсолоуын белдерә. XVIII быуаттың 30-сы йылдарында Ырымбур экспедицияһының секретары булған рус ғалимы Петр Рычков бик күп билдәле башҡорттар менән һөйләшә. Ҡара-Табын олоҫо старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаевтың: "Ҡаҙан ханлығының һәм башҡорттарҙың Рәсәй скипетрына буйһонғанға тиклем күп йылдар әүәл хәҙерге Өфө ҡалаһы урынында Ағиҙел йылғаһынан үргә табан Ҡариҙел йылғаһының башына һәм йылға яры буйлап урынлашҡан тауҙарға тиклем оҙонлоғо 10 саҡрымға һуҙылған бөйөк ҡала булған", - тигән һүҙҙәрен үҙенең "Ырымбур топографияһы"нда теркәп ҡалдыра. Рычков күрһәтеүенсә, Муллаҡаевтың мәғлүмәттәре 1735-1740 йылдарҙағы ихтилал ваҡытында юғалған башҡорттарҙың йылъяҙмаһы мәғлүмәттәренә нигеҙләнә.

Башҡортостандың боронғолоғон күңел биреп тикшереүсе, Өфө ҡалаһының башлығы Дмитрий Волков (1875 - 1887 йылдарҙа башлыҡ була) "Өфө губерна ведомстволары"нда: "Беҙ, нигеҙҙә, ҡала ситендә өнһөҙ ҡурғандар: күптән юғалған халыҡтарҙың һәйкәлен - күптән инде тынған көрәш шаһиттарын күрәбеҙ. Йылғалар араһындағы һәм хәҙер Өфө иркен йәйелгән барлыҡ киң майҙан кеше һөйәктәре менән тулған баҫыуҙы хәтерләтә: ҡайҙа ғына күрәк тыҡма, һәр ерҙә һөлдәләр һәм һөйәктәр... Был - кеше һөйәктәре менән ашландырылған Аллаһ яланы бында ҡасандыр оҙаҡ һәм ҡаты алыш булыуын, күп кешеләр ыҙаланыуын һәм үлеүен асыҡ һөйләй", - тип яҙа.

Случевск тауынан башланып (хәҙерге С. Юлаев скверы) телеүҙәккә тиклемге территория тотошлайы ҡәберҙәрҙән тора. Биналар төҙөгәндә төҙөүселәр Өфө байҙарының бай ҡәберлектәренә тап була. Бихисап алтын һәм көмөш биҙәнеү әйберҙәре, һауыт-һаба, башҡа предметтар табыла, уларҙың күп өлөшө юғалып бөтә, бары тик ҙур булмаған бер өлөшө генә Милли музейҙа һаҡлана.

### Боронғо башҡорттарҙың баш ҡалаһы ул

Башҡортостандың Урта быуат ҡалалары тураһында үҙенең яҙмаларында XII быуаттың ғәрәп географы Мөхәммәд әл-Иҙриси: "...Эске башҡорттарҙың ҡалалары араһында Масра һәм Касра бар. Ике ҡала ла ҙур түгел, һәм сауҙагәрҙәр унда һирәк була. Унда ерҙәренә һәм илдәренә килеп аяҡ баҫҡан сит ил кешеләрен үлтерәләр, шуға берәү ҙә килергә атлығып тормай. Ике ҡала ла Атил йылғаһына ҡойған йылға буйында урынлашҡан..." - тип яҙа.

Иҙрисиҙең картаһында Атил йылғаһы (йәғни Иҙел йәки Волга) Урал тауҙарынан ағып сыға, ә Каср һәм Масра ҡалалары уның уң яҡ ҡушылдығы ярында урынлашҡан. Эш шунда: боронғо грек географы Клавдий Птолемей заманынан Волганың башы тип Ағиҙел йылғаһы иҫәпләнгән. Тимәк, Ағиҙелдең уң ҡушылдығы - Ҡариҙел була.

"Эске башҡорттар"ҙан тыш, Иҙриси "тышҡы башҡорттар"ҙың өс ҡалаһын иҫкә ала: "Тышҡы башҡорттар"ға килгәндә, улар араһында Ҡараҡая, Намджан һәм Гурхан бар. Улар халҡы күп булған һәм үҙәрен-үҙҙәре тәьмин иткән ҡалалар. Уларҙа сауҙа һәм һөнәрселек ныҡ үҫешкән. Уларҙың ҡайны берҙәре башҡаларҙың ерҙәренә килеп, үҙҙәренә кәрәкле нәмәләрҙе ала. Был ундырышлы ил, унда үлән ҙә, мал да күп..."

Атап үтелгән ҡалаларҙың ҡайһыһы Өфөгә тап килеүе билдәһеҙ. Иң мөһиме, был яҙмалар Өфө-II ҡаласығын ҡаҙығанда яһалған асыштарҙы раҫлай: бында ҡара һәм төҫлө металлургия эҙҙәре табыла. Ҡаласыкта боронғо мейес эҙҙәре, бронза ҡойолмалары, шулай уҡ металл иретеү һауыттары табыла. Боронғо башҡорт ҡалаларында металлургияның киң үҫешеүе әл-Иҙрисиҙең яҙмаларына тап килә: "...Намджан - ҡала ҡоролошо булған бәләкәй генә ҡала, уның менән төрки ҡәбиләһенән булған ир кеше етәкселек итә. Был ҡала Сукан тип аталған йылға ярында урынлашҡан. Ҡаланан көнсығышҡа табан Арджика тауы урынлашҡан, унда мендерсә кеше эшләгән баҡыр копиҙары (рудник йәки карьер - *Ред.*) бар..."

### Намджан - сауҙагәрҙәр һәм металлургтар ҡалаһы

Үкенескә күрә, Намджан картала билдәләнмәгән. Һәм ҡайҙа урынлашыуы тураһында тексти яҙылыуы буйынса ул Өфөгә тап килмәй. Әммә уның тураһындағы мәғлүмәт шуныһы менән ҡыҙыҡлы: ул Урта быуат дәүерендәге көньяҡ Урал ҡалаһының тибын һүрәтләй. Намджандың Урал йылғаһы бассейнында урынлашыуы ихтимал. Иҙриси был ҡала тураһында башҡа мәғлүмәттәр ҙә килтерә: "Унда бик күп баҡыр табалар, уны Шаш иленең Хорезм һәм башҡа ҡалаларына һәм күрше гуздар иленә оҙаталар..." Шаш - ул Ташкент, Хорезм - Амударьяның түбәнге тамағы, гуздар хәҙерге Ҡаҙағстан территорияһында йәшәгән. Табылған баҡыр каруан юлы менән Урта Азия илдәренә ебәрелгән. Каталон атласының карталарының береһендә билдәләнеүенсә, башҡорттарҙың каруан сауҙаһының бер маршруты ҡайҙалыр көнсығышҡа китә. Иҙриси был турала бына нимә тип яҙа: "...Был ҡаланан шулай уҡ йылға буйлап әл-Хәзәр диңгеҙенә төлкө һәм ҡондоҙ тиреһен сығаралар, уларҙы әл-Хәзәр диңгеҙе яры буйында һәм Дейлемда юғары хаҡҡа һаталар..." Телгә алынған әл-Хәзәр диңгеҙе - Каспий, ә Дейлем өлкәһе хәҙерге Ирандағы Каспий буйындағы Мазендаран провинцияһы. Шулай итеп, Намджан сауҙагәрҙәре Каспий диңгеҙен киҫеп сығып, уның көньяҡ ярына барып еткән. Артабан Иҙриси Намджан халҡының диңгеҙ сауҙаһы тураһында мәғлүмәттәр килтереп, уның географик урыны тураһында бер шик тә ҡалдырмай: "Был ҡалала шулай уҡ балсыҡтан яһалған әйберҙәр һәм оҙаҡ хеҙмәт итеүсе, юғары сифатлы көршәктәр эшләйҙәр. Был йылға ярҙарында төрлө аҫыл таштар, лазурит, шулай уҡ был йылға төрлө балыҡтар бар. Унда яҙып та, һөйләп тә аңлатып булмаған ҙур балыҡтар йәшәй. Намджан ҡалаһы халҡы төрлө хәйләләр менән уларҙы енел генә тота ала. Уларҙы күп итеп тотоп, шуның менән йәшәйҙәр, күп өлөшөн тоҙлайҙар һәм һуңынан Хазар диңгеҙенә сығасаҡ карапларына килтерәләр. Улар ошо диңгеҙҙән яр буйлап баралар һәм Итиль ҡалаһына элгәләр, унда балыҡтарын һаталар һәм үҙҙәре лә ашайҙар..." Текстан күренеүенсә, Намджанда йәшәүселәр "башҡорттарҙан хазарҙарға" йылға юлын үҙләштерә. Урал (Яйыҡ) йылғаһы буйлап аҫҡа суднолар- ҙа төшкәндә улар Каспий диңгеҙенең акваторияһына сыға. Һуңынан, уның яры буйлап көнбайыш йүнәлештә хәрәкәт итеп, Волганың дельтаһына барып етеп, йылға буйлап үрләп Хазарияның башҡалаһы Итиль ҡалаһына барып сығалар. Унда улар аҫыл таштар, йөнлек тиреһе һәм тоҙло бикре һата. Иҙрисиҙең тексына һәм картаһына ярашлы, Намджандың Башҡортостандың көньяҡта Эмба йылғаһы һәм Ҡаҙағстан өлкәһенең Муғоджар тауҙарына тиклем йәйрәп яткан тарихи территорияһында урынлашҡан булыуын күрәбеҙ. Был ҡаланың Яйыҡ йылғаһы баш алған Арҡайым заманынан алып баҡыр табыу эштәре алып барылған Урал тауҙары эргәһендә урынлашыуында шик булыуы мөмкин түгел. Иҙриси яҙмаларын өйрәнеүсе Ирина Коновалова Намджан ҡалаһын хәҙерге Орск районы тирәһенә урынлаштыра.

**(Дауамы бар).**

---

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



Әхмәтзәки ВӘЛИДИ ТУҒАН

# БАШҠОРТ

**Ислам донъяһының тарихы, мәҙәниәте, географияһы, этнографияһы һәм бөйөк шәхестәре хаҡында мәҡәләләрҙе үҙ эсенә алған "Ислам энциклопедияһы" Голландияның Лейден ҡалаһында Э. Бриль тарафынан 1908 йылда баҫтырыла башлаған. Бөтәһе 5312 биттән торған был китаптың сығымдарын Бөтә донъя академиялар союзы менән Ислам донъяһына дуҫтарса мөнәсәбәттә булған Европа һәм Америка байҙары күтәргән. Был энциклопедия немецсә, французса һәм инглизсә әҙерләнгән.**

Төркиәлә "Ислам энциклопедияһы" бик күп йылдар һуңлап донъя күрә. 1939 йылдың майында Төркиә Республикаһы Мәғариф министрлығының министры Хәсән Ғәли Южел тарафынан Истанбул университетының ректоратына хат ебәрелә. Унда "Ислам энциклопедияһы"н төрөк теленә тәржемә итеү кәрәклеге хаҡында әйтелә. Телгә алынған университеттың әҙәбиәт факультетында комиссия төҙәлә. Уның ултырышында "Ислам энциклопедияһы"ның ҡайһы бер мәҡәләләрен киңәйтеп, төҙәтеп, тәржемә итеү, яңынан яҙыу тураһында ҡарар ҡабул ителә. Шулай итеп, "Ислам энциклопедияһы" төрөксә донъя күрә. Ул күп тапҡыр баҫыла. Һуңғы йылдарҙа Төркиәлә шулай уҡ Ислам буйынса энциклопедияларҙың яңы варианттары ла сыкты. Был энциклопедияла Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың байтаҡ мәҡәләләре нәшер ителә. Шуларҙың араһында түбәндә уҡыусыларҙың иғтибарына тәҡдим ителгән "Башҡорт" мәҡәләһе лә бар. Уның төрлө авторҙар, шул иҫәптән беҙҙең тарафыбыҙҙан башҡарылған бер ниҫә тәржемәһе Башҡортостан матбуғатында һәм китапта сыкты. Билдәле булыуынса, Өфө китапханаларында "Ислам энциклопедияһы" юҡ. Тик ҡайһы бер томдары ғына шәхси китапханаларҙа бар. Шуның өсөн башҡорт, рус, төрөк һәм инглиз телдәрендә әҙерләнгән был йыйынтыҡтың баҫылыуы бик мөһим. Төрөксә текст Төркиәлә нәшер ителгән энциклопедиянан, инглизсәһе иһә Истамбулдағы Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың шәхси архивында һаҡланған оттисктан (ул 1960 йылда Лейденда сыҡҡан "Ислам энциклопедияһы" өсөн яҙылған булырға тейеш) алынды. Башҡортса һәм русса тәржемәләре беҙҙең тарафыбыҙҙан эшләнде.

**Әхәт СӘЛИХОВ.**

Башҡорт - көньяҡ һәм урта Уралда йәшәгән төрки халыҡтын, Башҡортостан иһә был халыҡ йәшәгән дәүләттең исемелер. Бөгөн Совет Рәсәй республикалары араһында ошондай исемле бер республика бар. 1897 йылғы халыҡ иҫәбе буйынса башҡорттарҙың һаны 1 492 944 кеше булыуы билдәле (был иҫәпкә 117 737 типтәр ҙә инә). Башҡорттарҙың Иҙел, йәғни Волга болғарҙары кеүек, көнбайыш Төркөстандың көньяҡ өлөшөнән килеп сығыуын күрһәткән дәлилдәр бар (ҡарағыҙ, мәҫәлән, Кинйә исемле ата-бабалары хаҡында риүәйәттәр һәм географик исемдәр тураһында: Әхмәтзәки Вәлиди Туған, Төркиҙәр тарихы дәрестәре. - Истанбул, 1927, 125-се бит).

**(Дауамы бар).**

*✓ Берәү - һаҡал, берәү селтәр тип атап, был фекерҙе үҙебеҙ нығытабыҙ. Был дөрөҫ түгел. Башҡорт ҡатын-ҡыҙы яға ла, һаҡал да, селтәр ҙә, иҙеү ҙә, алмиҙеү ҙә, дәүәт тә, хәситә лә, муйса ла, муйынса ла, түштек тә һ.б. эшләгән.*

# ДОНЪЯЛА ТИҢЕ

## сәнғәт өлгөләре тыуҙырған

**Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәнеү әйберҙәренә ҡулланыусы булараҡ иғтибар артһа ла, бөгөнгө көндә уларҙы йыйыу һәм фәнни яҡтан өйрәнеү эшмәкәрлеге өлкәһендә бушлыҡтар байтаҡ әле. Был биҙәнеү әйберҙәрен һәр кем үҙенсә атап йөрөтә, үҙенсә аңлатма бирә, үҙенсә яһай. Рубриканың бөгөнгө ҡунағы - филолог һәм тыуған яҡты өйрәнеүсе белгес Азат Салауат улы ҒАРИПОВ уларға тарихи күҙлектән баһа бирә, уларҙың таралыу территорияһын ғына түгел, биҙәүес төрҙәренең айырмалыҡтарын, нимәнән эшләнеүен асыҡлай. Әңгәмәбеҙ - башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының түшкә тағып йөрөтөлә торған биҙәнеү әйберҙәренең үҙенсәлеге тураһында.**

**Һеҙ яңы ғына башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының түшкә тағып йөрөгән биҙәнеү әйберенең тарихына арналған "Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" тигән китап сығарҙығыҙ. Уның тураһында аҙыраҡ ҡына мәғлүмәт бирһәгеҙ ине.**

- Был китап учалылар өсөн генә тәғәйенләнгән тиергә була. Тәүге өлөшө башҡорт биҙәнеү әйберҙәренең тамырҙары, уларҙы тағып йөрөү традицияһы, төрҙәре, төҙөлөшө, биҙәлеү үҙенсәлектәре тураһында булһа, икенсе яртыһы - альбом-каталог. Ике йыл дауамында Учалы районын көньяғынан төньяғына тиклем йөрөп сыҡтым, 50-нән ашыу яға (учалылар башҡалар селтәр, һаҡал тигәнде яға, ти) осраны, уларҙың 43-ө китапҡа инде. 20-нән ашыу ауылдың яғаһы, уларҙың һүрәтләмәһе бар, тергеҙеү өсөн әҙер өлгө булып тора. Бының әһәмиәте ҙур, сөнки китаптарҙа Учалы районы тураһында ғәҙәттә бер генә һөйләм осрай: "Көньяҡтан төньяҡҡа киткән һайын, яғаларҙа тәңкәләр һаны арта". Ә хәҙер беҙ үҙебеҙҙең ерлектәге яғаларҙы яһай алабыҙ.

Уртаса алғанда, китапҡа ингән яғаларҙың тарихы бер быуат. Нигеҙенә ҡарағанда, унан да боронғораҡтары бар. Мин ул тиклем яға осрар тип көтмәгәйнем, сөнки был өлгөләрҙе байрамда ла, ҡунаҡта ла, урамда ла күреп булмай. Улар һандыҡ төптәрендә, музей сейфтарында ята. Йәғни, халыҡ уларҙы белмәй, күрмәй һәм киләсәктә күрмәйәсәк тә. Ә яғаларҙың ептәре көндән-көн серей, тәңкәләре ҡойола, ятып-ятып ҡасандыр таралып бөтәсәк. Матур сағында теркәп ҡалайым тип тотондом был эшкә. Унан һуң, музей экспонатына ҡарап ҡына фекер йөрөтөп булмай, төбәктә ниндәй яғалар таралыуын күреү мөһим.

"Яға" тип аталған биҙәнеү әйбере беҙҙең Урал аръяғына хас. Этнографтар Урал аръяғы тигәндә Силәбе, Ҡурған яҡтарын, Учалы районын, Әбйәлилдең бер өлөшөн күҙ уңында тота. Әбйәлил районының күбәләк ырыуы вәкилдәре йәшәгән ерҙән төньяҡҡа китһәк - был яғаның элек-электән йәшәгән урыны. Тағып йөрөү ысулы атамаға исем биргән, сөнки муйынды уратып алған яҫы таҫмаһы бар. Халыҡ уны һапма тип йөрөтә. Ҡурған һәм Силәбе башҡорттарында һапма һәм биҙәнеү әйберенең нигеҙе башлыса бер бөтөн. Учалы менән әбйәлилдәрҙә уларҙың һәр береһе айырым эшләнгәндән һуң ғына ҡуша тегелә. Горизонталь тәңкәләр - ҡорҙар һаны Әбйәлилдә 6-7 булһа, Учалыла 13-14 ҡорға тиклем барып етә.

**Яға, селтәр, һаҡал - бөгөн нисек теләйбеҙ, биҙәнеү әйберен шулай атай ҙа ҡуябыҙ. Был күренештең фән өсөн ниндәй кире яғы бар?**

- Бер район эсендә лә бер нисә биҙәнеү төрө осрай. Әйтәйек, Әбйәлилдә тамъян һаҡалы тигән төшөнсә бар. Ололарҙан һораштым, ысынлап та, ошо территорияла тамъяндар үҙенсәлекле биҙәнеү әйбере эшләгәндәр. "Хәҙер уны селтәр тип атай башланылар, элек әсәйҙәр һаҡал тип әйтә ине", - тинеләр. Ошо уҡ төбәктә селтәр ҙә бар һәм ул тамъян һаҡалынан айырылып тора. Тәңкәнән генә баҫылған алмиҙеү ҙә осрай. Тимәк, бер район эсендә биҙәнеү әйберҙәренең бер нисә төрө таралыу алған һәм был традиция борондан килә. Һәм һәр бер төбәктең үҙенең үҙенсәлектәре бар. Әгәр ҙә беҙ яғаны өйрәнеү өсөн Силәбе һәм Ҡурған яғына сыҡһаҡ, уларҙың Учалы яғаһынан айырылғанын күрәбеҙ. Шуға ла беҙ яға тип һөйләйбеҙ икән, бер генә өлгөгә, фотоға ҡарап, яға шулай булырға тейеш, тип уйларға ярамай. Селтәр тураһында һүҙ алып барһаҡ, ул шулай уҡ боронғо биҙәнеү әйбере. Күберәк көньяҡ райондарҙа таралыу алған тип иҫәпләнә. Нигеҙҙә, уны эшләүҙең үҙенең традицияһы бар һәм уны бер нисек тә яға менән бутарға ярамай.

Шуны күҙәтеп йөрөйөм, ысынлап та, беҙҙә бер генә биҙәнеү әйберен күҙ уңында тоталар ҙа, уны селтәр тип тә, һаҡал тип тә, яға тип тә атайҙар. Әгәр ҙә шулай дауам итһәк, башҡорт ҡатын-ҡыҙының бер генә биҙәнеү әйбере бар кеүек килеп сыға. Берәү - һаҡал, берәү селтәр тип атап, был фекерҙе үҙебеҙ нығытабыҙ. Был дөрөҫ түгел. Башҡорт ҡатын-ҡыҙы яға ла, һаҡал да, селтәр ҙә, иҙеү ҙә, алмиҙеү ҙә, дәүәт тә, хәситә лә, муйса ла, муйынса ла, түштек тә һ.б. эшләгән һәм таҡҡан һәм уларҙың һәр береһенең үҙенең айырмаһы һәм төрҙәре бар.

**Башҡорт телендә "түшелдерек" тигән һүҙ бар. Түшкә тағылған бөтөн биҙәнеү әйберҙәрен дөйөмләштереп, түшелдерек тип атау дөрөҫ буламы?**

- Был атама белдергән предмет, һүҙлектәрҙә үҙенең билдәләмәһе бар. Ул шулай уҡ түшкә, әммә күлдәктең эсенән тағыла. Туҡымаға горизонталь итеп төҫлө таҫмалар тегелә. Шуға ла түшелдерек тиһәк, уны күҙ уңында тотorға тейешбеҙ. Боронғо традицияларҙан сығып ҡараһаҡ, тимәк, биҙәнеү әйберҙәрен түшелдерек тип атау дөрөҫ түгел. Электән дөйөм атамаһы юҡ икән, "биҙәнеү әйбере" тип кенә йөрөтөү дөрөҫөрәк.

Шуны ла әйтергә кәрәк, беҙ биҙәнеү әйберҙәренең тарихын белеп бөтмәйбеҙ. Мәҫәлән, "һаҡал" тибеҙ икән, стереотип буйынса ул көрәк формаһында, ситенән шөңгөрҙәр, йоморо таштар булырға тейеш, тип уйлайҙар. Ә һаҡалдың Белорет районындағы өлгөләре, әбйәлилдәрҙең тамъян һаҡалы формаһы башҡа. Улар тураһында яҙһаң, был селтәр йә яға булырға тейеш, трапеция формаһында бит, тип төҙәтә башлайҙар. Эш шунда, райондар, ауылдар осрашҡан урындарҙа биҙәнеү әйберҙәре ҡатышыбыраҡ киткән һәм үҙенә күрә гибрид формаһы барлыҡҡа килгән. Сәрмәндәге һаҡалдарҙың, ысынлап та, нигеҙе трапецияға оҡшаш, әммә уны һаҡалға яҡынайтҡан нәмә - аҫҡы яғы ярым түңәрәк. Композицияһына килгәндә, уны селтәр тип атап булмай, иҙеүе - һапмаһы бар. Билдәле булыуынса, селтәргә таҫма ғына тегелә лә, уны шул таҫма менән бәйләп йөрөтәләр. Шуға ла беҙ һаҡалдың да төрлө булыуын аңларға тейешбеҙ. Бына Ишембай һаҡал менән селтәр осрашҡан территория, унда ике биҙәнеү әйберен дә тағып йөрөгәндәр. Бер фото ла һаҡланған, ундағы ҡатындарҙың береһе бәләкәй генә селтәргә оҡшаған биҙәнеү әйбере таҡҡан, уның аҫтынан ярым түңәрәк булып һаҡал күренеп тора. Руденко ла биҙәнеү әйберен ике ҡат итеп тағыуҙары хаҡында яҙа.

**"Хәситә" тигән термин да биҙәнеү әйберенә ҡарата киң ҡулланыла, уны селтәр тибындағы биҙәнеү тип беләбеҙ. Хеҙмәтегеҙҙә һеҙ уны әмәйҙек, дәүәт менән бергә ҡарайһығыҙ…**

- Заманында райондар буйлап этнографтар ғына түгел, телсе ғалимдар - диалектологтар ҙа йөрөгән. Биҙәнеү әйберҙәрен өйрәнгәндә телгә лә иғтибар итергә кәрәк. Көньяҡ райондарҙың ҡайһы бер һөйләштәрендә түшкә тағып йөрөтөлгән биҙәнеү әйберен хәситә тиҙәр. Әммә уның формаһы ниндәй, селтәрҙе хәситә тип атайҙармы, әллә хәситә тигән айырым төрө булғанмы - был турала мәғлүмәт етмәй.

Нигеҙҙә, беҙ белгән хәситә ул һул иңбаштан уң ҡултыҡ аҫтына төшөрөп, түшкә ҡырын кейә торған биҙәнеү әйбере. Улар хәситә, әмәйҙек, дәүәт атамалары менән билдәле. Паллас Башҡортостанда XVIII быуаттың аҙағында булып китә һәм хәситәләрҙе яҫы таҫманы ваҡ тәңкәләр, мәрйендәр, башҡа төр әйберҙәр менән биҙәйҙәр, тип яҙа. Руденко беҙҙә бер нисә тапҡыр була һәм ул әмәйҙек, дәүәт, хәситә араһында айырмаларҙы ла күрһәтә. 15-20 см киңлектәге таҫманан торғаны әмәйҙек, ваҡ тәңкәләр һәм мәрйендәр менән биҙәлә. Дәүәттә мәрйендәр ҡулланылмай, тип яҙа. Нигеҙенә тәңкә менән бер рәттән эре аҡыҡ тегелгән, ҡайһы берҙә ситен уҡа менән биҙәгәндәр. Шитова, ғәйнә башҡорттары дәүәтте муйынса тип атай, тип билдәләй. Әйткәндәй, һөйләштәрҙә башҡа төр терминдарҙы ла осратабыҙ: кесәбикә (һаҡмар), ҡыйа иҙеү (ҡыҙыл, мейәс), муйынҫа (дим, урта), муйын тәңкәһе (ҡыҙыл), теркәмә (дим, урта), хәйкә (төньяҡ-көнбайыш). Үкенес, музейҙарҙа дәүәттең совет осоро тәңкәләренән баҫылғаны бар, боронғолары юҡ тиерлек. Милли музейҙа бер генә дәүәткә барып юлыҡтым, әммә бер генә әйбергә ҡарап, һығымта эшләп булмай. Дәүәттең "тәүәт" фонетик варианты ла бар.



*Селтәр.*



*Һаҡал.*



*Яға.*

✓ ***Халҡыбыҙҙың донъяға ҡарашын күрһәтеүсе ошо уникаль "китап"ты уҡырға өйрәнәйек һәм бер нәмәне иҫтә тотайыҡсы: беҙ донъяла тиңе булмаған сәнғәт өлгөләре тыуҙырыуға өлгәшкән юғары зауыҡлы милләт вәкиле.***



Учалы районында, Арғаяшта ҡыя иҙеү осраны, ул тәңкәнән эшләнгән. Халыҡ уны арҡыры яға тип тә атай. Руденко билдәләүенсә, хәситәгә тәңкәләрҙән тыш төрлө бетеүҙәр, доғалыҡтар ҙа тегелгән. Формаһы һәм материалы йәһәтенән әһәмиәтен юғалтмаған күркәм әйберҙәр был ...

Учалы районында, Арғаяшта ҡыя иҙеү осраны, ул тәңкәнән эшләнгән. Халыҡ уны арҡыры яға тип тә атай. Руденко билдәләүенсә, хәситәгә тәңкәләрҙән тыш төрлө бетеүҙәр, доғалыҡтар ҙа тегелгән. Формаһы һәм материалы йәһәтенән әмәйҙектән айырылмаған тиерлек. Йыш ҡына хәситәне дәүҙтең аҫҡы яғына ҡушып теккәндәр. Әйткәндәй, хәситә көньяҡ диалекттың айырым һөйләштәрендә һәм төньяҡ-көнбайыш диалектта ике мәғәнәне белдерә. Беренсеһе - "доғалыҡ", икенсе мәғәнәһе - "бетеү". Хәситә Татарстан яғында таралған, китаптарына ла һуңғы ваҡытта ҡортбашты күпләп ҡуллана башланылар. Учалы районында табылған боронғо яғаларҙың береһендә лә ҡортбаш юҡ. Силәбе, Ҡурған яғаларында, һапманың бер тирәһендә генә осрай ҡайны берҙә. Ҡортбаштың урыны - ҡашмауҙың олонода (ҡойрого). Легенда буйынса, кешеләр араһында күҙҙәрендә уҡтар булғандары бар. Шул кешенең ҡарашы төшһә, уҡтары һиңә ҡаҙала ла, ауыйыйһың, тигәндәр. Мәжүсилек осоронда башҡорттар күҙҙән һаҡланыу өсөн ҡыу баш һөйәген аҙбар тирәһенә элеп ҡуйыр булған. Әммә ул ҙур, үҙең әйтәләр. Ә ул беҙҙә шул тиклем ныҡ таралған, юл ыңғайы ғына 1-2 кеше алып ҡайта алмай ул тиклем күләмдә. Быны өсөн сауҙа эше яйға һалыныр-ға тейеш.

Урал арьяғы тураһында һүҙ алып барһаҡ, яҙмаларға ҡарағанда, Троицкиҙа ҙур йәрминкә булған. Унда Көнсығыш илдәренән, Һиндостандан да килеп еткән әйберҙәр булған. Ошо мәрйендең таралыуының бер юлы булған. Көмөш ҡатын-ҡыҙ металы тип иҫәпләнә, ул шулай уҡ Ай есеме менән бәйле. Им-томда көмөш тәңкә күпләп ҡулланыла, унын менән баланың ҡашын да һыҙалар һ.б. Туй йолаһында "Карта ашы"нда еңгәләр тәңкәләрҙе ҡарынға, йылҡы итенең ҡартаһына ҡушып, ҡалаҡҡа һалып бирәләр. Был ҡыҙға әсәлек бәхете теләү менән бәйле. Ана шул туй йолаһында ҡулланылыуы һөҙөмтәһендә лә был биҙәүестәр бөгөнгә тиклем һаҡланған да. Һаҡланыу сараһы итеп ҡараһаҡ, биҙәнеү әйберҙәрен ҡыҙ балалар ҙа таҡҡан. Бер рус яҙыусыһы башҡорт ғаиләһенә килә һәм 6 йәшлек ҡыҙҙың биҙәүесен һүрәтләй. Иң кәрәкле мәғлүмәт - әсәһенекенә оҡшатып эшләнгән, тиелә. Быны раҫлаусы фотолар ҙа бар.

Шуға ла биҙәнеү әйбере ул халыҡтың йәшәйеше, донъяға ҡарашы менән бәйле һәм һаҡлаусы элементтарҙы бер урынға йыйған уникаль бер күренеш. Ул үҙенә күрә китап, уҡый белергә генә кәрәк. Милләттең, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының бер ҡаҙанышы. Башҡа милләт вәкилдәре өйрәнеп, һоҡланыуын белдерә. Тәңкәләр тарихын өйСелтәр - боронғо биҙәнеү әйберҙәренең береһе. Атамаһына ҡарағанда, төп баҫым унын мәрйендән яһалған селтәренә төшә, ул биҙәнеү әйберенең 50 процентын алып тора. Мәрйендәр ромб формаһында тегелә, күп халыҡтарҙа ул ҡатын-ҡыҙ башланғысы, Ер әсәһе тигән төшөнсә менән бәйле. Яға тигәндә тағыу ысулына иғтибар итәбеҙ.

Хәҙер был биҙәүестәрҙе тиҙ генә эшләргә тырышып, әҙер туҡымалар менән эш итәләр. Тик реконструкция тип һөйләйбеҙ икән, унын формаһы, төҙөлөшөнән тыш, материалын да боронғоға оҡшатырға тейешбеҙ. Бында "реплика" тигән терминды ҡулланыу кәрәк, сөнки бөгөн реконструкцияны эшләгән кеше юҡ, тип уйлайым. "Реплика" иһә боронғого оҡшатып, хәҙерге заман материалдары менән эшләү. Ә боронғо яғаларҙың 95 проценты тиерлек өй шарттарында яһалған туланан тора. Уларҙың һырт яғы тышланмаған, әйләндерел ҡараһаҡ, барыһы ла күренеп тора. Ни өсөн тышламағандар һуң? Сөнки көндәлек тормошта нимәгәләр эләгеп, һүтелеп, тәңкәһе төшөп китеүе бар. Уны кире тегеп ҡуйырға кәрәк. Әгәр һырты тышланған булһа, уны һүтергә тура киләсәк. Быңа был тормош ысынбарлығы, практик йәһәттән уңайлы булған өсөн тышланмаған да. Ә тула ул башта станокта һуғыла, унан кейеҙ һымаҡ баҫыла һәм ике ысул ҡушылыуҙан тығыҙ туҡыма барлыҡҡа килә. Тәңкәләрҙең ауырлығы бар. Йоҡа туҡымаға баҫһаң, ҡыбырлаған һайын тәңкәләр ҡыйшая, уларҙың ауырлығы баҫа ла, формаһы юғала. Тула нигеҙ ҡалын булғас, трепеция формаһында эшләнгән икән, шул формала тора. Өйҙәң нигеҙе ныҡ булған кеүек, биҙәнеү әйберҙәренең дә нигеҙе ныҡ булырға тейеш. Ошо нигеҙ туланың өсҡө өлөшөн ҡыҙыл туҡыма менән ташлағандар. Яғаларҙа ситтәрен ҡара туҡыма менән ҡайып сығыу күҙәтелә, селтәрҙә был юҡ. Мәрйендә һырында ебенең төҫөн тура килтергәндәр, ҡыҙыл еп булмаһа, буяғандар. Көмөш тәңкәне теккән саҡта аҡ еп ҡулланылған. Мәрйендәрҙе бер епкә теҙгәндәр ҙә, аҙаҡтан ошо нигеҙ ебендәге һәр бер мәрйенде нығытып, ҡыялатып тегеп сыҡҡандар. Хәҙерге тәңкәләр менән эшләнһә лә, бер нисә урынға көмөш тағып ебәреү уны тағы ла әһәмиәтлерәк итәсәк.

Китапҡа ингән 43 яға араһында ҡусерманәр юҡ, улар бер-береһен ҡабатламай. Нигеҙе оҡшаған, технологияһы оҡшаған, әммә һәр эшләгән кеше ниндәйҙер үҙенсәлек өҫтәгән, шуға ла улар уникаль. Нигеҙҙә биҙәүестәрҙең иң көслө, иң күркәле ерҙәрен һаҡлағандар. Шуға ла был эшкә аңлы рәүештә, бик һаҡсыл тотонорға кәрәк.



**АЗАТ ҒАРИПОВ:**

*Беҙ биҙәнеү әйберҙәренең тарихын белеп бөтмәйбеҙ. Шуны күҙәтеп йөрөйөм, ысынлап та, беҙҙә бер генә биҙәнеү әйберен күҙ уңында тоталар ҙа, уны селтәр тип тә, һаҡал тип тә, яға тип тә атайҙар. Әгәр ҙә шулай дауам итһәк, башҡорт ҡатын-ҡыҙының бер генә биҙәнеү әйбере бар кеүек килеп сыға.*

# БУЛМАҒАН...

## милләт вәкиле беҙ

ингән, музейҙарында, фотоларҙа ла бар. Һәр хәлдә, ул ошо төбәктә ныҡ таралған.

Ошо төр биҙәүестәр тураһында һүҙ алып барғанда, "бутимар" тип аталғанын да телгә алырға кәрәк. Уны Илдар Ғатауллин тергеҙҙе. Ул балыҡ тәңкәһе һымаҡ ваҡ тәңкәләрҙән һырып эшләнгән, эсендә доғалыҡ һала торған урындары ла булған, тип иҫәпләнә. Паллас, XVIII быуаттың башҡа тикшеренеүселәре һүрәттәрендә башҡорт-ҡатын ҡыҙы тап ошо биҙәүесте тағып алғанлығы күренә. Былай булһа, унын тарихы тағы ла боронғораҡ осорға барып тоташа.

▸ **Ғалим буларак, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, был биҙәүестәрҙең йәшәйештәге төп функцияһы нимәлә булған?**

- Беҙ биҙәүестәрҙе бөгөн байрам кейеменең элементы тип кенә ҡабул итәбеҙ. Петр Паллас, ни тиклем генә ҡыйын булмаһын, башҡорт ҡатын-ҡыҙы биҙәнеү әйберен көнө буйы таға, шунһыҙ кеше араһына сыҡмайҙар, тип яҙа. Әгәр ҙә ошоно нигеҙ итеп алһаҡ, бында матурлыҡ тураһында һүҙ бармай. Бөгөн һәр беребеҙ белемле, күп һорауҙарға яуап бирә алабыҙ. Боронғо заманды күҙ алдына килтерегеҙ, тәбиғәт балаһына уны уратып алған донъя төрлө һынауҙар әҙерләгән, төрлө йәндәргә ышанғандар, уларҙан һаҡланыу сараһын күргәндәр. Әйтәйек, мәрүәтте ҡырғандар ҙа, тире сирҙәренә һипкәндәр. Көмөш тә, аҡыҡ та ошолай уҡ даулау сифатына эйә. Биҙәүестәрҙең ошо материалдарҙан тороуы унын функцияһына ла ишара яһай - ул ҡатын-ҡыҙҙы һаҡлаусы булған.

менән алып йөрөп булмай. Ҡортбашты ҡыу баш һөйәгенә оҡшатып, кешенең насар күҙенән һаҡланыу сараһы итеп, балаларҙың кейеменә, баш кейемдәренә тегә башлағандар.

Тағы ла. Был биҙәүестәрҙе кемдер яугир ҡатын-ҡыҙҙар кейеме тип аңлата. Әгәр ошо күҙлектән сығып ҡараһаҡ, мәҫәлән, селтәр һаҡлау функцияһын үтәмәй. Йәки биҙәүестәр ҡатын-ҡыҙҙың кассаһы булған, тиҙәр. Боронғо яҙмаларҙа осрай ул, баҙарҙа ире менән ҡатыны ниндәйҙер әйбергә тап булалар ҙа, һатып алырға хәл итәләр. Шыбырлаштылар ҙа, ҡатындың биҙәүесенән бер тәңкәне ҡырҡып алдылар, тиелә унда. Быларҙа, бәлки, дөрөҫлөк барҙыр, тик улар тураһында күп һөйләп, биҙәүестәрҙең мәғәнәһен ошоға ғына ҡайтарып ҡалдырыуыбыҙ бар. Әммә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының түшкә тағыла торған биҙәнеү әйберҙәренең мәғәнәһе күпкә тәрәнерәк.

▸ **Уралдың аҫты-өҫтө ҡиммәтле ташҡа бай, ошондай ерҙә йәшәгән халыҡ ни өсөн һаҡал, яғаларҙы улар менән биҙәмәне икән?**

- Байлыҡты, матурлыҡты күрһәтеүҙе маҡсат итһәләр, был биҙәнеү әйберҙәрендә нимә генә булмаҫ ине икән? Тимәк, таштың, металдың көсө төп урынға ҡуйылған. Донъя кимәлен алып ҡараһаҡ, аҡыҡ, мәрйендәр башҡа халыҡтарҙа ла һаҡлау сараһы булып тора. Мәҫәлән, мәрүәт заманы өсөн бик ҡиммәтле булған, ул диңгеҙҙән килгән. Унан түңәрәктәр ҡырҡып, тишеп, биҙәүескә тағып ҡуйылған. Сихри көскә эйә тип иҫәпләнгән мәрйен дә беҙҙең яҡта булған нәмә түгел. Ул Урта диңгеҙ, Ҡыҙыл диңгеҙҙән килгән. Юл ыңғайына алып ҡайтҡандар, тип тәрәнгән И. Спасский тигән ғалим Эрмитажда һаҡланған боронғо һаҡалды миҫал итеп килтереп, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары аҡсаны сәнғәт өлгөһөнә әйләндергән, тип яҙа. "Уйлап ҡараһаң, байлыҡты йәшерергә кәрәк, ә улар, киреһенсә, барыһына ла күрһәтеп йөрөйҙәр", - ти. Эрмитаждағы был һаҡал көмөш аҡсалар, малахит, гранит, башҡа материалдар менән биҙәлгән.

▸ **Бөгөн биҙәнеү әйберен эшләүселәр күбәйҙе. Оҫталарға айырыуса нимәгә иғтибар итергә кәңәш итер инегеҙ?**

- Бөгөн биҙәнеү әйберҙәрен эшләүҙә тәртип юҡ. Ошо юлдан киткән, боронғо биҙәнеү әйберҙәрен тергеҙеү урынына яңыһын уйлап сығарыуға күсәсәкбеҙ. Уйлап сығарылған тарих башланасаҡ. Шуға ла ҡулға энә, еп алырҙан алда ул ни өсөн эшләнгән, нисек эшләнгән тип уйларға кәрәк. Тәү ҡарашҡа енел тойолһа ла, биҙәүестең төҙөлөшө ҡатмарлы ғына. Муйынға тағыу өсөн ҡулайлаштырып тегелгән элемент халыҡ телендә "һапма" тиеп йөрөтөлә. "Иҙеү" тигәне лә бар. Өҫтән аҫҡа табан төшһәк, айырыуса селтәрҙә тәңкәләрҙән өс вертикаль бағана төшә. Ғәҙәттә, тәңкәләр бөләкәйҙән башланып, өлкәнәйә бара. Шул бүленеште "бүлмә" тип атайҙар. Билдән быуыу өсөн таҫманы "билдек" тиҙәр. Горизонталь рәттәр "ҡор" тип атала. Оолар, селтәрҙәге ҡорҙар һаны 4-тән ашырға тейеш түгел, ти. Яғаларҙа ҡорҙоң һаны артып китә. Биҙәүестең иң аҫтында "тояҡ", ҡайһылыр төбәктәрҙә "төйәк". Әгәр ҙә ошондай атамалар һаҡланып ҡалған икән, был биҙәүесте эшләүҙә система барлығын күрһәтә. Кем нисек теләй, шулай эшләгән булһа, бер ниндәй атамаһы ла булмаҫ ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт ҡатын-ҡыҙының биҙәүес әйберҙәрен өйрәнеү эшендә был китап башланғыс ҡына. Этнографик хеҙмәттәрҙәге ҡыҫҡа ғына һүрәтләмәләрҙән тыш, беҙгә хәҙер ошондай китап-каталогтар өҫтөндә эшләргә кәрәк, сөнки халыҡта булған өлгөләрҙән генә аныҡ фәнни һығымта яһап буласаҡ. Азат Салауат улының һәр биҙәүес төрөн ентекләп аңлатыуынан күптәр үҙҙәре өсөн кәрәкле мәғлүмәтте алғандыр, тип ышанайыҡ. Мин дөрөҫ эшләйем, һин юҡ, тигән бәхәстәрҙән дә арынайыҡ. Әңгәмәсебеҙ әйтмешләй, халҡыбыҙҙың донъяға ҡарашын күрһәтеүсе ошо уникаль "китап"ты уҡырға өйрәнәйек һәм бер нәмәне иҫтә тотайыҡсы: беҙ донъяла тиңе булмаған сәнғәт өлгөләре тыуҙырыуға өлгәшкән юғары зауыҡлы милләт вәкиле. Ошо мираҫыбыҙға һаҡсыл булайыҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

*✓ Аҙ ғына эштән туҡтаһа, йылға кисеп, аръяҡҡа сыға ла, анауы тау зыңҡына менеп йырлап ебәрә! Ҡаялар шаңғырап китә. Гөрләп ауыл төҙөлгән, эштең асылған мәле, кешенең уйын-көлкөгә ваҡыты юҡ.*






Оло яҡтың иҙәненә буйлы баластар һалынды. Өҫтәренә, уртала буш урын ҡалдырылып, йәйғор төҫтәре балҡыҡан ҡорама түшәктәр түшәлде. Буйҙан-буйға күҙле таҫтамалдан тегелгән оло ашъяулыҡ һуҙып, ситенә ағас ҡалаҡтар, баҙыян сеүәтәләр ҡуйылды. Түргә ирҙәр урынлашып бөтөүгә, йорт хужаһы, йөҙө ялтырап торған һөйәк һаплы бысағын түш кеҫәһенән килтереп сығарған беләүенә ышҡып, сигеүле таҫтамалға һөртөп алды, йәш ҡомалаҡ сүпрәһе еҫе аңҡып торған йоморо икмәкте түшенә терәп телгеләп, табын уртаһына ҡуйҙы. Уғаса, ҡатыны индергән оло ҡоштабаҡтағы шәлкем иттәрҙе усы яҫылыҡ ҡына ыҡсым таҡтаға һалып турап, өлөшләп тарата башланы. Ҡунаҡтар үҙ эшен белеп башҡарған таһыллы хужаға һоҡланып, бер килке өнһөҙ ултыра бирҙеләр. Әҙәп һаҡлап, ирҙәр менән үҙҙәренең араһында тағы өс-дүрт кешелек урын ҡалдырып, ишек яғынан ҡатын-ҡыҙҙар теҙелде.

Фольклорсы ҡәйнеше килеүен ошолай ҙурлай белә еҙнәһе. Ғаиләм ҙур тип тормай, тыу һарығын һуйып, ҡунаҡ итә. Форсаты сыҡҡанда, йылына берҙе булһа ла, үҙ телдәрендә һөйләшеп, ҡурай моңон тыңлап, ирәйеп ултырып алалар.

Йылҡылдап торған ҡоротло һурпа сеүәтәләре бушауға, аяҡ сәнсеп ултырған ғалим янындағы ҡарттың терһәге аҫтындағы мендәрен ҡабарта биреп ҡуйҙы.

- Теге ҡурай ни хәлдә әле, Ғәйфулла ағай?

- Ул ней, ҡағылһаң, моңлана, ҡағылмаһаң, тәҙрә башында саңлана. Етеятың да булмаған был урыҫ ауылында минең ҡурай кемгә хәжәт? Килеп-киткәнеңдә һиңә уйнайым инде.

- Улай тимәсе, ағай. Эсе тулы хазина ла, моң-һағыш бит ул. Ҡандай ерҙән урап ҡайтҡан ҡомартҡы! Урыҫ менән башҡорт иңгә-иң терәп һуғышып, еңеү менән Париж урамынан үткәндә уйналғандыр. Ә һин уларҙы бүлгеләйһең. Иждиһат итеп, шул хаҡта яҙып алайым тип килдем әле был юлы. - Мөхәммәт изем һалып ҡуйҙы.

- Уның нимәһен яҙаһың? Димит зауытына бәйле ҡурай бит ул.

- Яндырылған ҡорос иретеү заводы тураһында әйтеүеңдер. Ай-һай! Ҡотҡор буйындағыһы ҡоролоп бөтөп, хотҡа китеп өлгөрмәй - Бүгәс ихтилалыныҡылар үрт һала. Француз яуы була тип, ярты быуат алдан ҡурай яһатып алмағандарҙыр? - тип көләмһөрәп ҡуйҙы Мөхәммәт.

- Һеүү, шул китапҡа ышаныуың! Кем француз яуына ҡурай әҙерләгән тиһең? - тип үҙенекен тылҡый бирҙе Ғәйфулла. - Ана шул зауыт үртәлгәндән һуң ятып ҡалған нәҙек торбанан ҡырҡып яһалған бит ул.

- Китапты уны тарихсылар яҙа. Ошондай ҡомартҡыларҙы һинең кеүек һирәк осрар аҫылташтар һаҡлай. Бер түгел, ике яуҙан урап ҡайтҡан тимер ҡурай бит ул!

Күңеленә май булып яғылды ғалимдың әйткәне. Бынауса ғәм уларҙың хәбәренә ҡолаҡ һалып ултырғанда күтәрмәләп ебәрһендәр әле һине! Ҡурайсының күҙҙәрендә осҡон баҙлап ҡуйҙы. Башҡалар күрмәһен тинеме, түмәр ултырғыс өҫтөндәге шәмдең филтәһен ҡыҫа һалды.

- Ҡурай нимә ул, Мөхәммәт ҡустым? Боронғо һуғыш ҡоралын күргәнең бармы һинең?

Табындағылар бер-береһенә ҡарашып алды.

- Һыҙмаңды әйтәһеңме, ҡайнаға? - тип һораны йорт хужаһы.

Тирә-яҡтан эшселәр поселогына күсеп килеп, донъя ҡора башлағандарҙың яҡын туғандары юҡ бында. Бер-береһенә "ағай", "еҙнә"нән һалдырған булып, ҡатнашып йәшәп ятыуҙары.

- Һәй! Таптың сағыштырыу! - Серле йылмайып, Ғәйфулла Мөхәммәткә төртөп алды.- Иртән килеп күрерһең.

"Мине ҡорал ҡыҙыҡһындырмай бит әле", - тимәксе ине лә фольклорсы, өндәшмәне.

Башына сөйөп ябынған кизе яулығының остарын маңлай тапҡырында бер-береһенә ишеп ураған, оҙон еңле күлдәген терһәккәсә һыҙғанған бөтмөр хужабикә еҙ батмусты сылтыратып, сынаяҡтарҙа сәй индерҙе. Йәшерәктәр бауырһаҡ ултыртты, сәй таратышты.

- Их! Бал ғына етмәй шул был табында-а, - тип көрһөнөп ҡуйҙы береһе.

- Ҡуй инде! Шаңғырҙап торған ҡарағай араһында ҡорт үрсемәй, - тип икенсеһе йөпләп ҡуйҙы.

- Күҙеңде йомоп ашаһаң, шәкәрҙән дә бал тәме килә ул,- тигән булып, һүҙҙе мәрәкәгә бороп ебәрҙе хужа. Камауай шәкәрҙе усына һалып, бысаҡтың һырты менән шаҡмаҡлап яра, тулған айҙай табынға йәм биреп ятҡан дәү йәйпәк батмус уртаһына өймәләм итеп һала башланы. Ул шул шөғөлө менән әүрәгән арала ҡурайсы бер шәкәр осмотон өҫкә сөйөп ебәрҙе, мейес башын ышыҡларға арҡыры тартылған ҡыҫҡа шаршау һелкенеп ҡуйҙы - бәләкәс кенә устар үҙ өлөшөн йомоп, эскә тартып та алды. "Олатай" тип өҙөлөп торған (ҡайҙан ғына туған булһын инде!) ҡарасмандың керпеген дә ҡаҡмай мейес башынан үҙен күҙләп ятҡанын һатып тормаҫ инде. Бер сынаяҡты бушатҡас, былай ҙа ҡупым ғына "кейәү"енә йүкә шына ҡатып ебәрҙе:

- Былар теге Мәғниттән килгән сын-сынаяҡтармы?

- Әтеүсә. Ҡыҙҙар күп миндә, тинем дә, городҡаса үгеҙ егеп барҙым. Знакумда һуйып, баҙарҙа һатып, аҡсаһына нескә билле ҡытай сынаяғы менән һәр береһенә мөгөҙ тараҡтар алдым да ҡайттым.

"Ҡалай мөгөҙ ҙә, һөйәккә бәйле әле бөгөн бөтә һөйләнгән хәбәребеҙ", тип уйлап ҡуйҙы Мөхәммәт.

- Әллә берҙе һыҙҙырып ебәрәһеңме, ҡайнаға? - Был йортта теҙген кем ҡулында икәнен белеп торһон барыһы ла - еҙнәһе ҡысҡырып әйтә ҡуйҙы.

Ғәйфулла бабай, түбәтәйен соңҡаһына ышырып, тирен һөртөп алды. Ҡарашын өҫкә сөйөп, уң ҡашын һикертте - түрбашта был ым-ишараны аңлаған берәүҙең мейес башынан доңҡолдата урындыҡҡа һикереп төшкән тауышы ишетелде. Сынаяғын түңкәреп тә өлгөрмәгәндер, муйыл күҙле, дегет сәсле 7-8 йәштәрҙәге малай ҡурайсыға тимер ҡурай килтереп тә тотторҙо. "Ҡурай тураһында яҙам тип, Өфөнән килһендәр әле! Дәрәжәң оло икән, һиңә әйтәйем", - тип уйлап алды. Ҡурайҙың осонан тотоп, торна сыңрауына оҡшаш өн сығарып алды. Терһәктәрен "олатаһының" тубығына терәп, мөғжизә көткән малайға секерәйтә ҡарап алды. Уныһы был ишараны ла аңланы: йомошто еренә еткереп үтәмәгән икән - ҡытыршыланып көсөкләгән ҡулдары менән ҡурайҙағы май таптарын һөлгөгә ышҡып ҡуйҙы (Бер ҙә саңланып ятҡанға оҡшамаған: майлап, ҡәҙерләп кенә тотоуылыр).

Ҡурайсы тороп баҫты. Ултырғанда ҡураныс күренгән кәүҙәһе күҙ алдында үҫеп киткәндәй тойолдо. Яуырындары турайҙы, танһыҡ ризыҡ ауыҙ иткәндәй, күҙҙәрен йомоп, ҡурайын ирендәренә терәп тора бирҙе лә ғыжлатып уйнап ебәрҙе. Тәүге аккордарҙан уҡ тәҙрә быялалары сыңлап китте. Ирҙәр стена буйына теҙелеп баҫты. Хужабикә табындың уларға ҡаршы яҡтағы осон ҡайырып һалды. Ҡатындар оло яҡтың ишек төбөнә һырыҡтырып яһалған ағас карауат ситенә терәлде.

Күңелдәрҙе аҡтарыр моң ағылды. Күҙ алдында берсә Мәсем тауҙарының сал бөркөтө саңҡылданы, берсә ҡылғанлы дала буйлап елгән аттар кешнәүе ишетелде. Дауылда сайҡалған ҡарурман шаулауы, йәй башының ыуыҙ болононда ҡыңғырау сәскәне иркәләгән еләҫ ел иҫеүе тойолғандай, көҙгө шымшыҡтың эре тамсылары төшкәндәй булды. Бер мәлгә ҡурайсының йөҙө ҡырыҫ төҫ алды, күк күкрәүенә оҡшаш ауаздар яңғыраны. Ғалимдың арҡалары сымырлап китте. Унан, ҡурай осонан, һыҡтауға оҡшаш моң һарҡты. Вербовкаланып килеп, ҡырыҫ Урал төбәген төйәк итеп йәшәргә мәжбүр булған эшсе ғаиләләре, үҙәктәре өҙөлөрҙәй булып сарсаған күңелдәрен моңға һуғарҙы. Ана өҙөләм, бына өҙөләм тигәндәй, иң юғары нотала көй туҡтаны.

- Ниндәй моң булды был, ағай? - Бер талай әҫәрләнеп тора биргәс, айнып киткәндәй булды Мөхәммәт: химик ҡәләменең осон төкөрөкләп, тубығындағы ҡағыҙға яҙырға әҙерләнде.

- "Уғатар көйө".

Күҙҙәре сипылдай башлағанын аңғарып, ҡарашын ситкә борҙо ҡурайсы. Мөхәммәттең блокноты түш кеҫәһенә инеп ятты. Тынлыҡты боҙорға берәү ҙә баҙманы. Бер аҙҙан һалмаҡ бейеү көйө китте. Бер тына уйнап алғас, Ғәйфулла "һеңлеһе" яғына боролдо:

- Һинең көй! Бер аҙ иҙән тапап ал.

Уныһы иренә күҙ һирпеп алды. Тегеһе, оло тамаша ҡарарға әҙерләнгәндәй, хуплап, ҡулдарын тубығына шапылдатып алды. Ҡатыны төрөлгән еңдәрен төшөрҙө, уңайһыҙланып, итәк остарын тарҡылана. Башын саҡ ҡына ҡырынайтып һалып, туҡмас йәйергә әҙерләнгәндәй, ҡулдарын килешле бөгөп, көй ыңғайына талғын ғына бейеп китте.

* * *

Йоҡлай алманы Мөхәммәт. Уҙған йылда һуғылғанында Ғәйфулланан Нөгөш буйында йәшәгән ороло ҡурайсы тураһында яҙып алғайны. Быйыл тимер ҡурайҙың тарихын асыҡлап ҡуйырға ниәтләп килде. Йыл буйына ошо уйы күңелен елкендереп тик торҙо. Ҡурайсы ипкә килерҙәй түгел һымаҡ. Күңеле килһә, кем белә, "Уғатар көйө"нөң тарихын һөйләп бирер, һүҙҙәрен әйтеп яҙҙыртыр.

Ошондай уйҙар менән йылға бөгөлөндә урынлашҡан бандаркаға юл алды Мөхәммәт. Сайырсылыҡ участкаһы асылғандан бирле мискә ҡораусы булып эшләүсе Ғәйфулланың ярҙамсылары йыш алышынып тора, ауырлыҡҡа сыҙамайҙар, ахырыһы. Әле лә тәү ҡарамаҡҡа еңелсә күренгән эш менән үҙе булаша.

- Арыумы, ағай!

- Арыу! - Ғәйфулла көлөпкә ярыуын дауам итте. Уның өсөн бөгөнгә иң мөһиме - мискәгә таҡталар әҙерләүҙер, кеше килде тип, ыжлап та бирмәне. Һүҙ ҡушыуҙың әлегә фәтеүәһе юҡ икәнен аңлаған Мөхәммәт бер тигеҙ ярылған таҡталарҙы киптереү цехына ташый башланы, һурыҡҡандарын, юлайҡан, алты урындан тимер ҡоршап, мискә төпләп ултырған егеткә ҡалдырҙы. Уныһының өйрәнеп кенә йөрөүелер - таҡталар араһында бармаҡ һыймалы ярыҡ аҡшайып тора.

- Һурпаһын күр ҙә, итенән төңөл. Мискәгә ҡойған сайыр шаптырлап ағып китер ҙә, түләүгә ҡалырмын, тип уйлай белмәй. Эшләргә уйы бармы бының, юҡмы? - тип башҡортсалап, арыш башлы урыҫ егетенең тетмәһен тетеп алды Ғәйфулла. Кисәге ғәжәйеп нурлы йөҙлө ҡурайсыны күрермен, тимә: уҫал. Талапсан түрәме ни! Шунан: "Елемгә ҡатнаштырырға глицерин килеп еткәс, үҙем аңғартырмын", - тип, ярҙамсыһын ҡайтарып ебәрҙе.

Аулаҡ ҡалалар! Мөхәммәттең эсенә йылы йүгерҙе. Таҡта ҡыртыштары, көлөпкә таптары янып ятҡан ҙур соҡорҙағы торомбаштарҙы ситкәрәк тартты, көл өҫтөнә ҡороған ҡарағай ботағын һындырып һалды, тимер тағанға баҡырса элеп ебәрҙе Ғәйфулла. Кесерткән тоҡтан яһалған таҫтамал алып, эргәләге йылғаға төштөләр, бит-ҡулдарын йыуып алдылар. Сәй эсеп, бер аҙ хәл алғас, теле асылды Ғәйфулланың:

- Һөйләй-һөйләй сәсән булырһың, күрә-күрә күсәм булырһың. Ошо бандарканы Ҡытырыж исемле берәү менән һалдыҡ. Поселок төҙөлә, эш асыла башлаған мәл. Эшсе ҡулы ла, техника ла етешмәй.

- Ҡаҙаҡ инеме әллә? - тип Мөхәммәт бүлдерә ҡуйҙы.

- Юҡ. Башҡорт. Ысын исеме кем булған, ҡайҙан килгән - миңә сер булып ҡалды. Башҡалар менән аралашманы. Асылып, әллә нимә һөйләп утырмаһа ла, мине үҙенә тартты. Ай-һай ҙа көслө ине! Тирләүшний трактор менән ағасты килтереп ауҙарып торалар, икәүләп, бурап барабыҙ, күтәреп барабыҙ. Шыңғырҙап торған ҡарағайҙы "ыһ"та тимәй, бер үҙе ҡалҡытып һала.

Мөхәммәттең ирен ситендә йылмайыу хасил булды:

- Әкиәттән килеп төшкәнме?

Уның был һүҙенә иғтибар итмәне Ғәйфулла, дауам итте:

- Килгәс тә һыйыр һатып алды. Эргәтирәлә күрше ауылдың колхоз ерҙәре - леспромхоз эшселәренә сабын юҡ. Малға үҙебеҙ ҡырҡҡан диләнкәләрҙә ағас араһын соҡоп, бесән әтмәләп алабыҙ. Ул йылға ярындағы күрәнде сабып, ике-өс күбәләгән бер урынға өйә лә, шуны дүрт-биш саҡрым ерҙән яуырынына һалып ташып, аҙна эсендә бер һыйырлыҡ бесәнде кәртә башына өйөп тә ҡуя. Торғаны бер бәһлеүән! Ҡулдары - ошо көрәк ҙурлыҡ, аҙымы - метр булыр. Ул атлар, мин янынан юрғалар инем. "Ҡытырыж"- уның ҡушаматы. "Ҡайҙан күсеп килдең бында?" тиһәләр, "Ҡытырыждан", исемен һораһалар ҙа, шул булды яуабы. Был яҡтарға берәү ҙә ҡоторғандан килеп тормай. Сәбәбе булғандыр. Аҙ ғына эштән туҡтаһа, йылға кисеп, аръяҡҡа сыға ла, анауы тау зыңҡына менеп йырлап ебәрә! Ҡаялар шаңғырап китә. Гөрләп ауыл төҙөлгән, эштең асылған мәле, кешенең уйын-көлкөгә ваҡыты юҡ. Ураны ла бер йырҙы йырланы, минән башҡа көңгөрт тауышын ҡолағына элеүсе лә булмағандыр. Һүҙҙәренә әһәмиәт бирмәгәнмен, ә бына көйө, боролоштары күп булһа ла, баштан күңелгә инде лә ятты. Тағы бер шөғөлө булды: уҡ атырға яратты. Анауы аръяҡтағы ҡарағас бағананы күрәһеңме? Шуны сәп итеп, атыр ҙа йөрөр ине был. Уғы һынып торор, яңыһын эшләп алыр ине. Урыҫтар лучник тип йөрөтә башланылар, минең өсөн ул уғатар булды...

Түш кәҫәһенән сәғәт сығарып, ваҡытты ҡарап алды Ғәйфулла. Шул арала ихата алдына арбаға егелгән пар ат килеп туҡтаны. Бергәләшеп, ун әҙер мискәне тейәп ебәрҙеләр. Хәбәре оҙон булырға оҡшай Ғәйфулланың - көлдә ҡағыштырып, ҡабыҡлы картуф күмеп ҡуйҙы.

- Баяғы әйткәнемсә, сайырсылыҡ эшендә сетерекле яҙмышлылар йә йәшлек ҡыҙыулығы менән килеп ҡапҡандар эшләне. Ҡытырыждың да бер әтнәкәһе булғандыр, кешенең үткәнен тикшерергә йыйынмайым. Ҡайһылай ҙа, һөйләшенән, тарихты яҡшы белеүенән ырыҫлы зат икәнен сырамытып була. Был хикәйәтте мин уның ауыҙынан ишеттем.

**(Дауамы бар).**

✓ *Хәбетдин олатайҙың хәтере хазина тоҡсайы булып сыҡты. Аҡмулла шиғырҙарын, шул иҫәптән атаҡлы "Нәсихәттәр" әҫәрен ул яттан һөйләне, атаҡлы ҡәрҙәшенең тормошона бәйле иҫтәлектәрҙе бәйән итте.*



*ӘҘИП МЕНӘН ӘҢГӘМӘ*

# "ЙӨРӘКТӘГЕ ЯҘМАЛАР" НИ ТУРАҺЫНДА?

**Күренекле шағир, прозаик, публицист һәм ғалим-энциклопедист, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рәшит Шәкүрҙең "Йөрәктәге яҙмалар" тип исемләнгән мемуарҙарын китап көйө ҡулға алғандар һирәктер әле. Сөнки китаптың донъя күреүенә әле йыл да юҡ. Ә танышып өлгөргәндәр уны ҡабат-ҡабат уҡып сығыр һәм ундағы оло яҙмышлы кешеләр, оло ваҡиғалы заманалар һәм оло тарихлы быуатты эстәлекле, мауыҡтырғыс итеп һүрәтләгән авторҙы күҙ алдына килтерер. Беҙ иһә авторҙы күҙ алдына килтереп кенә ҡалмаңыҡ, уның үҙен әңгәмәгә саҡырып алдыҡ һәм был һөйләшеүҙе гәзит уҡыусыларыбыҙға ла тәҡдим итәбеҙ.**

➔ **Рәшит Закир улы, мемуар яҙырға теләү теләге кеше ғүмеренең ниндәй ваҡытында барлыҡҡа килә? Һеҙ, мәҫәлән, был хаҡта ҡасандан уйлай башланығыҙ? Һәм һеҙҙең яҙмаларығыҙ нимәләр тураһында?**

- Яҙмышы бары үҙ шәхесенә генә арналмаған, ә ил, халыҡ, йәмғиәт яҙмышы менән дә ҡуша үрелеп барған һәм фәһем итеп, ғибрәт итеп һөйләрлек хәл-ваҡиғаларға бай булғандар өлөшөләр ул хәтирәләр яҙыу. Шәхсән үҙем мемуар яҙырға тип алдан әҙерләнмәнем. Бары һаҡлаһып, йыйылып барған яҙмаларым папкаһы артыҡ ҡалынайып киткәс, уны китап итеп әҙерләү теләге уянды. Бында минең үҙем һәм минең кисерештәрем генә түгел, бында минең күҙлектән ҡаралған донъя, минең ҡараш аша баһаланған шәхестәр, замандаштарым, ил тарихы.

➔ **Һеҙ һуғыш йылдарындағы тыл тормошон үҙ елкәгеҙҙә татыған кеше. Унан һуғыштан һуңғы ауырлыҡ... Шул михнәтле заман һеҙҙең дә бала сағығыҙҙы урланымы?**

- Мин ҙур ғаиләлә тыуғыҙынсы бала булып донъяға килгәнмен, етебеҙ иҫән ҡалған. Дүрт йәшлек сағымда һуғыш башланып, өлкән өс ағайым бер-бер артлы яуға, инде олоғайған атайым хеҙмәт армияһына алып кителә. Инәйем беҙҙе нисек кенә аҫырап, киткән улдарын ниндәй генә борсолоуҙар аша көткәндәр - уныһы минә, бәләкәй балаға, ҡараңғы. Шулай ҙа һуғышҡа тиклемге бер бәхетле һәм рәхәт мәлде хәтерләйем. Инәйемә ашлыҡ һуғыусылар өсөн бутҡа бешерергә ҡушылды. Ул арышты көйөнтәлән алып ҡайтып, елгәреп, таҙартып, ҡул тирмәнендә тартып, ҡаҙан тултырып бутҡа бешерҙе лә, шулай уҡ көйөнтәләп алып ашты эшселәргә алып китте. Минә: "Әйҙә, балам, барыһы менән бергә ашарһың", - тине. Мин уның итәгенә тотоноп, эҫелә яныпбешеп, ялан аяҡ көйө тағылып барам. Бутҡаның еҫе танауымды ҡытыҡлай һәм минең сабырлығым һына ла, биҙрә ситенә бер генә бармағымды тейҙереп, һыпырып алып ауыҙыма ҡабам. Шулайтып, барып еткәнсе яланып барып туям. Барғас, бутҡа һалып бирәм, тиһә лә инәйем, баш сайҡайым. Минең ни ҡыланып барыуым уның күҙ ситенә салынмай ҡалмаған, әлбиттә. Ҡалайтһа ла эйәреп барһын, мыжымаһын, тигәндер. Аҙаҡ, күп йылдарҙан һуң да, ошо хаҡта һөйләшеп көлөшәр инек.

Бала сағым үтә нык тыҙып бөткән ауыл өйөндә үтте. Атайым эшкә шәп кеше булһа ла, яңы йорт күтәрә алманы. Утыҙынсы йылдарҙа ҙур итеп буралап күтәргән дә, ике өйләләрҙе кулакка һанаясаҡтар тигәс, бураһын һатып ебәрергә мәжбүр булған. Иҫке өйҙә ашау-эсеүгә, кейемгә генә түгел, йылыға ла туйып булмай торғайны. Шулай ҙа ана шул һыуыҡ өйҙә шау-гөр килешеп һуғыш ваҡытын, унан һуңғы михнәтле заманаларҙы үткәрҙек. Иҫке булһа ла өйөбөҙ ҡотло, күңелдәребеҙ бөтөн, яҙмыштарыбыҙ яҡты булды. Аллаға шөкөр, атайыбыҙ ҙа, өс ағайым да именһау әйләнеп ҡайттылар. Был үҙе уҡ бер мөғжизә һәм оло бәхет ине.

➔ **Һеҙҙәге шағирлыҡ, ижадҡа һөйөү һәм ғилемгә ынтылыш ҡемдән?**

- Ғаиләбеҙҙә мин бер үҙем шулай шаҡымлы булдым. Атайым эшкә егелгән крәҫтиән ине. Инәйем указлы мулла ҡыҙы, бик зирәк, зиһенле, үтә иҫле булды үҙе. Уҡыу эләкһә, әллә ниҙәргә өлгәшә алыр ине, тип уйлайым.

Белемгә ынтылыу шулай ҙа ғаиләбеҙҙә бер айырым һыҙат булып килгәндер ул. Дүртенсе кластан һуң өлкән ағайымды атайым Өфөгә уҡырға алып бара. Ундағы мәктәптә, бишенсе класҡа ҡабул итеү бөттө, тип әйтеүҙәре була, ағайым: "Улайһа, алтынсыға алығыҙ!" - тип һөрәнләп ебәрә. Ҡөләләр. Ҡөлһәләр ҙә белемен һынап ҡарайҙар һәм осҡорлоғона хайран ҡалып, алып ҡалалар. Был ағайым һәм башҡа туғандарым хаҡында ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәрем китапта бар - уҡырһығыҙ.

Ике өлкән ағайым белемле хәрбиҙәр булды һәм минең артабанғы белем алыу яҙмышын да улар хәл итте. Мин бәләкәй ҡусты булараҡ, шундай абруйлы ағайҙарымдың һүҙен йыға аламмы инде! Улар мине инженер итергә теләне һәм етенсе кластан һуң документтарымды Октябрьский ҡалаһына нефть техникумына алып барып бирҙе. Русса имтиханды тапшыра алмаҫмын, тигән өмөт менән барғайным, билдәләремә, Мәктәү грамотаһына ҡарап, имтиханһыҙ алдылар ҙа ҡалдылар. Мин, ҡаҡса ғына ауыл малайы, ете ят ҡалала, урыҫ араһында торҙом да ҡалдым. Бында иһә ауылдағы шиғыр яҙыу теләге юҡҡа сыҡты, бөтөнләй икенсе һәм ят мөхиттә башҡөллә уҡыуға сумдым. Шулай ҙа ижад итеү теләге, шул теләгемә ярашлы белем алыу уйы мине бер ваҡытта ла ташламаны һәм мин армия хеҙмәтенән һуң булһа ла БДУ-ға уҡырға индем.

➔ **Рәшит ағай, һеҙ шағирмы, әллә ғалиммы? Уйлап ҡараһаң, ғалим менән шағир араһында айырма ҙур бит? Был ике өлкәнең ҡайһыһына күберәк иғтибар бүлдегеҙ һәм үҙегеҙгә ҡайһыныһы яҡыныраҡ булды?**

- Ҡайһыныһы яҡыныраҡ булды икән? Һәр хәлдә, икеһенә лә етди ҡараным. Ғөмүмән, мин башҡарған бөтә хеҙмәттәремә лә, өлкәләремә лә етди, хатта үтә етди ҡараным һәм бирелеп, онотолоп эшләнем. Улай уҡ булырға кәрәкмәй, тип кәңәш итер инем бөгөн ҡайһыларға. Әммә, шулай булмаһаң, ул эштең сифаты ла булмаҫ ине, тип уйлайым.

1961 йылдан алып 2011 йылға тиклем ярты быуат буйына ғилми экспедицияларҙа, командировкала үткән юлдарымдың осо-ҡырыйы юҡтыр. Ижадым һәм ғилми эшмәкәрлегем күп яҡлы булғанлыҡтан, материал йыйыу буйынса эштәремде лә, ғәҙәттә, күп ҡырлы, комплекслы планда алып барырға тырыштым. Был йәһәттән мин үҙемде ниндәйҙер кимәлдә ил өйрәнеүсе тип атай ала торғанмындыр. Минә шуның телгә, тарихҡа, топонимикаға, әҙәбиәткә, фольклорға ҡараған йүнәлештәре буйынса эш алып барыу мөмкинлеге тейҙе. Шулай ҙа, ниндәй генә етди ғилми хеҙмәттәр өҫтөндә эшләһәм дә, шағирлыҡ шауҡымынан ҡотола алманым. Ваҡыты-ваҡыты менән шиғриәт быуаһына сума һәм унда ла шулай уҡ бирелеп, илһамланып ижад итә инем.

➔ **Аҡмулланы халыҡҡа ҡайтарыусы ла һеҙ бит әле...**

- 60-сы йылдар башында башҡорт әҙәбиәт һәм тел белеме, Башҡортостан тарихын өйрәнеү өлкәһендә ҡасандыр беҙгә көсләп тағылған яңы концепцияларҙан ҡотолоу бурысы көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһенә әйләнгәйне. Мин дә үҙемде ғилем һәм ижад өлкәһендә яңылыҡҡа ынтылыусылар сафындамын тип тоя инем. 1965 йылдың 15 апрелендә университет студенттарының VIII ғилми конференцияһында "Аҡмулланың донъяға ҡарашы" тигән доклад менән сығыш яһаным. Докладым өҫтөндә артабан да эшләнем һәм Аҡмулла темаһына диплом яҡланым. Унан был теманы үҫтерә төшөп, "Шиғриәт йондоҙо. Башҡорт мәғрифәтсе-шағиры Мифтахетдин Аҡмулла" тигән китабымда файҙаландым.

1964 йылда Аҡмулланың тормошон һәм ижадын өйрәнеү йәһәтенән ғәйәт әһәмиәтле бер табышҡа юлыҡтым. Әлшәй районының Аксен урта мәктәбендә практика үтә инем. Шул ваҡытта Миәкә районының Туҡһанбай ауылынан шағирҙың яҡын ғына туғаны, арҙаҡлы ил ағаһы Хәбетдин Бәҙретдинов олатай менән осрашыу бәхете тейҙе. Хәбетдин олатайҙың хәтере хазина тоҡсайы булып сыҡты. Аҡмулла шиғырҙарын, шул иҫәптән атаҡлы "Нәсихәттәр" әҫәрен ул яттан һөйләне, атаҡлы ҡәрҙәшенең тормошона бәйле иҫтәлектәрҙе бәйән итте. Түкмәй-сәсмәй яҙып алып ултырҙым. Артабан арҙаҡлы тарихсы Әнүәр Әсфәндийәров ярҙамы менән архив документтары буйынса мәғлүмәттәр таптым. Был яҙмалар буйынса беҙ Аҡмулланың биографияһына ҡарата бик күп аҡ таптарҙы юйҙыҡ, айырым авторҙарҙың уйҙырмаларына сик ҡуйҙыҡ. Бөтөн йыйылған материалды һәм әҙиптең шәжәрәһен дә индереп, "Шиғриәт йондоҙо" тигән яңы китап әҙерләнде һәм ул биш мең тираж менән баҫылды. Тираждың бер өлөшө Мәскәүгә оҙатылды һәм Союздар йортоноң Колонналы залында өс йөҙҙән артыҡ Башҡортостан делегацияһы ҡатнашлығында Аҡмулланың юбилей кисәһе үткәрелде. Шул кистә генә лә меңдән ашыу китап һатылды. Өфөләгеләре лә тиҙ арала таралып бөттө. Шулай итеп, бөйөк Аҡмуллабыҙҙы күтәрәйем, халыҡҡа ҡайтарайым тип, бихисап эштәр башҡарып, йән атып йөрөй торғас, яҙыусы, әҙәбиәт белгесе булараҡ ул мине күтәреп ебәрҙе.

➔ **Башҡорт ғилми тарихында, башҡорт әҙәбиәте тарихында һәм, ғөмүмән, башҡорт халҡы тарихында һеҙ бер сағыу эҙ, әллә күпме аманаттар ҡалдыра алған кеше. Был юл маҡсатлы рәүештә үтелдеме?**

- Бөтөн был хеҙмәттәр минә Аллаһы Тәғәлә тарафынан һалынған миссия булғандыр. Ул мине халҡыма хеҙмәт итеү өсөн шулай яралтҡан һәм мөмкинлектәр биргәндер. Хатта ғүмер баҫҡыстарының ҡайһылыр өлөшөндә ниндәйҙер ҡаршылыҡтар сығып, икенсе йүнәлештән китергә мәжбүр булғанда ла, ниндәйҙер хыялдар тормошҡа ашмай, уларҙан дөнъягә тура килгәндә лә, барыһы ла ошо торошҡа, ошо халәткә, ошо емештәргә алып килә торған тоғро юл булған, тигән фекергә киләм бөгөн. Һәм бөгөн дә, һикһәндең арьяғына ҡарай ҡолап барғанда ла, көн дә өҫтәл артына ултырырға тырышам. Сәләмәтлек бәкәлгә һуға һуғыуын, әммә фольклор өлкәһендә тупланған материалдарым байтаҡ, шуларҙы халыҡҡа тапшырып өлгөргә киләм...



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аҡыллы кеше менән һөйләшеү үҙе бер ғүмер бит ул. Хатта һөйләшмәй генә йәнәш ултырыу ҙа мәртәбә һымаҡ. Арҙаҡлы ағайыбыҙ менән аралашыуҙан һуң да күңелдә әллә ниндәй бөйөк пландар, юғары идеялар, ең һыҙғанып ижади эшкә керешеү дәрте уянды. Ысынлап та, бындай шәхестәр милләттең бер байлығы, хазинаһы шул инде ул. Ҡыҫҡаһы, әҙиптең "Йөрәктәге яҙмалар" китабын уҡып ҡына ла ошондай уҡ аралашыуға өлгәшә алаһығыҙ.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Түләүле пломба. 2019 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙең бер нисә төбәгендә, шул иҫәптән Башҡортостанда, махсус лампа менән ҡатыра торған (фотополимер) пломба мотлаҡ медицина страховкаһы (ОМС) программаһына индерелде.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҮҘ ХАТАҢДА ӨЙРӘН

■ Медицина хеҙмәткәрҙәре энергетик эсемлектәрҙең хәүефле булыуы тураһында күптән әйтә килә. Беренсенән, был эсемлектәрҙең составында шәкәр күп күләмдә була. Шәкәрҙең тәүлегенә тәҡдим ителгән нормаһы 22 грамм булһа, энергетик эсемлектәрҙә уның күләме 102 грамға етә. Икенсенән, уларҙың составындағы кофеин, таурин, женьшень ҡан баҫымын күтәрә һәм йоҡоһоҙлоҡҡа килтерә. Әммә быны менән генә энергетик эсемлектәрҙең зыяны бөтмәй: уларҙы ҡулланыу тахикардия, тын алыу менән бәйле проблемаларға, эпилептик өйәнәк, аритмия, аллергия, хатта үлемгә килтереүгә ихтимал.

■ Калифорнияның Stroma Medical ойошмаһы докторы 20 минутта күҙҙәрҙең төҫөн үҙгәртеү ысулын уйлап тапҡан. Был технология Lumineyes тигән атама алған. Уның нигеҙендә һоро күҙҙәрҙе зәңгәргә әйләндереүсе лазер ята. Лазерҙың энергияһы күҙҙәрҙең өҫкө төҫлә ҡатламынан һоро пигментты алып ташлай, һөҙөмтәлә, 2-3 аҙна эсендә унда зәңгәр төҫ тула. Процедураның бер кире яғы бар: күҙҙәрҙең элекке төҫөн ҡабат ҡайтарып булмаясаҡ.

■ Стресс һөҙөмтәһендә организмдан бүленеп сыҡҡан химик берләшмәләр мейе туҡымалары өсөн зарарлы. Шуға ла стресс тәьсирендә мейе кибеүе һәм хатта кешенең аҡылына зыян килеүе ихтимал, ти табиптар. Мейе өсөн ҡурҡыныс тыуҙырыусылар исемлегенә яратмаған кеше менән ғаилә ҡороп йәшәү, йәрәхәт алғандан һуң килеп тыуған ситуациялар, шулай уҡ перспективаһыҙ эш тә инә. Тап улар мейе күҙәнәктәрен үлтереүсе кортикостероидтар барлыҡҡа килеүенә килтерә. Кортикостероидтар критик ситуацияларҙа иммун системаһын баҫа һәм ҡан әйләнешендә шәкәр концентрацияһын арттыра. Бигерәк тә кортикостероидтарҙың тәьсиренә мейенең хәтерләүҙәр формалаштырыу менән бәйле өлөшө - гиппокамп тиҙ бирешә.

■ Мичиган университеты ғалимы Джэйсон Моузер кешеләр үҙҙәре яһаған хатаны төрлөсә ҡабул итеүен асыҡлаған. Эксперттар раҫлауынса, үҙенең хатаһында нимәләр өйрәнәм, тип уйлаусы кешеләрҙең аҡыл ҡеүәһе күпкә үҫешкән була, улар яңылышыуҙарҙы һәм хаталарҙы ла еңелерәк ҡабул итә. Тормоштағы һәр осраҡтан ниндәйҙер һабаҡ алырға ынтылыусыусылар, әгәр ҙә ситуация ҡатмарлашып китһә, мин уны мотлаҡ хәл итәсәкмен, әммә бер нәмә лә килеп сыҡмаһа, был проблеманы аңларға тырышасаҡмын, тип уйлай. Ә бына тағы ла аҡыллыраҡ була алыуҙарына ышанмағандар бер ҡасан да үҙҙәренең шәхси тәжрибәһе менән ҡуллана һәм үҙ хатаһында өйрәнә алмаясаҡ.

■ Музыканттарҙың хәтере башҡа кешеләрҙекенә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Юта университеты үткәргән һынауҙарҙа 14 музыкант һәм музыка өлкәһенә бер ҡысылышы ла булмаған 15 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың барыһына ла картиналар йәки һүҙҙәр йыйылмаһы тәҡдим ителгән. Шул уҡ минутта улар әле генә күргән һүрәттәрен йәки һүҙҙәрҙе икенсе өйөмдә ятҡан картиналар араһынан һайлап алырға тейеш булған. Музыканттар ике осраҡта ла эште тиҙерәк башҡарған һәм һирәгерәк яңылышҡан. Музыкант һөнәрен һайлаусыларҙың хәтере ни өсөн ныҡыраҡ үҫешеүен ғалимдар аңлата алмай. Һәр хәлдә, ниндәйҙер музыка ҡоралында уйнау, сәнғәт менән ҡыҙыҡһыныу кешенең аҡыл ҡеүәһен үҫтерә, был тикшеренеүҙәр ошоно дәлилләй.

ЗАМАНА ШАУҠЫМЫ



# ЯҘМЫШТЫ КЕМ БИЛДӘЛӘЙ,

## йондоҙҙармы, әллә үҙебеҙме?

**Япон яҙыусыһы Рю Муракаминың "Дети из камеры хранения" исемле китабын уҡығанда түбәндәге сюжетҡа тап булдым. Таксист йәш кенә бер ҡыҙҙы эшенән алып ҡайтып бара. Урта йәштәге ирҙең төшөнкөлөккә бирелеп йөрөгән ауыр осоро була. Ҡапыл иртән радио аша ишеткән йондоҙнамә иҫенә төшә. Эргәһендәге сибәр ҡыҙға йондоҙҙар уға бөгөн бик мөһим осрашыу һәм яҙмышының көтөлмәгән яҡҡа боролоуын вәғәҙә итеүен һөйләй башлай. Хәҙер үк, ошо урында барыһын да үҙгәртеп, һиңең менән ер сигенә китергә әҙермен, тип, таксист машина ишеген бикләп, ҡайҙалыр йүгерә. Бер аҙҙан ҡурҡыуға ҡалған ҡыҙ янына килеп, ер сигенә китер өсөн дуҫынан аҡса һорауы, уныһы бирмәгәс, тегене үлтереүе хаҡында хәбәр һала. Уны йондоҙҙарға ышаныу шул рәүешле харап итә.**

Тормошта ла ошоға оҡшаш хәлдәр юҡ түгел. Күрше фатирҙа йәшәүсе танышым үҙе гәзит алдырмаһа ла, почта килгән көн беҙгә йүгереп инеп, матбуғат биттәрендә яҙылған йондоҙнамәне балаларса тулҡынланыу менән уҡып сыға. Һәр һөйләмнә түгел, һәр өтөрөнә тиклем ышана. Был иллене үткән ағай бер көндә шулай тип аптыратты: "Йондоҙҙар минә күптән күрергә теләгән танышыңды осратырһың, тип вәғәҙә иткәйне. Кисә ҡапҡа төбөндә көтөп, таң атҡансы ултырҙым, тик берәү ҙә килеп сыҡманы". Беҙҙә институтта уҡытҡан билдәле ғалим да күк есемдәренең кеше яҙмышына йоғонтоһо тураһында бер секундҡа ла онотмай ине. Әгәр йондоҙҙар бөгөнгө көндә ҙур эштәр атҡарыуҙы тыя икән, тимәк, деканат тарафынан билдәләнгән имтихан икенсе уңышлыраҡ көнгә күсерелә ине.

### Йондоҙнамә буйынса йәшәү яҡшымы, әллә насармы?

Астрология менән ҡыҙыҡһыныу бер бөгөн барлыҡҡа килмәгән. Боронғо заманда бөтөн ил башлыҡтары тормошон йондоҙнамәгә ярашлы итеп ҡорған. Мәҫәлән, Екатерина Медичи ниндәйҙер ҡарарға килер алдынан һәр ваҡыт Нострадамус менән кәңәшләшкән. Людовик XYI астрологы уның үлем көнөн 21 ғинуарҙы дөп-дөрөҫ әйтеп биргән. Ләкин король уның һүҙенә ҡолаҡ һалмай һәм тап ошо көндә язаға тарттырыла. Аналитиктар билдәләүенсә, ябай халыҡтың 56 проценты йондоҙнамәгә тулыһынса ышана. Улар бигерәк тә астрологтарға Яңы йыл алдынан йыш мөрәжәғәт итә.

Һорау тыуа: ни өсөн беҙ, алдынғы ҡарашлы кешеләр, йондоҙҙар менән бәйле мистикаға ышанабыҙ һуң? Психологтар күрһәтеүенсә, быға бик күп етди сәбәптәр бар. Халыҡ һуғыш, сәйәси һәм иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ осоронда күпләп сихырсыларға, бағыусыларға, астрологтарға мөрәжәғәт итә. Ә беҙҙең илдә, белеп тораһығыҙ, бөтәһе лә ал да гөл, тип әйтеп булмай.

БЕЛЕП ҠУЙ!

# АҠСА ТАЛАП ИТҺӘЛӘР...

**Көндәлек тормошобоҙҙа, бушлай медицина ҡағыҙҙа ғына ҡалды инде, тигән уфтаныуҙарҙы йыш ишетергә тура килә. Ҡайһы бер анализдар тапшырыу өсөн, сикләнгән төр йүнәлештә махсуслашҡан табип-белгестәргә йүнәлтмә алыуға, ауыртыуҙы баҫыусы препарат һәм процедураларға кемдендер кеҫәһенә йәки кассаға түләүҙе талап итәләр. Шуға күрә, бушлай күрһәтелергә тейешле 10 төр медицина хеҙмәтләндереүе хаҡында һәр кемебеҙгә лә белеп ҡуйыу ҡамасауламаҫ, тип уйлайбыҙ.**

1. Ауыртыуҙы баҫыу. Дәүләт гарантияһы программаһы буйынса (ПГГ) урындағы анестезия ғына түгел, наркоз да бушлай ҡаралған.

2. Түләүле пломба. 2019 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙең бер нисә төбәгендә, шул иҫәптән Башҡортостанда, махсус лампа менән ҡатыра торған (фотополимер) пломба мотлаҡ медицина страховкаһы (ОМС) программаһына индерелде.

3. Линза ҡуйыу. Пациенттың йәшенә ҡарамайынса, юғары сифатлы яһалма күҙ яҫмыһы ҡуйыу менән бәйле бөтөн ҡиммәтле дауалауҙар ҙа бушлай булырға тейеш.

4. Яраны тегеү. Дәүләт гарантияһы программаһы буйынса йөклөлөк, сирле йөклөлөк ваҡытында, бала тыуҙырғанда һәм аборт яһатҡанда, шулай уҡ яңы тыуған сабыйға стационар һәм дарыуҙар менән ярҙам талап ителгәндә Рәсәй граждандарына амбулатор-поликлиника һәм стационар хеҙмәтләндереү бушлай башҡарыла.

5. Гормондарға анализ тапшырыу. Табип тәғәйенләүе буйынса гормондарға тикшереү үткәндә (мәҫәлән, эндокрин системаһы сирҙәрендә, йөклөлөк патологияһы, түлһеҙлек булғанда) тикшереүҙәр полис иҫәбенә башҡарыла. Башҡа осраҡтарҙа - түләүле.

6. Ашығыс тикшерелеү. Хөкүмәт ҡарарына ярашлы, беренсел медицина-санитар ярҙам күрһәткәндә, диагностикалау (рентген, маммография, функциональ диагностика, УЗИ) һәм лаборатор тикшереүҙәр - 14, компьютер томографияһы, МРТ һәм ангиография - 30, ә яман шеш сирлеләр өсөн 2 аҙнала башҡарылырға тейеш. "Сиратһыҙ" тикшерелеү үтер өсөн түләргә кәрәкмәй.

7. Талондар булмаһа. Әгәр терапевт, "быны өсөн сәбәп күрмәйем", тип пульмонолог, эндокринолог йәки шуның кеүек башҡа махсуслашҡан белгескә йүнәлтмә биреүҙән баш тарта икән, уны икенсе табипка алыштырырға нигеҙ бар, йә булмаһа, поликлиника мөдире, хатта табиптар комиссияһына тиклем мөрәжәғәт итә алаһығыҙ. Ғаризағыҙ 30 көн эсендә ҡаралырға тейеш.

8. Пациенттың үҙ поликлиникаһында медицина күрһәтмәһе буйынса тикшерелеү үтергә мөмкинлеге булмаһа, ОМС сиктәрендә уға башҡа берәй поликлиникала үтеү өсөн йүнәлтмә бирелә.

9. Тотоноу материалдары һатып алыу. Ауырыуҙың туғандары тарафынан шприц, энәләр, система, дарыуҙар һәм башҡа шундай нәмәләр һатып алыу кәрәкмәй. Дарыу препараттары һәм стационар өсөн башҡа кәрәк-яраҡ билдәле талаптарға яуап бирергә тейеш, шуға күрә пациенттар уның менән бушлай тәьмин ителә.

10. Массаж. Медицина күрһәтмәһе булған хәлдә, массаж, дауалау физкультураһы һәм башҡа дауалауаҡҡа баҫтырыу сараларыбушлай. Ләкин бындай сараларға сираттар ҙур булыу сәбәпле, көтөргә тура килгеләй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әгәр был йәһәттән ниндәйҙер тотҡарлыҡ һәм аңлашылмаусылыҡтар килеп тыуған хәлдә, медучреждение етәкселегенә мөрәжәғәт итегеҙ. Ә инде етәкселек менән был мәсьәләлә килешеүгә өлгәшелмәһә, ОМС полисы биргән ойошмаға мөрәжәғәт итегеҙ (телефоны - полиста). Әгәр ниндәйҙер хеҙмәт өсөн түләгән хәлдә (чегы бар икән) һәм бушлай хеҙмәтләндереүҙән баш тартыуҙарын иҫбатлай алһағыҙ, аҡсағыҙҙы кире ҡайтарып алыу мөмкинлеге бар.**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

Йондоҙнамә - ул психотерапияның бер төрө. Улар кешелә өмөт яңырта, тынысландыра, үҙ көсөнә ышанысты нығыта. Йондоҙнамәгә күберәк йыш депрессияға дусар булған, шикшөбһәле шәхестәр ышаныуы билдәле.

Йондоҙнамәләр кешенең үҙ-үҙенә булған баһаһын арттыра. Уларҙа бер ваҡытта ла кешенең кире сифаттары күрһәтелмәй. Күптәр йондоҙлоҡтарында бирелгән мәғлүмәткә ярарға ынтылып, йыш ҡына үҙен яҡшы яҡҡа үҙгәртә икән. Сөнки кеше психологияһында насарлыҡты кире ҡағып, яҡшылыҡҡа ынтылыу теләге тыумыштан һалынған.

Шул уҡ ваҡытта йондоҙнамәгә ышаныуҙың кире яҡтары ла бар. Ни тиһәң дә, йондоҙнамәлә анығлыҡ юҡ. Мәҫәлән, йондоҙнамәнең ун ике билдәһе тураһында мәғлүмәтте уҡып сыҡһаң, һәр береһендә лә һиңә генә хас сифаттар бар кеүек тойола.

Нисек кенә булмаһын, донъяла йәшәгән кешеләрҙе ниндәй йондоҙлоҡ аҫтында тыуыуына ҡарап, бер ҡалыпҡа һалып, уларҙың оҡшаш яҙмышы тураһында һөйләп булмай. Мәҫәлән, аҙналыҡ йондоҙнамәлә "арыҫландар"ҙы эшендә юғары үрләтәләр, тигән фараз бар, ти. Нисек инде ошо билдә аҫтында тыуған бөтөн кеше бер осорҙа етәксе булып китһен!

Йондоҙнамәгә һуҡырҙарса ышаныу кешегә үҙ ҡылығы, эше һәм тормошо өсөн яуаплы булыуға ҡамасаулай. "Ни өсөн һеҙ минән әүҙемлек, шат кәйеф талап итәһегеҙ, мин тәбиғәтем менән пессимист, ялҡау һәм меланхолик. Ышанмаһағыҙ, ана минең йондоҙнамәмдә уҡып ҡара", - тап ошолай яуап бирергә мөмкин һеҙгә йондоҙҙар ҡоло.

**Ә шулай ҙа йондоҙнамә тураһында ни уйлауҙарын һорап, бер-нисә кешегә мөрәжәғәт итеп ҡарарға булдыҡ:**

**Гөлсинә Сөнәгәтова, эшҡыуар:** Мин йондоҙнамәгә ышанмайым. Күҙәткәнем бар: хәҙер һәр бер гәзит битендә сыҡҡан күҙаллауҙар бер-береһенән бик ныҡ айырыла. Әллә нисә сығанаҡтан төрлө мәғлүмәтте уҡыған кешенең башы әйләнеп, ҡайһыһына ышанырға белмәй тик йөрөй. Өҫтәүенә, ҡайһы бер йондоҙнамәлә һинең киләсәгенде шул тиклем шомло итеп яҙып ташлайҙар. Ә бит бер ҡатлы кеше ошо кире мәғлүмәтте күнеленә яҡын алып, уның тормошҡа ашыуын көтөп йөрөй. Тимәк, ошо рәүешле ул үҙен хәүефле тулҡындарға көйләй, насар тойғолар менән йәшәй башлай. Минең өсөн бөтәһе лә үҙ ҡулымда, үҙ көсөмдә, тип иҫәпләү ышаныслыраҡ. Һәр кем киләсәк тормошон яҡты уйҙары, ниәт-маҡсаттары менән үҙе төҙөргә тейеш.

**Сәлим Хатипов, эшсе:** Йондоҙнамәне минең ҡатыным бирелеп уҡый. Таныш булмаған кеше тураһында һүҙ сыҡһа, шунда уҡ ниндәй йондоҙлоҡ аҫтында тыуыуы хаҡында һорай. Астрологтарҙың мәғлүмәтенә таянып, уның портретын хасил итә. Ул кеше менән танышҡас, ҡатыным уның менән астролог кәңәш иткән принциптарҙан сығып бәйләнештәр булдыра. Йондоҙнамәһе тап килгән дуҫтар менән аралаша, йондоҙнамә буйынса кейенә һәм ашай. Яныраҡ ҡына ниндәйҙер йондоҙнамә буйынса беҙҙең билдәләрҙең тап килмәүе хаҡында уҡыған. Хәҙер арала килеп тыуған барлыҡ ҡытыршылыҡтарҙа, аңлашылмаусанлыҡта йондоҙҙарҙы ғәйепләп тик ултыра. Уның ынғайына мин дә оҙаҡламай кешене кеше итеп түгел, ә балыҡ, кәзәмөгөҙ, ат һәм эт итеп ҡабул итә башлармын, тип ҡурҡам әле.

**Сәлиә Ғәйнетдинова, шәфҡәт туташы:** Мин йондоҙнамә менән ҡыҙыҡһыныуын ҡыҙыҡһынам. Тик артыҡ мауығып, бар йәшәү рәүешенде йондоҙҙар ҡулына тапшырыуҙы аҡылһыҙлыҡ тип һанайым. Үҙемдең тормош тәжрибәмдән сығып, шуны әйтә алам: ир һәм ҡатындың астрологик күҙлегенән тап килеү-килмәүе кеүек мәғлүмәттәргә ышанырға ярамай. Мин ҡасандыр, ошоға алданып, яраҡкан кешем менән килеп тыуған аңлашылмаусанлыҡты йондоҙҙарға япһарып, уның менән ташлаштым. Бөгөн иһә ғәйептен үҙемдә булыуын аңланым. Мөхәббәт - ул ике йөрәк бөтөнлөгө, йәндәр берлеге, ә күк есемдәренең бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡ был изге бәйләнештә. Мин Павел Глобаның китаптарын уҡыйым һәм бер йылға яһалған күҙаллауҙарға ышанғандаймын. Төрлө гәзиттә баҫылғандарҙың авторҙары һәм анығлығы булмағанлыҡтан, уларҙы уҡып та тормайым.

**Сәлимә Бәҙгетдинова, эшҡыуар:** Ҡасандыр бер районда радиола эшләнем. Ул ваҡытта йондоҙнамәләр саҡ модаға ингән осор. Интернет тигән нәмә юҡ. Аптырағас, һәр бер йондоҙлоҡ өсөн үҙем күҙаллауҙар яһай торғайным, йә булмаһа, иҫкеһен файҙаланам. Әлбиттә, был ялған, әммә халыҡҡа бик оҡшай торғайны. Үҙемде аҡлап шуны әйтә алам: һәр кемгә мин тик яҡшы, ыңғай яҙмыш вәғәҙә иттем, йәшәүгә булған ҡарашҡарын матурлыҡҡа көйләнем. Минең ялған астролог икәнемде белгән яҡындарым да, шулай уҡ мин үҙем дә ошо хәлдән һуң йондоҙнамәләргә бөтөнләй ышанмайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йондоҙнамәләр бик уҡ насар ҙа, шулай уҡ абсолют дөрөҫлөк тә түгел. Астрологтар әйтеүе буйынса, ысынбарлыҡҡа тап килгән фараздарҙы кешенең тыуған айы, көнө, сәғәте, хатта минуты менән генә бәйләп, уның индивидуаль һыҙаттарын күҙ уңында тотоп ҡына төҙөп була. Иң һәйбәте - үҙ-үҙенә астролог булыу. Көн һайын иртән тормошоғоҙҙо мөхәббәткә, һаулыҡҡа, күңел тыныслығына һәм, әлбиттә, хыялдарығыҙҙың тормошҡа ашыуына көйләһәгеҙ, барыһы ла һеҙ тигәнсә уң булыр.**

Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА
әҙерләне.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# УРАҘА - ДИЕТА ТҮГЕЛ,

## йәки Ғәмәлдәр ниәткә ҡарап баһалана



Ҡасандыр, Рамаҙан айы мәлендә бер танышымды осраттым. Бер аҙ хәл-әхүәл һөйләшә торғас, ураҙа хаҡында һүҙ сыҡты. Минең ураҙа тотоуым тураһында белгәс, танышым:

- Ураҙаның берәй файҙаһы бармы ул? - тип һорап ҡуйҙы.
- Бар, - тинем мин, һис икеләнмәйенсә.
- Ниндәй?
- Ахирәттә уның файҙаһы тейә, - тип яуап бирҙем. Танышым ни тип әйтер икән, тип, ураҙаның был донъяла тәнгә, һаулыҡҡа файҙаһы булыуы хаҡында юрый өндәшмәнем.
- Ахирәттә?.. - тип бер аҙ ғәжәпләнә бирҙе яҡташым йөҙөнә ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡ билдәһе сығарып.
- Эйе, барыбыҙ ҙа иртәме-һуңмы барасаҡ ахирәттә...

Танышым был хаҡта ни уйлағандыр, бер Алла ғына белә, әммә башҡаса ураҙа хаҡында һүҙ ҡуҙғатырға теләмәне.

Бына шулай, бик күптәребеҙ намаҙҙың, ураҙаның фәҡәт донъяуи файҙаһы хаҡында ғына уйлап, нығ хаталана. Намаҙ тураһында һүҙ сыҡһа, шунда уҡ, уның аяҡ быуындарына, ҡан тамырҙарына булған файҙаһы, ә ураҙаның ҡан баҫымына, ашҡаҙанға һәм башҡа ағзаларға булған ыңғай тәьҫире хаҡында ғына һөйләшә башлай бәғзеләр. Бына шул саҡта мин һәр саҡ: "Намаҙ - күнекмә түгел һәм ураҙаны ла диета тотоу тип һанамағыҙ", - тип әйтәм. Сөнки был ғибәҙәттәрҙең төп тәғәйенләнеше - Ислам диненең мотлаҡ үтәлергә тейешле биш терәгенең береһен атҡарып, Аллаһы Тәғәләнең ризалығына ирешеү булып тора. Ураҙаның һәм намаҙҙың барыбыҙға ла Ахирәтебеҙ өсөн, унда Раббыбыҙ алдында яуап бирер өсөн кәрәклеген белергә тейешбеҙ. Ул - Аллаһ Собхәнә үә Тәғәлә алдындағы һәммәбеҙҙең бурысы! Боронғо ата-бабаларыбыҙ бына ошо хәҡиҡәтте белгән һәм ниндәй генә ауыр йылдар булыуына ла ҡарамаҫтан, хатта бер намаҙын һәм бер көнлөк ураҙаһын ҡалдырыуҙан да ҡурҡҡан. Сөнки уларҙы һис бер сәбәпһеҙ тотмай ҡалдырыу - оло гонаһ, уның өсөн Ахирәттә һәммәбеҙ яуап бирәсәкбеҙ. Ә Ахирәт тормошоноң барлығына ышанмау - тағы ла ауырыраҡ гонаһҡа һанала, сөнки был - иман шартының береһенә ышанмау.

"Һәр ғәмәл ниәткә ҡарап баһалана", тигән Аллаһ илсеһе ғәләйһис-сәләм. Әгәр кеше ураҙаны ябығыу өсөн, һаулыҡ яҡшыртыу өсөн, ғөмүмән, диета урынына ғына ниәтләп тота икән, былдай ураҙа - тик асығыу ғына була. Шуға күрә, ураҙаны дөрөҫ ниәт менән тотоу кәрәк.

**Әйткәндәй, тиҙҙән, 6 майҙа, Рамаҙан айы тыуып, күптән көткән ураҙа башлана.**

Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

### Контраст душ

Икенсе иртәнге күнегеү - дөйөм сәләмәтләндереүсе, иммун системаһын тонуста тоторға ярҙам итеүсе контраст душ. Ваннаға баҫығыҙ һәм уңайлы температуралағы һыу менән ҡойоноғоҙ. Һуңынан уны үҙегеҙ түҙә алғанса мөмкин тиклем эҫе итегеҙ. 30-60 секундтан һуң эҫе һыуҙы ябығыҙ һәм һыуыҡ һыу ағыҙығыҙ. 20-40 секунд һыуыҡ һыу менән ҡойонғас, тағы ла эҫе һыуҙы асығыҙ һәм 20-40 секунд ҡойоноғоҙ. Артабан шулай сиратлаштырып эшләгеҙ. Был юлы һыуыҡ һыу аҫтында оҙағыраҡ торорға тырышығыҙ. Шунан тағы эҫе һыуҙы асығыҙ, иң аҙаҡтан һыуыҡ һыу менән ҡойоноғоҙ. Һыу ағымын бер ерҙә генә тотмағыҙ, тотош тәнегеҙгә ҡойоғоҙ. Барлығы 3-5 контраст эшләнә. Процедура һыуыҡ һыу менән тамамлана. Душта түгел, тас йәки биҙрә менән ҡойонорға була. Үҙегеҙҙе контраст душҡа яйлап өйрәтегеҙ. Тәүҙә ике аҙна дауамында уртаса температуралағы душ ҡабул итегеҙ, һуңынан, һалҡын һыу аҫтында 5-10 секунд тороп, бер контраст эшләгеҙ. Бер аҙнанан һуң ике этапҡа күсегеҙ, артабан - өскә. Башта температура нығ үҙгәрмәҫкә тейеш, йәғни һыу нығ эҫе лә, нығ һыуыҡ та булмаһын, йылымыс һәм һалҡынса ғына булһын. Әммә нығ һыуыҡты тоя башлау менән шунда уҡ боҙло һыуға күсергә кәрәк. Был нескәлектәрҙе белмәгән күптәр температураны артабан да әкренләп кенә түбәнәйтергә тырыша, әммә 19-20 градусҡа еткәс һалҡын алдыра. Ни өсөн? Сөнки былдай температуралы һыу тәнде һыуыта, әммә ул организмдың үҙен тергеҙә торған механизмдары эшләй башлаһын өсөн етерлек һыуыҡ түгел. Ҡапыл ғына ҡыҫҡа ваҡытлы боҙло һыу менән ҡойоноу йылыны күп алмай, әммә йылылыҡты көйләү һәм иммунитет барлыҡҡа килтереү механизмын эшләтеп ебәреүгә көслө йоғонто яһай.

### Күҙҙәр өсөн ванна

Душтан һуң күҙҙәрегеҙгә ванна эшләгеҙ. Кистән түбәндәге төнәтмәне әҙерләп ҡуйығыҙ: 1 бал ҡалағы йәшел сәй менән 1 стакан ҡайнаған һыу.

Иртән бер бал ҡалағы төнәтмәне алып, күҙҙәргә йыуырға һәм бер уҡ ваҡытта күҙҙәрҙе хәрәкәтләндерергә, уларҙы йомоп алырға кәрәк. Йәшел сәйҙә таниндар, коллоид көмөш бар: был матдәләр күҙҙең шекәрәһен метаболизм ҡалдыҡтарынан таҙарта.

### Күҙ ҡабаҡтарына массаж

Артабан еңелсә массаж яһайбыҙ. Күҙҙәрҙе йомоп, баҫым эшләмәй генә, һыпырған хәрәкәттәр яһап, урта бармаҡ менән аҫҡы ҡабаҡтарҙы 15-20 секунд массажлайбыҙ.

### "Еңелсә күҙ йомоу" күнегеүе

Киләһе күнегеү - күҙ йомоу. Тиҙ һәм еңел генә итеп күҙ ҡабаҡтарын йомоп асығыҙ, улар көсөргәнештә булмаһын. Күнегеүҙең оҙайлығы - 30-60 секунд. 1 минутҡа күҙҙәрегеҙҙе ябығыҙ һәм уларҙы көсөргәнештән арындырығыҙ. Был торош күҙҙәргә яҡшы ял бирә, ҡан әйләнешен яҡшырта. Күҙҙәргә былдай ял биреүҙе аҙ ғына арығанлыҡ тойолоу менән башҡарырға һәм күнегеүҙәрҙе аралаштырып эшләргә кәрәк.

С. КУЗИНА.
(Дауамы бар).



## 22 АПРЕЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.20 "Сегодня 22 апреля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.15 "Сегодня вечером". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Лучше, чем люди". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Познер". [16+]
1.30 Т/с "Агент национальной безопасности". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Т/с "Агент национальной безопасности". [16+]
3.25 "Мужское / Женское". [16+]

## РОССИЯ 1

5.00 Профилактика на канале с 5.00 до 12.50.
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир".
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Девять жизней". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым".
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

## БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Наука 102. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 20.00, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Полезные новости. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**23.15 Колесо времени. [12+]**
**0.15 Т/с "Охота на гауляйтера". [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Море мечты". [12+]**
**4.30 Т/с "Охота на гауляйтера". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 23 АПРЕЛЯ
## ВТОРНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.20 "Сегодня 23 апреля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Лучше, чем люди". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Т/с "Агент национальной безопасности". [16+]
2.45 "Модный приговор". [6+]
3.00 Новости.
3.05 "Модный приговор". [6+]
3.40 "Мужское / Женское". [16+]

## РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир".
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Девять жизней". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым".
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

## БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 С мотором... [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**23.15 Күстәнәс. [12+]**
**23.45 Замандаш. [6+]**
**0.00 Т/с "Охота на гауляйтера". [12+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**4.30 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 24 АПРЕЛЯ
## СРЕДА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.20 "Сегодня 24 апреля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Лучше, чем люди". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Т/с "Агент национальной безопасности". [16+]
2.45 "Модный приговор". [6+]
3.00 Новости.
3.05 "Модный приговор". [6+]
3.40 "Мужское / Женское". [16+]

## РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир".
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Девять жизней". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

## БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.00, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**17.15 Точка зрения ЛДПР. [16+]**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00 Историческая среда. [12+]**
**19.30 "Бирешмә!" [6+]**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**23.15 Workshop по-башкирски. [6+]**
**23.45 Современник. [12+]**
**0.00 Т/с "Охота на гауляйтера". [12+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Любишь - не любишь?" [12+]**
**4.15 Весело живем. [12+]**
**4.30 "Бай". [12+]**
**5.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 25 АПРЕЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.20 "Сегодня 25 апреля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Лучше, чем люди". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Т/с "Агент национальной безопасности". [16+]
2.45 "Модный приговор". [6+]
3.00 Новости.
3.05 "Модный приговор". [6+]
3.40 "Мужское / Женское". [16+]
4.25 "Контрольная закупка". [6+]

## РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир".
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Девять жизней". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым".
1.40 "41-й Московский международный кинофестиваль. Торжественное закрытие".
2.50 Т/с "Морозова". [12+]

## БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 С мотором... [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**23.15 "Песня года". [12+]**
**23.45 Замандаш. [6+]**
**0.00 Т/с "Охота на гауляйтера". [16+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Наркэс". [12+]**
**4.45 Весело живем. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 26 АПРЕЛЯ
## ПЯТНИЦА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 26 апреля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Сегодня вечером". [16+]
23.30 "Голос. Дети". Новый сезон. Финал.
1.45 "Вечерний Ургант". [16+]
2.40 Х/ф "Как выйти замуж за миллионера". [12+]
4.15 "Модный приговор". [6+]

## РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир".
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Х/ф "Соседи". [12+]
1.30 Х/ф "Запах лаванды". [12+]

## БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00, 16.00, 17.30, 20.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 Весело живем. [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Д/ф "Миссия дружбы". [12+]**
**17.00 Д/ф Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 У дачи. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Т/с "Охота на гауляйтера". [16+]**
**1.30 Спектакль "Февраль. Буран". [12+]**
**3.00 Т/с "Охота на гауляйтера". [12+]**

## 27 АПРЕЛЯ
## СУББОТА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.00 Новости.
6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.30 Х/ф "Двое и одна". [12+]
8.10 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.55 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Голос. Дети". На самой высокой ноте". [0+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости.
12.10 "Идеальный ремонт". [6+]
13.20 Премьера. "Живая жизнь". [12+]
16.30 Х/ф "Двое и одна". [12+]
17.45 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.20 "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. Финал.
23.40 Д/ф "Святая Матрона. "Приходите ко мне, как к живой". [12+]
0.40 "Пасха". [0+]
1.30 Пасха Христова. Прямая трансляция богослужения из Храма Христа Спасителя.
4.30 Д/с "Россия от края до края". [12+]

## РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Х/ф "Жизнь без Веры". [12+]
13.40 Х/ф "Напрасные надежды". [12+]
17.30 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
23.10 Х/ф "Сердечная недостаточность". [12+]
1.30 "Пасха Христова". Прямая трансляция Пасхального богослужения из Храма Христа Спасителя.

## БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 12.30, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 М/ф "Чичиленд". [0+]**
**8.45 "Большой чемодан. [6+]**
**9.30 Моя вершина. [12+]**
**9.45 С мотором... [12+]**
**10.00 Күстәнәс. [12+]**
**10.30 "Крепкие корни Башкортостана". [0+]**
**13.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Бейеү-шоу! [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2019". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 Д/ф "Благословенно дерево". [0+]**
**23.45 Пасхальная служба из кафедрального собора Рождества Богородицы города Уфы.**
**3.00 Итоги недели (на баш. яз.).**
**3.45 Спектакль "Бесприданница". [12+]**

## 28 АПРЕЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.40 Х/ф "Неоконченная повесть". [0+]
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Неоконченная повесть". [0+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки". [12+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф "Святая Матрона. "Приходите ко мне, как к живой". [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф Премьера. "Андрей Миронов. Скользить по краю". [12+]
13.20 Х/ф "Три плюс два". [0+]
15.15 Премьера. "Бал Александра Малинина". [12+]
17.00 Премьера. "Ледниковый период. Дети". Новый сезон. [0+]
19.25 "Лучше всех!" [0+]
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
0.45 Х/ф "Механика теней". [16+]
2.25 "Модный приговор". [6+]
3.10 "Мужское / Женское". [16+]

## РОССИЯ 1

4.30 Т/с "Сваты". [12+]
6.35 "Сам себе режиссёр".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Т. Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Смеяться разрешается.
13.25 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
15.00 Д/ф "Блаженная Матрона". [12+]
16.00 Х/ф "Ты только будь со мною рядом". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.30 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.05 Т/с "Гражданин начальник". [16+]

## БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 "Песня года". [12+]**
**10.00 Бирешмә. Профи. [6+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [0+]**
**12.00 Бай баҡса. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.45 Пасхальное послание митрополита Уфимского и Стерлитамакского Никона. [0+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Д/ф "Вижу музыку". [6+]**
**17.30 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**17.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**18.00 Д/ф "Глазами и сердцем". [12+]**
**19.00 "Как "Уфанет" создает "Весенний бал". [12+]**
**19.45 Лидеры региона. [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.00 Республика Live. [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 "Байыҡ-2019". [12+]**
**0.15 Т/с "Охота на гауляйтера". [12+]**
**1.15 Спектакль "Часы с кукушкой". [12+]**
**3.30 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**4.30 Т/с "Охота на гауляйтера". [12+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

*ИҒЛАН*

**"БР Өфө ҡалаһы Хужалыҡ иҫәбендәге поликлиника" Муниципаль унитар предприятиеһына талап ителә:**

**невролог,**
**кардиолог,**
**онколог,**
**офтальмолог,**
**аллерголог-иммунолог,**
**зал администраторы,**
**мануаль терапевт.**

**Талаптар:** вазифа буйынса профессиональ стандарттарға тура килеү, үҙ көсөндәге сертификат булыуы мотлаҡ.

**Шарттар:**
- эшкә рәсми урынлаштырыу;
- социаль пакет;
- эш хаҡы ваҡытында түләнә;
- татыу коллектив.

**237-68-56** телефоны буйынса кадрҙар бүлегенә мөрәжәғәт итергә. **Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 62/2.**

Резюме өсөн электрон почта: **muhp@yandex.ru**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Апрель (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (17) дүшәмбе | 4:30 | 6:00 | 13:30 | 19:00 | 20:30 | 22:00 |
| 23 (18) шишәмбе | 4:28 | 5:58 | 13:30 | 19:02 | 20:32 | 22:02 |
| 24 (19) шаршамбы | 4:25 | 5:55 | 13:30 | 19:04 | 20:34 | 22:04 |
| 25 (20) кесе йома | 4:23 | 5:53 | 13:30 | 19:06 | 20:36 | 22:06 |
| 26 (21) йома | 4:21 | 5:51 | 13:30 | 19:08 | 20:38 | 22:08 |
| 27 (22) шәмбе | 4:19 | 5:49 | 13:30 | 19:10 | 20:40 | 22:10 |
| 28 (23) йәкшәмбе | 4:16 | 5:46 | 13:30 | 19:12 | 20:42 | 22:12 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

**Күптән түгел Санкт-Петербург тау университетында тау-геология, нефть һәм газ, энергетик, машина төҙөү һәм металлургия йүнәлеше буйынса белем алған студент һәм аспиранттарҙың XVII Бөтә Рәсәй конференция-конкурсына йомғаҡ яһалды. Еңеүселәр рәтендә Күгәрсен районы егете, Башҡорт дәүләт университеты география факультетының 4-се курс студенты Шамил ВӘЛИТОВ та бар. Илдең 42 юғары уҡыу йортонан килгән 260 ҡатнашыусы араһында үҙен лайыҡлы күрһәтеүсе егеттән тәьсораттары менән бүлешеүен һораныҡ.**



# БАРЫҺЫ ЛА ҮҘ ҠУЛЫМДА!

- Конференцияла 7 секция эшләне. Мин "Миндеғол файҙалы ҡаҙылмалары сығара торған урында силурий периоды һәүерташтарының (сланец) формалашыу шарттары һәм геохимик үҙенсәлектәре" исемле доклад менән сығыш яһап, 1-се дәрәжә дипломға лайыҡ булдым. Еңеүселәрҙең береһе булараҡ, мин майҙа ошо уҡ университетта уҙасаҡ "Ер аҫтын ҡулланыуҙың актуаль проблемалары" Халыҡ-ара йәш ғалимдар форумында ла ҡатнашасаҡмын. Унда Рәсәйҙән генә түгел, ә Австрия, Бөйөк Британия, Германия һәм башҡа сит илдәрҙән 200-ҙән ашыу кеше ҡатнашыуы көтөлә.

Ауылда тыуып үҫкән һәр кем тәбиғәткә яҡын була. Мин дә тәбиғәтте яратам һәм мәктәп йылдарынан алып география фәне менән ҡыҙыҡһындым. Уҡытыусым Илгиз Ирәндек улы етәкселегендә төрлө кимәлдәге олимпиада һәм конференцияларҙа үҙемде һынап ҡараным. Мәктәпте тамамлағас, маҡсатлы рәүештә БДУ-ның география факультетына уҡырға индем. Бындағы атмосфера, уҡытыусылар, айырыуса тәбиғәттә үткәрелгән практикалар оҡшай. Һөнәрем буйынса уҙғарылған төрлө конференция һәм ғилми сараларҙа ла ихлас ҡатнашам. Тырышлығым баһалана, еңеүҙәр ҙә урап үтмәй. 2016 йылда "БДУ-ның йәш ғалимы" конкурсында еңдем, Мәскәүҙә геологик практика буйынса уҙғарылған конференцияла 3-сө урын яуланым. Шулай уҡ Новосибирск, Екатеринбург һәм Өфөлә үткән конференцияларҙа сығыш яһағаным булды. Ғөмүмән алғанда, геолог һөнәрен һайлап яңылышмағанмын, сөнки бөтә күнелемде биреп уҡыйым, үҙемә оҡшаған өлкәлә эшләйем. Ғилми эҙләнеүҙәр менән булырға яратам, шуға артабан магистратураға уҡырға инергә һәм киләсәк тормошомдо фәнгә арнарға уйлайым. Маҡсат бар, тимәк, уға табан атларға һәм тормошҡа ашырырға кәрәк. Барыһы ла үҙемдең ҡулымда.

Санкт-Петербургта ла, Тау университетында ла беренсе тапҡыр булдым һәм улар миндә һоҡланыу тойғолары ғына ҡалдырҙы. Мәҙәни яҡтан шундай бай, мөһабәт ҡала. Ә университетҡа беҙҙең башҡорт мәғдәнсеһе Исмәғил Тасимовтың нигеҙ һалыуы, уның башлынғысының дауам итеүе күңелемдә ғорурланыу тойғоһо тыуҙырҙы. Минең докладымды иғлан иткәндә Башҡортостандан булыуымды билдәләп үтеүҙәре ошондай олуғ шәхесебеҙҙең исеменә тап төшөрмәҫлек итеп сығыш яһарға этәргес бирҙе.

Университет үҙенең масштабы менән иҫте китәрә. Мине, булаcаҡ геологты, иң ҡыҙыҡһындырғаны ундағы тау музейы булды. Ул үҙенә уникаль коллекциялар туплаған иң бай һәм ҙур, бөтә донъя кимәлендә тәбиғи-фәнни профилдәге тәүге өсәү рәтенә ингән музей. Ундағы экспонаттарҙы ҡарап, тәбиғәттең шул тиклем дә бай булыуына һоҡланырға ғына ҡала, сөнки таштарҙың ғына әллә күпме төрө тупланған бында. Беҙҙең Башҡортостанда ла таш, минерал һәм башҡа файҙалы ҡаҙылмалар бик күп, уларҙы тәбиғәткә зыян килтермәй генә файҙаланыу мөһим. Һәм минең, геолог булараҡ бурысымдың береһе, ошо талаптың боҙолоуына юл ҡуймау.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# ЭШЛӘТЕРГӘМЕ, ЮҠМЫ?

**Башҡортостанда ҡыҙылсаға ҡаршы 7,5 мең кешенең, шул иҫәптән 2890 баланың прививкаһы юҡ. Былтыр республикала ҡыҙылса менән ауырыуҙың 35 осрағы теркәлһә, шул иҫәптән 17 йәшкә тиклемге 14 бала, быйыл дүрт осраҡ асыҡланған.**

Был сирҙән һаҡланыуҙың берҙән-бер ысулы булып вакцинопрофилактика тора. Республикала 1 апрелдән 1 октябргә тиклем ата-әсәләре прививканан баш тартҡан йәки медицина күрһәткестәре буйынса прививка эшләнмәгән балалар һәм "хәүеф" төркөмөнә ингән ололар араһында вакцинация үткәрелә. Профилактик прививкалар медстраховка полисы теркәлгән урын буйынса эшләнә, бының өсөн участка табибына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ҡыҙылсаның төп билдәләре - юғары температура, тымау, йүтәл, күҙҙәрҙең ҡыҙарыуы һәм йәш ағыуы, ауыҙ ҡыуышлығындағы ваҡ аҡ таптар. Бер нисә көндән биттә һәм муйындың өҫкө өлөшөндә ҡыҙыл таптар күренә башлай, йәйләп ул бөтөн тәнгә тарала һәм иң аҙаҡтан ҡулдарға һәм аяҡтарға сыға. Сир хәүефле эҙемтәләре менән ҡурҡыныс: былтыр ҡыҙылсанан прививка эшләнмәгән 11 айлыҡ сабый вафат булған.

# ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ: ТАЛПАН!

**Башҡортостанда йәшәүселәрҙең Рәсәй почтаһы бүлексәләрендә үҙҙәрен һәм яҡындарын талпан ҡаҙалыуҙан страховкалау мөмкинлеге бар - унда "Талпанға ҡаршы" ирекле страховкалау программаһында теркәлергә була. Талпан тешләгән осрафта, страховкаланган кешегә бөтә Рәсәй биләмәһендә квалификациялы медицина ярҙамы күрһәтелә.**

Программа амбулатор-поликлиника ярҙамы алырға, талпан энцефалиты менән сирләп киткән осраҡта ашығыс рәүештә дауаханаға ятырға, дауаланырға мөмкинлек бирә. Өҫтәүенә, ярҙам һорап күпме кәрәк, шунса тапҡыр, страховка аҡсаһы бөткәнсе мөрәжәғәт итергә мөмкин буласаҡ. Яңы тыуған сабыйҙы ла, оло йәштәге кешене лә страховкаларға мөмкин. Полисты почта бүлексәһе операторҙары, шулай уҡ өйҙә почтальондар тултыра. 1 апрелгә республиканың Гигиена һәм эпидемиология үҙәгенә һәм уның филиалдарына ете кеше талпан ҡаҙалыуға зарланып мөрәжәғәт иткән. Лабораторияларҙа талпандарҙың энцефалит һәм боррелиоз менән зарарланғанмы, юҡмы икәнен тикшерәләр.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ



# ҘУР ЕҢЕҮ

**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының "Зөләйха күҙҙәрен аса" спектакле "Алтын битлек" Рәсәй милли театр премияһы баһаламаның Махсус номинацияһына лайыҡ булды. Ул "Гүзәл Яхинаның "Зөләйха күҙҙәрен аса" романын сәхнәләштереү өсөн" тип атала.**

"Алтын битлек" фестивале лауреаттарын бүләкләү тантанаһында был премияны алыу өсөн Ҙур театр сәхнәһенә спектаклдең режиссеры Айрат Абушахманов, рәссам Альберт Нестеров, Зөләйха ролен башҡарыусы Римма Ҡаһарманова, ут буйынса рәссам Илшат Сәйәхов, театр директоры Иршат Фәйзуллин сыҡты. Спектакль 6 номинация буйынса конкурсҡа тәҡдим ителгәйне.

# БАШҠОРТСА ЙӘНҺҮРӘТ ТӨШӨР!

**"BashMult" фестиваль-конкурсы башҡорт йәнһүрәттән популярлаштырыуға һәм һәләтле ҡатнашыусыларҙы йәнһүрәттәр төшөрөүгә йәлеп итеүгә йүнәлтелгән. Ул 2016 йылдан алып үткәрелә.**

Конкурста 7-9 һәм 10-14 йәшлек балалар, 15-17 йәшлек үсмерҙәр, 18 йәштән өлкәндәр ҡатнаша ала. Индивидуаль ҡатнашыусылар өсөн "Мажаралар донъяһы" (мажаралар тураһында йәнһүрәттәр, серҙәр һәм сәйәхәттәр), "МультИлһам" (изгелек, мөхәббәт һәм дуҫлыҡ хаҡында йәнһүрәттәр) номинациялары ҡаралған. Уҡыусыларҙың (белем биреү учреждениелары, балалар клубтары, үҙәктәре һәм берләшмәләре) коллектив эштәре "Күнелле классика" (әҙәби әҫәрҙәр буйынса йәнһүрәттәр); "Замандарҙы бәйләүсе еп" (Башҡортостандың 100 йыллығына, уның мәҙәниәтенә, тарихына һәм милли йолаларына арналған йәнһүрәттәр) номинацияларында баһаланасаҡ. Эштәр 1 октябргә тиклем ҡабул ителә, 16 ноябрҙә конкурсҡа йомғаҡ яһала һәм бүләкләү тантанаһы уҙа. Ғаризалар Өфө ҡалаһы, Комаров урамы, 7, Хәрби дан музейында ҡабул ителә. Электрон почта: bashmult@mail.ru, телефон: 8 (347) 260-44-64.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 апрель "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия 12+

**21 апрель "Баллы, тирәкле Балтирәк"** (А. Ишбулдина), лирик комедия 12+

**25 апрель "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), замангса комедия 12+

**26 апрель "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23 апрель "Йәләлетдин атай"** (М. Кәрим), уйланыу 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**20 апрель "Красная шапочка"** (Ш. Перро). 12.00, 14.00 0+

**21 апрель "Вот так репка!"** (И. Токмакова). 12.00, 14.00 0+

**26 апрель "Хроники путешествия Нильса"** (И. Әлмөхәмәтов). 19.00 6+

ИЖАДХАНА

# МИЛЛИ СӘНҒӘТ ҺАҠЛАНҺА,

## телебеҙ ҙә, рух та һаҡланасаҡ



**Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының быйылғы 80-се ижад миҙгеленең бөтөн тамашалары ла "ФиларМоңия" тигән девиз-атама аҫтында үтте. Ысын мәғәнәһендә моң донъяһы ул филармония - халыҡ йырҙары, джаз ритмдары, милли эстрада музыкаһы, академик вокал сәнғәте... Зауығына ҡарап, һәр тамашасы музыка сәнғәтенең төрлө-төрлө йүнәлештәрендәге концертты һайлап йөрөү мөмкинлегенә эйә. Баш ҡалала тиңе лә, конкуренты ла булмаған был сәнғәт усағы ниндәй уй-ниәттәр менән йәшәй? Филармонияның эстрада буйынса художество етәксеһе, баш режиссер Сулпан Раил ҡыҙы АСҠАРОВА менән ошо һәм сәнғәт донъяһына ҡағылышлы башҡа темалар тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

**Һәр ойошманы унда эшләгән шәхестәре бар итә. Ғәҙәттә, ниндәй ҙә булһа ойошма тураһында һөйләйбеҙ икән, шунда уҡ уның йөҙөн тәшкил иткән аныҡ кешеләрҙе иҫкә төшөрәбеҙ. Һеҙҙең өсөн башҡорт филармонияһы кемдәр ул?**

- Һуңғы йылдарҙағы ижади эшмәкәрлегем күберәк театр донъяһы менән бәйле булһа ла, республика филармонияларын яҡшы беләм. Минең Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһына эшкә килеүем уның 80-се - юбилей миҙгеленә тура килде. Шуға ла мин быға тиклем ошо ойошма менән бәйләп ҡараған шәхестәр исемлеге тағы ла артты, тип әйтер инем. Ғөмүмән, башҡорт профессиональ сәнғәтен булдырыу һәм үҫтереүҙә Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың роле ҙур булыуын беләбеҙ. Ауылдарҙан һәләтле йәштәрҙе йыйып, Мәскәүҙә консерваторияларҙа уҡыта. Диана Нурмөхәмәтова, Хәбир Ғәлимов, Баныу Вәлиева, Ғабдрахман Хәбибуллиндар, композиторҙар Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтовтар һ.б. шулар рәтенән. Филармонияла эстрада йүнәлешенең сәскә атыуы иһә Фәриҙә Ҡудашева, Мәғфирә Ғәлиева, Наил Ғәлиев (Николай Голов), Бәхти Ғайсин, Сөләймән Абдуллин, Рамаҙан Йәнбәков ижады менән бәйле. Беҙҙең быуын ошо быуын кешеләрен күберәк беләлер, моғайын.

1939 йылдың ғинуарында хөкүмәт ҡарары менән эш башлаған Башҡорт филармонияһы баштан уҡ төрлө ижади йүнәлештәрҙе үҙ эсенә ала. Был мәлгә Фәйзи Ғәскәров бейеү ансамбле төҙөй, Заһир Исмәғилев, Ғата Сөләймәновтар ҡурайсылар ансамбле йыя, уларҙан тыш, музыкаль-әҙәби лекторий, хор, оперетта һәм хатта эстрада-цирк бригадаһы була. Һуғыш йылдарында фронт бригадалары эшләй, яртышар йыллап һуғышта сығыш яһайҙар. Ҡалала ҡалған артистарҙы утын әҙерләү кеүек эштәргә лә йөрөтәләр, был турала ла ҡарарҙар һаҡланған. Профессиональ сәнғәткә нигеҙ һалыусы ул быуындың иңенә ниндәй генә ауырлыҡтар, ниндәй генә эштәр төшмәгән, тип уйлайһың ошоларҙы белгәндән һуң. Башҡорт сәнғәтен үҫтереүгә һалған өлөштәрен иһә баһалап та булмай. Ҡурайҙы, башҡорт халыҡ йырҙарын ниндәй кимәлгә күтәргәндәр! Шуға ла уларға ҡарата ихтирамыбыҙ сикһеҙ.

**Ошондай бай тарих һеҙҙе "80 йондоҙло йыл - 8 кистә" тигән тематик концерттар серияһын эшләргә этәргәндер?**

- Ысынлап та, юбилей йылында ошо тарих тураһында һөйләмәһәк, дөрөҫ булмаҫ ине. 8 кискә бүлеп, лекторийҙан башлап, Башҡорт халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры, БР Дәүләт академия хор капеллаһы, Эстрада-джаз оркестры, композиторҙарға, айырым эстрадаға арналған концерттар үтте. Ихлас ҡына тамаша килеп сыҡты, халыҡ та күпләп йөрөнө уларға. Хәҙер беҙҙең алда тағы ла бер еңел булмаған мәсьәлә тора - 80-се ижад миҙгелен ябыу концертын ойоштороу. Тарихты ла, легендар йырсыларыбыҙҙы ла, йәш артистарыбыҙҙы ла күрһәтке килә. Нисек итеп ошо тиклем байлыҡты бер концертҡа һыйҙырырға - ошо хаҡта уйлайбыҙ. Гала-концерт 27 майға тәғәйенләнгән.

**Һеҙ филармонияла эстрада йүнәлешен етәкләйһегеҙ, дөйөм башҡорт эстрадаһы тураһында һүҙ йөрөткәндә, һеҙҙе күберәк нимә борсой?**

- Әлеге мәлдә профессиональ эстрадала һынылыш осоро бара тип уйлайым. Беҙҙә профессиональ яңғыҙ бейеүселәр юҡ кимәлендә. Әйтәйек, Рәшиҙә Туйсина, Зөлфиә Ҡудашева, Гүзәл Мамина кеүек данлыҡлы бейеүселәребеҙгә алмашҡа кем киләсәк? Яңғыҙ ир-егет башҡарыусылар юҡ кимәлендә. Сәхнәне тултырып бейей, башҡорт бейеүҙәрен үҫтерә торғандарҙы көтәм. Гөлдәр Моратоваға рәхмәтлемен, ваҡытында беҙҙе, бер төркөм бейеүселәрҙе, Мәскәүгә балетмейстерҙар курсына уҡырға ебәрҙе. Хәҙер ҙә кәрәк беҙҙең һәләтле ҡыҙ-егеттәребеҙгә ошондай курстар.

Халыҡ йырҙарын башҡарыусы йәштәргә иғтибар булһын ине. Яңыраҡ "Карауан" егеттәре менән Ҡаҙанда, Ваһапов исемендәге бәйгелә ҡатнашып, еңеүсе булып ҡайттыҡ. Ойоштороусылар һаман шылтырата, йырҙарығыҙ шундай моңло ла, көслө лә, киң диапазонлы ла, тип. "Оҙон көй", "Ирәндек моңдары" кеүек конкурс үткәреү генә етмәй, оҫталыҡ дәрестәре кәрәк. Абдулла Солтанов иҫән саҡта алып барһындар уға егеттәрҙе, ул уларҙы тыңлаһын, кәрәк ерендә төҙәтһен, кәңәш бирһен. Ҡурай менән халыҡ йырҙарын үҙ ҡурсыуы аҫтына алған продюсерҙар килеп сыҡмаҫмы икән? Дөйөм сәнғәт донъяһында уникаль күренеш бит улар.

**Филармониялағы эстрада үҫешен нисек баһалайһығыҙ?**

- Әлеге мәлдә Рәсәйҙә бер филармонияла - Башҡортостанда ғына эстрада йүнәлеше бар. Башҡа ерҙә күптән ябылып бөттө улар. Хөкүмәткә рәхмәт, ваҡытында һаҡлап ҡала алғандар. Ә филармония артисҡа профессиональ стаж һәм, иң мөһиме, статус бирә. Мөмкинлек булғанда, костюм, фонограмма менән ярҙам итергә тырышабыҙ. Эстрадала ғына 75-кә яҡын артист, бынан тыш яҡтыртыусылар, тауыш операторҙары һ.б. бар, шуға ла гел генә мөмкинлек булып та тормай. Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры яңынан-яңы әҫәрҙәр эшләй, "Арғымаҡ"тар әле генә донъя кимәлендә ҙур еңеү яулап ҡайтты, Эстрада-джаз оркестрын Рәсәйҙең һәр төбәгендә көтөп алалалар. Ошолай һанай башлаһаң, һәр жанр йүнәлешендә уңыштар бар. Балаларға иғтибар көслө, үҫмерҙәр филармонияһы бар, "Салауат" балалар бейеү академияһы Санкт-Петербургта беренсе урын алды. Малайҙар капеллаһына әле үҫергә лә үҫергә. Артистарыбыҙға һорау ҙур, хөкүмәт кимәлендәге концерттар, сит төбәктәргә, илдәргә делегациялар составында ла сығыш яһайҙар. Әлеге мәлдә беҙҙең иң ҙур проблема - тамашасы юҡлығы. Өфөлә генә түгел, райондарҙа ла. Программалар насар тиер инең, һәр концерттан һуң тик маҡтау һүҙҙәре генә әйтәләр, яҙалар.

**Сибайҙар баш ҡалаға килһә, зал тултырып тамашасы йыя. Ни өсөн тамашасы уларға бара һуң?**

- Быға аныҡ ҡына яуап биреүе лә ауыр. Ваҡытында үҙем дә Сибай филармонияһында Гөлназ Аҡназарова етәкселегендә эшләнем. Беҙҙең үҙебеҙҙең стилебеҙ бар ине. Иҫләһәгеҙ, Учалы филармонияһы ла үҙенең стиле менән айырылып тора ине. Һуңғы ваҡытта Стәрлетамаҡ бейеү театрына: "Ҡайтарығыҙ Хәлил Ишбирҙиндың стилен", - тип йыш әйтәм. Нефтекамаға стилде Саттаров бирҙе. Һәр коллектив үҙенең стиле менән үҙенсәлекле. Әгәр ҙә улар бер-береһенә оҡшай башлаһа, үҫеш булмаясаҡ.

Һуңғы йылдарҙа театрҙар режиссерҙар уҡытып алды. Ә бына концерттар эшләй торған белемле ҡыҙ-егеттәребеҙ юҡ. Башҡорт рухын, башҡорт сәнғәтен аңлаған һәм ҡәҙерләгән режиссерҙар булырға тейеш. Бер йыллыҡ иғтибарһыҙлыҡ һөҙөмтәһендә юғалтҡанды кире тергеҙеү өсөн ун йыл ваҡыт кәрәк. Ә милли сәнғәттең әһәмиәте ҙур, ул һаҡланһа, телебеҙ ҙә, йөрәгебеҙҙәге рух та һаҡланасаҡ.

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠҺАҠ ЙӨРӨП ТУҠТАМАҪ,

## һуҡыр күреп туҡтамаҫ

Иҙел күрмәй итек һалма, ир танымай әйтә һалма.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡайһы саҡта беҙ кемделер түбәнһетеү өсөн икенсе берәүҙе күтәрәбеҙ...

**(Ф. Ларошфуко).**

Үҙҙәре ышанып етмәһә лә һинең турала гел насарҙы һөйләгән, һине күрә алмаған дошмандар һәм һинең турала бар яҡшыны белеп тә бер һүҙ ҙә әйтмәгән дуҫтар араһында нисек йәшәмәк кәрәк?!

**(А. Ривароль).**

Кеше ысындан да маймылға оҡшаған шул: юғарыға үрмәләгән һайын, арт һынын ғына күрһәтә.

**(Ф. Бэкон).**

Кешеләрҙең йәшәү шарттарын яҡшыға төҙәтегеҙ - ул саҡта кешеләр был шарттарға лайыҡлы булырға тырышасаҡ.

**(Х. Флэтчер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡайҙалыр Көнсығышта йәшәгән бер байҙың ун ҡатыны булған. Бай үҙенең ҡатындарын яратҡан, хәстәрләгән, уларҙың һәр теләген, һәр ихтыяжын үтәгән. Ә ҡатындарының барыһы ла үҙҙәренең уҫаллығы һәм һаранлығы менән дан тотҡан. Улар үҙ-ара пыр туҙышып талашыуҙан бушамаған. Ә бай ире алдында фәрештә булып ҡыланған, ике йөҙлөләнгән.**

**Бына Көнсығышта ҡоролош алышына. Күп ҡатын менән йәшәгән ирҙәр әхлаҡһыҙ тип иғлан ителә. Әлеге байҙы ла хөкөм итеп, һөргөнгә оҙаталар, ә ҡатындарына ирек бирәләр. Ҡатындар төрлөһө-төрлө яҡҡа таралыша, ҡайһыһылыр яңынан кейәүгә сыға. Ләкин яңы никах уларға бәхет килтермәй. Сөнки гел талашҡа өйрәнгән ҡатындар яңы тормошта ла шул ғәҙәтен ҡуймай. Һөргөндәге ир ҡатындарының, балаларының яҙмышын уйлап, йыш ҡына күҙ йәштәре түгә, ти. Бына шулай сираттағы тапҡыр тәрән уйҙарға сумып ултырғанда бер ҡарт иргә: "Ниңә бик ҡайғыға ҡалдың әле?" - тип өндәшә. "Ҡатындарымды уйлайым. Мин улар тураһында ҡулдан килгәнсә хәстәрлек күрҙем, барыһын да яраттым. Ә мине шуның өсөн әхлаҡһыҙ тип атанылар. Тимәк, мин хәҙер ожмахҡа эләкмәйәсәкмен бит инде..." "Юҡҡа ҡайғыраһың, - ти ҡарт. - Мин һинең ғаиләңде нисек ратҡаныңды, хәстәрләгәнеңде яҡшы беләм. Мөхәббәт менән йәшәгән кешенең урыны, әлбиттә, ожмахта. Ә бына ҡатындарың ожмахҡа эләкмәҫ, сөнки улар һине яратманы, ике йөҙлөләнде генә. Мөхәббәтһеҙ йәшәүҙән дә оло гонаһ юҡ". Ошо һүҙҙәрҙән һуң ир кеше ҡатындары өсөн тағы ла нығыраҡ ҡайғырып, илап ебәргән, ти. Уның күҙ йәштәре, әлбиттә, уның игелекһеҙ ҡатындарын тамуҡтан һаҡлап алып ҡалған, ти".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 19 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 4077
Заказ - 316